ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 июль (майай) 2022

№28 (1018)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Өфөнөң матур йөҙө



5

Урмандарға керһәң...





6

Боронғо Башҡортостан



7

Тыуған яҡтың туған институты



8-10

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! Шулай итеп, гәзит-журналдарға яҙылыуҙың бер миҙгеле тамамланды, икенсеһе башланды: июлдән алып һеҙ 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индексклы "Киске Өфө" гәзитенә 718 һум 98 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Республикалағы айыҡлыҡ өсөн көрәш депутаттар кимәлендә ниндәй ҡанундар менән хуплана?

***Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Йыл һайын алкоголь илдең 500 мең кешеһен теге донъяға алып китә, барлыҡ үлтерештәрҙең 70 проценты иҫерек килеш ҡылына, бынан тыш, инвалид булып ҡалыусылар, тарҡалған ғаиләләр, етем балалар һ.б. тураһында әйтеп тә тормайым. Шуға күрә республикабыҙҙа һәм ауылдарҙа шундай конкурстың популярлыҡ яулауы бик шәп. Алкоголь әйләнешен контролләү буйынса законды беҙ яйлап, аҙымлап тормошҡа ашырабыҙ. Мәҫәлән, суррогат һатыусылар өсөн 2,5 мең штраф һалына ине, һәм был күләмде сауҙагәрҙәр ике көндә кире ҡайтарып алып, эшмәкәрлеген артабан дауам итә ине. Законға һәм беренсе тапҡыр Енәйәт кодексына үҙгәрештәр индереп, штраф күләмен 30-50 меңгә арттырҙыҡ, ә инде суррогат менән сауҙа итеүсе икенсе тапҡыр элэкһә, уға ҡарата енәйәт эше асыла.

"Фанфорик"тар һатыуҙа контролдә тотола, хәҙер уларҙы дауаханаларҙа ғына алырға мөмкин. Спиртлы продукттарҙы ташыу буйынса ла тәртип булдырылды. Әгәр уларҙы полиция тотһа, спирт ташыған өсөн яуаплылыҡ билдәләнмәгәйне. Былтыр үҙгәрештәр индерелде, һәм билдәле күләмдәр өсөн административ йәки енәйәт яуаплылығы билдәләнде. Суррогат ташыуға сик ҡуйыу өсөн хәҙер спиртлы эсемлектәр заводта саҡта уҡ маркировка үтә һәм уның ҡайҙа етештерелгәнен һәм маршрутын код буйынса тикшерергә мөмкин.

Тағы бер үҙгәреш - элекке айныҡтысҡтарҙы ҡабаттан тергеҙеү тураһында закон ҡабул иттек һәм был вәкәләт федерация субъекттарына тапшырылды. Кемдер быны асарбаҡтар йорто тип баһалаһа ла, улар беҙҙең асарбаҡтар. Республикала йыл һайын 150-200 кеше туңып үлә, бер нисә меңе зыян күрә һәм уларҙың артабан йәшәүе өсөн беҙ үҙ кеҫәбеҙҙән түләйбеҙ. Был осраҡта урамда аунап ятҡан кешене алып барып айнытыуы яҡшыраҡ.

"Наливайкалар", йәғни билдәле бер сәғәттән һуң магазиндар кафеға әйләнә һәм телəүселәргә спиртлы эсемлектәрҙе ҡойоп һата башлай. Законға ярашлы, бындай шөғөл менән булышыу өсөн улар 20 квадрат метрҙан да кәм булмаған айырым майҙанға эйә булырға тейеш. Әлегә алкоголде 21 йәштән генә һата башлау инициативаһы әҙерләнә. Әммә закон сығарыусыларҙың да проблемаһы бар: закондарҙың барыһын да үткәреп булмай. "Айыҡ ауыл" конкурсына килгәндә, айыҡ ауыл булғас, унда алкоголь, суррогат бөтөнләй һатылмаҫҡа һәм ауылға ингәндә ошо хаҡта белдергән махсус баннер торорға тейеш.

## XXI БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# ШҮЛГӘНТАШТА ТАҒЫ БЕР МӨҒЖИЗӘ -

## күрергә һәм аптырарға ашыҡ!





**Башҡортостандың йөҙөк ҡашы булырҙай ҡомартҡы объекттарын, шул иҫәптән Рәсәйҙә палеолит дәүеренә ҡараған рәсемдәре менән билдәле берҙән-бер Шүлгәнташ мәмерйәһен дә ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мәҙәни мираҫ объекттары исемлегенә индереү тураһында күп йылдар һүҙ алып барыла. Әммә ЮНЕСКО эксперттарының талабы ҡаты була: мәҫәлән, Шүлгәнташ мәмерйәһен ҡарап сыҡҡандан һуң улар ундағы туристарҙың граффити, имзалары менән тулы диуарҙарҙы тәртипкә килтерергә, баҫҡыс кеүек ҡоролмаларҙы яңынан проектларға, мониторинг системаһын булдырырға тигәнерәк талаптар ҡуя. Шулай уҡ туристар өсөн мәмерйәләге һүрәттәрҙең күсермәһе булған музей төҙөү зарурлығы ла асыҡлана. Һәм Башҡортостандың Данир Ғәйнуллин етәкселегендәге Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге белгестәре бынан ун йыллап самаһы элек ең һыҙғанып эшкә тотона.**

**Шулай итеп, 9 июлдә Бөрйән районында "Шүлгәнташ" музей комплексын рәсми асыу тантанаһы булды. Тантана Рәсәйҙә Халыҡ-ара фундаменталь фәндәр йылын асыу сиктәрендә, РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы, Рәсәй Фәндәр академияһы һәм Фән министрлығы вәкилдәре, Рәсәй ҡалаларынан һәм яҡын сит илдәрҙән ғалимдар ҡатнашлығында үтте. "Шүлгәнташ" мәмерйәһенең таш диуарҙарына төшөрөлгән боронғо һүрәттәр күсермәһе, 3D-проекция һәм яҡтыртҡыс, боронғо хайуандарҙың баш һөйәге һәм башҡа һөйәктәре, мәмерйәнең Лего кубиктарынан интерактив макеты, сәсәндәрҙең боронғо музыка ҡоралдары һәм башҡалар... Сарағa йыйылған халыҡ быны шундай үҙенсәлекле һәм серле донъя мөхитен тамаша ҡылды. "Шүлгәнташ" мәмерйәһенән километр ярым самаһы ерҙә урынлашҡан ғәҙәти булмаған был яңы музей туристар "мәккәһе"нә әүерелде лә инде. Музей комплексы экспозицияһы ете тематик блоктан хасил: "Таймлайн", "Медиазал", "Ҡая сәнғәте", "Археология", "Тәбиғи-фәнни", "Һаҡлау", "Урал батыр эпосы". Ошо блоктарҙағы мөғжизәләрҙе күҙ алдына баҫтырып ҡарайыҡ әле.**

(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).

12+

✓ *2020 йыл дауамында парламент балиғ булмағандарға алкоголһеҙ тонусты күтәреүсе эсемлектәр һатыуҙы тыйған закон ҡабул итте. Был токсикомания-ның сниффинг тип аталған төрөнә кәртә ҡуйыу маҡсатында эшләнде.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҠУЛЫ ЭШ БЕЛГӘНДӘРГӘ...



**Гәзит уҡыусыларға үҙем буш ваҡытта шөғөлләнгән, ғаилә бюджетына өҫтәмә килем килтергән эшмәкәрлегем тураһында һөйләп үткем килә. Оҫта ҡуллы ир-егеттәр, бәлки, күҙ уңына алыр һәм был эшкә тотонор.**

Минең төп эшем - водитель. Дәүләт учреждениеһында оҙаҡ йылдар водитель булып эшләйем, эш көнөм иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем. Эштән һуң ваҡыт бик күп, айырыуса яҙын-йәйен ваҡыт үткәреп булмай. Таксила йөрөп ҡараным, ләкин эштә лә руль артында, эштән һуң тағы ла - оҙаҡҡа түҙмәнем.

Мәсьәлә көтмәгәндә хәл ителде. Шулай бер көндө күрше әбей балконында бәрәңге һаҡлау өсөн махсус ҡумта эшләп биреүемде һораны. Етди әҙерләндем был эшкә - схемалар төҙөнөм, сифатлы материалдар эҙләнем, ғөмүмән, оҙаҡ ҡына булыштым. Һөҙөмтә күршемә бик оҡшаны һәм аҡсаны ла мул ғына түләне, рекламаны ла елле генә эшләне. Заказдар бер-бер артлы килә башланы. Шулай йортобоҙҙағы тағы ла бер нисә әбей-бабайға төрлө күләмдәге банкылар ҡуйырлыҡ, тоғо менән бәрәңге һалырлыҡ, ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән емеш-еләк һәм башҡа әйберҙәр өсөн уңайлы, ыҡсым, урынды күп алмаған ҡумталар эшләп бирҙем. Унан күрше йорттарға күстем.

Эшемде йәйләп, тәфсирләп, сифатлы итеп башҡарырға бөтә көсөмдө һалам, хужаларҙың һәр теләген иҫәпкә алам. Материалдарҙы тулыһынса, үҙенең кеҫә ҡалынлығына һәм теләгенә ҡарап, заказ биреүсе һатып ала. Мин күпме күләмдә һәм ниндәй үлсәмдәген һатып алырға кәрәклеген генә әйтәм.

Ағас эшен бәләкәйҙән яратҡас, минең өсөн был бик ҡулай өҫтәмә килем алыу юлы. Хәҙер интернет селтәре аша ла реклама бирәм, шылтыратыусылар етерлек, сөнки ҡала кешеһенең һаҡлау урыны шул балкон бит инде. Барыһына ла уңайлы һаҡлау урыны кәрәк, ә магазиндан әҙер шкаф алып ултыртыу, берҙән, ҡыйбат, икенсенән, үлсәмдәре менән һәр саҡ тура килтереп булмай.

Хаҡты артыҡ ҡайырып ҡуймайым, ләкин хеҙмәтемде осһоҙлатмайым да. Таныштарға бүләп түләүгә лә эшләйем. Ғөмүмән, көндәлек сығымдарҙы бер ни тиклем ҡапларлыҡ килем килтерә шөғөләм, шөкөр. Шуға күрә ҡулы оҫта ир-егеттәрҙә лә үҙ ҡалаларында ошо эш менән булып ҡарарға саҡырам. Эш ауыр түгел, тик телә кенә кәрәк. Күңел биреп башҡарған, кешене ҡыуандырған хеҙмәттең аҡсаһын тотоноуы ла күңелле. Ҡулы эш белгән кеше аҡсаһыҙ булмай, тиҙәр. Был, ысынлап та, шулай. Мин башҡарған эш күҙгә лә күренеп бармай, бындай хеҙмәткә һорау күп булмаҫ, тип уйларға ла мөмкин, ләкин ысынында заказдар ҙа бар, аҡса ла килеп тора.

**Радик САФИН.**
**Белорет ҡалаһы.**

КӨНАУАЗ

# ЭШСЕ СИНЫФ ЙӘШӘҺЕН!



**Мәктәп тамамлаған балалар өсөн генә түгел, уларҙың ата-әсәләре өсөн дә яуаплы осор: йәштәргә һөнәр һайлау киләсәктә уларҙың яҙмышында хәл иткес әһәмиәткә эйә булыр ваҡиға, шуға ла был мәсьәләне ҡырҡ ҡат уйлап, бер тапҡыр "киҫеү" хәйерлерәк. Юғиһә, ошоға тиклем илдә етештереү ҡеүәттәре һүрелеп, сәнәғәт һәм ҡулланыу тауарҙары, улар өсөн комплектлаусы изделиелар, запчастар ғына түгел, хатта аҙыҡ-түлек, картуф-йәшелсәгә тиклем сит илдән һатып алына башлаған йылдарҙа күп һөнәрҙәргә ихтыяж юғалып торҙо, уҡып сыҡҡан йәштәр, һөнәрҙәренә ярашлы эш булмау сәбәпле, "тамаҡ ялына", ғаиләһен аҫрау, фатир һатып алыу өсөн осраҡлы вакансиялар һайларға мәжбүр булды.**

Меңәрләгән кешенең аҡсалыраҡ эш урыны хаҡына донъяһын, ғаиләһен ташлап, ҡырыҫ Себер тарафтарына барып һыйыныуы тәбиғи хәлгә әйләнде. Тормош закондары ил, дәүләт күләмендәге бындай хаталарҙы ғәфү итмәй, бер мәл барыбер яуап көнө алдына килтереп терәй. Бөгөн Рәсәй тап ана шундай хәлдә, "баш-аяғы менән" тип әйтерлек сит илдәргә бәйлелек этабында партнерҙарының йәнил хыянаты һәм берҙәм бойкоты ҡамауында тороп ҡалды. Бөгөн беҙгә ҡайтанан ҡасандыр ябылып, етештереү саралары ташландыҡ хәлгә ҡалған предприятиелар һәм заводтарыбыҙҙы ҡайтанан тергеҙергә генә түгел, заманға ярашлы кимәлдә ҡорорға һәм эшләтергә кәрәк. Кисекмәҫтән!

Быҡын өсөн, әлбиттә, эшсе ҡулдар һәм айырыуса техник белемле кадрҙар, бигерәк тә йәш көстәр талап ителә, сөнки, был хаҡта юғары форумдарҙа күп тапҡырҙар билдәләнеүенсә, бөгөн йәштәр зирәклеге, техника, электроника кеүек алдынғы технологиялар айышына тиҙ төшөнә һалыу кеүек һәләттәре менән айырылып тора. Уларға тик шул һәләттәрен артабан үҫтереүҙә, ғәмәли хеҙмәт күнекмәләре биреүҙә ярҙам итергә кәрәк. Бына ни өсөн уҡыу йорттары алдына гәйәт ҙур бурыстар йөкмәтелә һәм был айырыуса урта һөнәри белем биреүсе техник колледж һәм техникумдарға ҡағыла.

Белеүебеҙсә, был уҡыу йорттарына ла хәҙер уҡырға инеүе еңелдән түгел, ә бит вуздарҙағы сикле генә бюджет урындарға ла, һуңғы йылдар самаһы ҡиммәтләнеп киткән түләүле урындарға ла элә-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Республикалағы айыҡлыҡ өсөн көрәш депутаттар кимәлендә ниндәй ҡанундар менән хуплана?

***Рөстәм ИШМӨХӘМӘТОВ, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары:*** Мин координаторы булып торған "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте һәм "Айыҡ ауыл" конкурсы - республикала сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау буйынса бер бөтөн курстың ике ҡанаты. Был мәсьәләгә республика парламенты ла ҙур иғтибар бүлә һәм һуңғы бер нисә йылда халыҡ араһында алкоголь ҡулланыуҙы минималләштереүгә йүнәлтелгән закондар ҡабул иттек. Мәсәлән, Һуңғы ҡыңғырау, Йәштәр көнө, Белем көнө, һабантуйҙар ваҡытында алкоголь һатыу тыйыла. Был тыйыуҙар халыҡ тарафынан ыңғай ҡабул ителде һәм үҙенең юғары һөҙөмтәлелеген күрһәтә, киң күләм саралар һәм атап үтелгән байрамдарҙа йәмәғәт тәртибен боҙоу кәҙәтелмәй.

2019 йылдың декабрендә Яңы йыл каникулдарында алкоголь продукцияһы һатыуҙы сикләү тураһында закон ҡабул ителде. Унын өс йыл тормошҡа ашырылыу осоронда республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы, суд-эксперт белгестәре һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары мәғлүмәттәре был сараның юғары һөҙөмтәлелеген раҫлай: ошо арауыҡта йәрәхәтләнеүселәр, хроник сирҙәрҙең киҫкенләшеүе, алкоголь ҡулланыуҙан вафат булыусылар һаны, алкоголь психозы күләме кәмегән, йәмәғәт тәртибе яҡшырған. Әйткәндәй, Яңы йыл байрамдарында алкоголь һатыуҙы сикләү - республиканың үҙенсәлекле тәжрибәһе, башҡа бер генә төбәктә лә былдай күренеш юҡ.

2020 йылдың майында халыҡта "наливайка" тип йөрөтөлгән урындарҙа - күп фатирлы йорттарҙа һәм уларҙың эргәһендә урынлашҡан йәмәғәт туҡланыуы объекттарында алкоголь һатылған осраҡта, ундағы айырым майҙан 25 квадрат метрҙан кәм булырға тейеш түгел, тигән сикләү индерелде. Был сара урамдарҙа, подвалдарҙа, йорттарҙың беренсе ҡатында урынлашҡан барҙарҙың эшмәкәрлеген туктатырға тейеш, сөнки унда асоциаль категория йыйыла, улар граждандарҙың тыныслығын боҙа, имен булмаған криминоген хәл тыуҙыра. Закон ҡабул ителгәс, хәлдәр бер аҙ яҡшырҙы, әммә "наливайка"ларҙы тамырынан юҡ итеү өсөн тағы өҫтәмә саралар уйларға кәрәк.

Шулай уҡ 2020 йыл дауамында парламент балиғ булмағандарға шыйыҡ газ һәм алкоголһеҙ тонусты күтәреүсе эсемлектәр һатыуҙы тыйған закон ҡабул итте. Был токсикоманияның сниффинг тип аталған төрөнә кәртә ҡуйыу маҡсатында эшләнде. Закон үҫмерҙәрҙең бер өлөшөн ошо үлемесле аҙымдан һаҡлап ҡалырға ярҙам итте. Энергетиктар ҡулланыуҙа балалар сәләмәтлегенә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтерә, шуға беҙ үҫеп килеүсе быуынды уларҙан мөмкин тиклем һаҡлайбыҙ. Республикала шулай уҡ кальяндарҙы, вейптарҙы, тәмәке ҡатнашмаларын балаларға һатыуҙы тыйған закон ҡабул иттек.

Республика кимәлендә закондар ижад итеү менән бер рәттән, федераль кимәлдәге закондарҙы камиллаштырыу өҫтөндә лә эшләйбеҙ. Әлеге ваҡытта Дәүләт Думаһында РФ Енәйәт кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында закон проекты ҡарала. Беҙ автотранспорт менән эскән килеш идара итеүселәргә язаны ҡәтғиләштерергә, айырым осраҡтарҙа хатта автомобилде тартып алырға тәҡдим итәбеҙ. РФ Хөкүмәте был инициативаны хупламаһа ла, беҙ уны артабан да алға һөрәсәкбеҙ, был мәсьәләлә беҙҙе башҡа төбәктәрҙәге коллегаларыбыҙ ҙа хуплай.

Шулай уҡ республика территорияһында алкоголһеҙ зоналар булдырыу өсөн хоҡуки нигеҙ булдырҙыҡ. Теге йәки был ауылда спиртлы эсемлектәр һатыу-һатмау республика законы менән көйләнә, әммә был хаҡта халыҡ үҙе ҡарар сығарырға тейеш.

Әлбиттә, ҡанундар менән генә мәсьәләне хәл итеп булмай, балалар, йәштәр менән планлы рәүештә эшләргә, уларға сәләмәт тормош рәүешен һеҙдерергә, спортҡа ылыҡтырырға кәрәк. Кешегә бала саҡтан тормошҡа дөрөҫ ҡараш тәрбиәләү тоталь алкоголизм эҙемтәләре менән көрәшеүгә ҡарағанда еңелерәк. "Айыҡ Башҡортостан", "Айыҡ ауыл" кеүек проекттар быға булышлыҡ итә лә инде.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөрө районы йәмле Шәмсетдин күле буйында урынлашҡан "Mia Terra" глэмпинғы менән танышты. Элекке "Башҡортостан Артегы" шифахана-һауыҡтырыу лагеры биләмәһендә ошо глэмпингты асҡан шәхси эшҡыуар Елена Классен-Морилова менән ошо ял итеү урынын үҫтереү мөмкинлектәрен тикшерҙе. Эшҡыуар әйтеүенсә, уның йыл әйләнәһенә йәшәү өсөн 8 бүлмәлек ҡунаҡхана асыу ниәте бар, хәҙер шуның өсөн капиталь бинала төҙөкләндереү эштәре бара.

✓Рәсәйҙә етем балаларға ярҙам күрһәтеү буйынса өҫтәмә саралар булдырыла. Дәүләт Думаһы өсөнсө уҡыуҙа етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға социаль ярҙамдың өҫтәмә гарантиялары тураһында закон проектын ҡабул итте. Яңы законға ярашлы, бала фатир алғансы, 18 йәшкә тиклем ҡайһы муниципаль берәмектә теркәлгән, артабан да шунда теркәлергә хоҡуғы бар. Закон 18 йәштән һуң торлаҡ алырға хоҡуҡлы 219 мең етем балаға ҡағыла. Бынан тыш, етем балалар үҙенә торлаҡ алғансы урындағы хакимиәттең генә түгел, урындағы хакимиәттең территориаль органы адресы буйынса ла теркәлергә мөмкин.

✓Баймаҡ районының Аҡморон ауылында яңы мәсеткә нигеҙ ташы һалына башланы. Был хаҡта район башлығы Фәнис Әминев хәбәр итте. Мәсет төҙөү тураһында ҡарар ауыл халҡы йыйылышында ҡабул ителде. "Борондан килгән йола буйынса, мәсет мосолмандарҙың көн һайын йыйылған урыны тип иҫәпләнә. Аллаһ йортон асыу - ерҙәге тыныслыҡты тәьмин итеү ул, сөнки ғибәҙәтханаларҙа рухи-әхлаҡи тәрбиә бирелә. Тап ошондағы вәғәздәрҙә изгелеккә, тыныслыҡҡа, татыулыҡҡа һәм шәфҡәтлелеккә саҡырыу яңғырай!" - тине Баймаҡ районы башлығы.

✓Башҡортостан Луганск Халыҡ Республикаһына 5 фурала 45 тонна төҙөләш материалы һәм эсәр һыу оҙатты. Тәҙрә-ишектәр һәм комплектлаусы әйберҙәр Петровский ауылының генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исемендәге 22-се мәктәбенә капиталь ремонт эшләү өсөн тотонола. Бынан тыш, Башҡортостан табиптары ла Луганск Халыҡ Республикаһына юлланды. Уларҙың төп маҡсаты - урындағы халыҡҡа медицина ярҙамы күрһәтеү.

***✓ Ә бит вуздарҙағы сикле генә бюджет урындарға ла, һуңғы йылдар самаһыҙ ҡиммәтләнеп киткән түләүле урындарға ла эләгә алмаған йәштәр өмөтлө ҡараштарын тап бына ошо урта һөнәри уҡыу йорттарына төбәй.***



гә алмаған йәштәр өмөтлө ҡараштарын тап бына ошо урта һөнәри уҡыу йорттарына төбәй.

**Әйтеүҙәренсә, институтҡа ҡарағанда, бөгөн, ысынлап та, техникум һәм колледждарҙың популярлығы бермә-бер артты, йәштәр унда күберәк килә башланы. Тик бына шундай тенденцияны мәлендә "абайлап" ҡалыусы ҡайһы бер техникум етәкселәре былдай мөмкинлекте үҙҙәренсә файҙаланып ҡалыу яйын күрмәк булып, тегеләйке был популяр уҡыу йүнәлештәренә түләүҙе арттыра башланы.**

Һәр хәлдә, Рәсәй буйынса техникумдарҙа (бында колледждар инмәй) быйыл, мәҫәлән, 42 703 бюджет урыны булһа, 8 218 урын 30 меңдән алып, 75 меңгә тиклем түләүле. Мәскәү, Санкт-Петербургтағы ҡайһы бер колледждарҙа уҡыу хаҡы йылына 158-170 меңгә барып баҫа. Ә бына Һарытау технология һәм менеджмент, Нолинск ауыл хужалығын механизациялау, С.Рахманинов исемендәге Новгород сәнғәт колледждарында ни бары йылына 3,5-10 мең генә түләргә кәрәк.

Башҡортостанда иһә барлығы 155 урта һөнәри уҡыу йорто булып, шуларҙың күбеһендә бюджет урындар менән бергә түләүле йүнәлештәр ҙә байтаҡ. Мәҫәлән, 2022/2023 уҡыу йылына Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжында 240 бушлай һәм 335 түләүле урын бар. Уның сайтында иң бәләкәй түләү суммаһы 15 900-ҙән башланһа, айырым йүнәлештәргә 50-60 мең түләргә кәрәк. Бөгөн шулай уҡ бик көнүҙәк иҫәпләнгән урта һөнәри уҡыу йорто - Өфө авиация техникумында ла түләүле йүнәлештәр йылына 66 мең 400 һум тәшкил итә һәм төбәк бюджет урындарға ҡарағанда айырым йүнәлештәргә түләүләре ике тапҡырға тиерлек күберәк. Өфө автотранспорт колледжында ла түләүле белем алыу йылына 58 700 һум тәшкил итә.

Былдай исемлекте артабан дауам итергә булыр ине, ләкин оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: бөгөн урта һөнәри белем алыуы ла ауырлаша бара. Күп ғаиләләр өсөн был тормошҡа ашмаҫ хыял ғына, сөнки республиканың бәләкәй һәм уртаса торағ пункттарында йәшәүселәр Өфөләгә уртаса эш хаҡына ҡарағанда 35 процентҡа кәм ала, тип хәбәр ителгәйне 2022 йылдың мартында РБК.ru сайтында. Ә баш ҡалабыҙҙа уртаса эш хаҡы, быға ышанырға яраһа, 53 меңгә барып баҫҡан, имеш! Тик уны күпселектең хатта төшлә лә күргән юҡ, билләһи! Ә бына вакансияларҙа, нишләптер, күбеһенсә 30-35 мең эш хаҡы тәҡдим ителә. Ярай, быныһы финансистар һәм статистиктар намыҫында, ә ябай халыҡҡа балаһын уҡытырға кәрәк.

Аңлашылыуынса, колледж һәм техникумдарҙа белем алырға теләгәндәрҙең бөтәһенә лә юл асыҡ тип әйтеп булмай. Юҡҡа ғынамы ни, социалистар лидеры - "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партияһы етәксеһе Сергей Миронов ошо йәһәттән борсолоу белдереп, колледж һәм техникумдарҙа бушлай уҡытыу системаһын кире ҡайтарыуҙы яҡлап сығыш яһай. "Санкциялар һәм сит ил компаниялары менән хеҙмәттәшлек юҡҡа сығарылған шарттарҙа беҙгә кисекмәҫтән эшсе кадрҙар әҙерләй башларға кәрәк, ә бының өсөн уларға урта техник белем биреү түләүһеҙ булырға тейеш, сөнки эш хаҡынан эш хаҡынаса тартып-һуҙып йәшәүсе ғаиләләргә балаһын түләп уҡытыу мөмкин түгел", - ти Сергей Миронов.

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, бөгөн ил өсөн квалификациялы эшселәр кәрәк икән, исмаһам, ауыр көндәр үтеп киткәнсә булһа ла бушлай эшсе көстәр әҙерләү санкцияларға ҡаршы торолоҡ үҙ ҡеүәттәребеҙҙе үҫтереү бурысын тиҙләтер, енеләштерер ине.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

АЛДАЙҘАР!

# ҠОЛАҠҠА "ТУҠМАС" ЭЛМӘҺЕНДӘР...



**Интернет киң таралыу менән төрлө имеш-мимештәр ҙә йышайҙы. Ярай әле уларҙы тикшереү өсөн шулай уҡ интернет селтәрендә махсус проект бар. "Туҡмас" ("Лапша") тип атала ул. "Ҡолаҡҡа туҡмас элеү" тигән фразеологик һүҙбәйләнештән алып шундай исем бирелгәндер, моғайын.**

Тап бына ошо "Лапша" фактчекинг проекты Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә ваба (холера) эпидемияһы таралыу тураһындағы фейкты тикшергән һәм әле лә киң мәғлүмәт сараларында мәғлүмәттәрҙе тикшереү дауам итә. Фейктар араһында апрель һуңында социаль селтәрҙәрҙә төрлө төбәктәрҙә һыуҙа ваба эмбрионы табылыуы тураһында хәбәр таралғайны. Өс айҙан һуң ул иң алдаҡ яңылыҡ булып китә - уны 115 миллиондан ашыу кеше ҡарай, социаль селтәрҙәрҙә был хәбәрҙе 3,5 мең тапҡыр тараталар.

Белгестәр мәғлүмәтте анализлап, уның нисек барлыҡҡа килеүен һәм таралыуын асыҡлай. Фейк нигеҙе - АҠШ-тың Украиналағы биолабораториялары тураһындағы мәғлүмәт. 6 мартта РФ Оборона министрлығы тағун (чума), түләмә (сибирская язва), ваба һәм башҡа үлемесле сирҙәрҙе ҡуҙғатыусылар патогендарының тиҙ арала юҡ ителеүен раҫлаған фактар тураһында хәбәр итә. 9 Майҙа беренсе вирус хәбәрҙәр күренә башлай. Йәнәһе, Мариуполдә йәшәүсе биреү социаль селтәрҙәрҙә ҡалала ваба вирусы булыуы тураһында яҙа. Ялған мәғлүмәтте киң мәғлүмәт саралары тарата башлай. Вабаны профилактикалау буйынса өҫтәмә саралар тураһында Роспотребнадзорҙың ҡарары хаҡында белдереп, журналистар Украинала табылған биолабораторияларға һылтанма бирә. Фейкҡа ҡаршы "Лапша" проекты аналитиктары белдереүенсә, бер материалдағы ике мәғлүмәт социаль селтәрҙәрҙе ҡулланыусыларҙа һәм уҡыусыларҙа хаталы сәбәп-эҙемтә бәйләнешен барлыҡҡа килтерә. Ваба эпидемияһы тураһында иң күп ялған мәғлүмәт апрель һуңына һәм майға тура килә. Был осорҙа ошо тема буйынса 3 меңдән ашыу пост, репост һәм комментарий табыла. Асыҡ сығанаҡтар, киң мәғлүмәт сараларындағы кире ҡағыуҙар һәм бот чаты әрҙамында мессенджерҙарҙағы 300 хәбәрҙе күҙәтергә мөмкин була. Аналитиктар уларҙың күберәк тә булыу ихтималлығын белдерә. Иң беренсе кире ҡағыу 30 апрелдә теркәлә. Унда Роспотребнадзорҙың Брянск өлкәһендәге идараһы халыҡҡа һыуҙың гигиена нормативтарына тап килеүе хаҡында белдерә. Һуңынан башҡа төбәктәрҙә лә шундай кире ҡағыуҙар баҫыла.

"Лапша" аналитиктары ваба эпидемияһы тураһындағы фейктың артабан да таралыу ихтималлығын күҙаллай. Ул үҙгәртелеп һәм яңы мәғлүмәт сәбәбе һәм дезинформациялаусы хәбәрҙәр иҫәбенә көсәйеүе мөмкин. Ҡулланыусылар, шикле хәбәрҙәр күргәндә, уларҙы "Лапша" проектына ебәрә ала. Белгестәр уны тикшереп, мәғлүмәттең ялғанмы, дөрөҫмө икәнлеген асыҡлар. Һорауҙарҙы https://lapsha.media/ сайтында, йә Telegram, Viber һәм "Бәйләнештә" чат-боттарына ебәрергә була.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Республикалағы айыҡлыҡ өсөн көрәш депутаттар кимәлендә ниндәй ҡанундар менән хуплана?

***Хәлил РӘХИМОВ, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Сәнәғәт, инновацион үҫеш, сауҙа, эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса комитет рәйесе:*** 2014 йылда Башҡортостан Республикаһының этил спирты, алкоголь һәм составында спирт булған продукцияһын етештереү, һатыу эшмәкәрлеген көйләү һәм алкоголь ҡулланыуҙы сикләү тураһында 2007 йылдың 1 мартында ҡабул ителгән 414-з законына үҙгәрештәр индерелә һәм ул айырым ауыл биләмәләрендә алкоголь продукцияһын ваҡлап һатыуҙы тулыһынса сикләү мөмкинлеге бирә. Әммә был закон тормошҡа ашһын өсөн өҫтәмә закондар ҡабул итеү кәрәк була. 2015-2016 йылдарҙа Күгәрсен районы ауылдары был мәсьәлә буйынса закондар сығарыу инициативаһы менән сыға, әммә республика Хөкүмәте ул ваҡытта был тәҡдимде хупламай.

Һуңғы ваҡытта муниципаль берәмектәр ҡабат ошондай инициативалар күтәрә башланы, тик, үкенескә күрә, урындарҙа парламентҡа законлар сығарыу тәҡдиме менән сығыу механизмы эшләнмәгән. Шуға күрә закон проекты менән бер рәттән, ниндәй документтарҙы тапшырыу мотлаҡ икәнлеген аңлатып үтәм: а) законды ҡабул итеү зарурлығын нигеҙләү, тәҡдим иткән проекттың концепцияһы; б) ошо тармаҡты хоҡуҡи көйләү буйынса ҡануниәт торошо тураһында белешмә; в) ошо законды ҡабул итеү өсөн ниндәй законларға, башҡа хоҡуҡи акттарға үҙгәртеүҙәр индереү йәки законды ғәмәлдә булыуын туҡтатыу кәрәклеген күрһәткән исемлек; г) законды тормошҡа ашырыу өсөн ниндәй хоҡуҡи акттарҙы эшләргә кәрәклеге тураһында тәҡдим; д) финанс-иҡтисади нигеҙләү; е) РФ һәм БР ҡануниәтенә ярашлы талап ителгән документтар, материалдар; ж) көйләү тәьҫиренә баһалама. Һуңғы пункт алкоголь продукцияһын һатыуҙы тыйыу эшҡыуарлыҡ субъекттарына яңы бурыстар йөкмәтә һәм тыйыуҙар өҫтәлеүгә бәйле талап ителә.

Ошо баһаламаны алыу өсөн муниципаль берәмек Советы рәйесе ҡултамғаһы ҡуйылған документтар пакетын БР Иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министрлығына тапшырырға кәрәк. Ведомствола асыҡ фекер алышыу үткәндән һуң ғына баһалама тураһында һығымта бирелә һәм шунан ғына закон проекты һәм документтар пакеты, БР Хөкүмәтенең һығымтаһы һәм хаты БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға йүнәлтелә. Ябайлаштырып әйткәндә: тәү сиратта ауылдарҙа халыҡтың фекерен белергә, муниципаль берәмек Советы тейешле ҡарар сығарырға, закон проектын һәм документтарҙы Иҡтисад министрлығына тапшырырға, асыҡ фекер алышыу процедураһын үтергә, БР Хөкүмәтенең һығымтаһын алырға һәм БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға тапшырырға кәрәк.

Әлеге ваҡытта Хөкүмәткә Балаҡатай, Күгәрсен, Ҡалтасы, Стәрлетамаҡ райондарының мөрәжәғәте бар. Былдай мөрәжәғәттәрҙең артыуына бәйле, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Закондар сығарыу инициативаһын индереү тәртибен әҙерләп, уны парламенттың рәсми сайтына, "парламент тураһында" бүлегенең "Закон проекттарын ҡарау һәм ҡабул итеү тәртибе" бүлексәһенә урынлаштырҙы һәм уны һәр ауыл Советы ҡуллана ала.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**19 июлдән Көйөргәҙе районының Яҡут ауылы территорияһында алкоголь һатыу тулыһынса тыйыла. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо хаҡтағы законға ҡул ҡуйған. Был - ауыл халҡының инициативаһы закон статусы алған беренсе күренеш.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Федерацияһы президенты Указы менән Башҡортостандың спорт мәктәптәре тренерҙары һәм етәкселәре 2020 йылда Токиола уҙған XXXII Олимпиадала, XVI Паралимпия йәйге уйындарында юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән спортсылар әҙерләгәне өсөн орден-миҙалдар менән бүләкләнде.

✓Башҡортостанда ер участкаһына тиклем бушлай газ үткәреү программаһы буйынса 25 469 ғариза ҡабул ителгән. Был хаҡта "Газпром төбәк-ара газ Өфө" йәмғиәтенең генераль директоры Альберт Лоҡманов һөйләне. "Халыҡ менән 22 764 килешеү төҙөлгән - 7 688 ер участкаһына газ бүләү селтәрҙәре үткәрелгән, ә 5 632 йорт "зәңгәр яғыулыҡ" менән файҙалана ла инде", - тип билдәләне ул. Альберт Лоҡманов һүҙҙәренсә, газ үткәреү программаһының төп өләшө 2022 йылдың аҙағына тиклем тамамланырға тейеш.

✓Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә башҡорт балы һатылған өс ATLAS HONEY магазины асылды, тағы икәүһе асылырға тора, тип хәбәр итте Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. AL AGRO LLC компанияһы проектының маҡсаты - Рәсәйҙән Яҡын Көнсығыш илдәренә экологик яҡтан таҙа һәм органик продукция оҙатыу эшен яйға һалыу. 2030 йылға Яҡын Көнсығышта мең магазин асыу күҙ уңында тотола.

✓Башҡортостандың сауҙа үҙәктәре 2022 йылда милек һалымын түләүҙән азат ителергә мөмкин. "Быйыл ҡуртымға алыусылар өсөн ҡуртым хаҡын арттырмаған һәм хеҙмәткәрҙәрҙең 90 процентын һаҡлап ҡалған, шулай уҡ һалым базаһы 2022 йылға уларҙың кадастр хаҡы булараҡ билдәләнгән объекттар исемлегенә индерелгән сауҙа үҙәктәре һәм комплекстар льгота алыу хоҡуғына эйә була", - тип билдәләне республиканың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев.

✓Башҡортостанда 6 июлдән мәктәпкә беркетелмәгән биләмәлә йәшәгән балаларҙы беренсе класҡа алыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башланды. Ошо осорҙа ата-әсәләр икенсе райондың мәктәптәренә ғариза бирергә мөмкин. Быны 5 сентябргә тиклем Дәүләт хеҙмәттәре сайты аша эшләргә була. "Балаларҙы муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеларына ҡабул итеү" электрон хеҙмәтен юллау өсөн ата-әсәнең паспорты, баланың тыуыу тураһында таныҡлығы һәм йәшәгән урыны тураһында белешмә кәрәк.

✓ Күп кенә Рәсәй ғаиләләренә шәхси торлаҡты хатта ипотекаға һатып алыу ҙа мөмкин түгел. Һөҙөмтәлә был мәңге хәл итеп булмай торған мәсьәлә булып ҡала. Ҡуртымға торлаҡ яллау иһә беҙҙә әле күләгәлә ҡала килә.



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАЛАРҒА - БУШЛАЙ

**Һаулығында тайпылыш булған мәктәп уҡыусылары мотлаҡ бушлай ашатыласаҡ.** Дәүләт Думаһы депутаттары тәүге уҡыуҙа уҡ льгота биреүҙең бөтә ил буйынса берҙәм тәртибен билдәләгән закон проектын ҡабул итте. Быға тиклем һаулыҡ мөмкинлеге сикләнгән балаларға бер төбәктә ҡоро паек, икенсеһенә аҡсалата компенсация бирелә ине, ә ҡайһыларында бер нәмә лә ҡаралмағайны. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль закондың 79-сы статьяһындағы үҙгәрештәр бөтә төбәктәр өсөн берҙәм система ҡуя һәм финанслау сығанағын билдәләй. Улар муниципаль, төбәк һәм федераль бюджеттан булыуы ихтимал. Закон 2022 йылдың 1 сентябренән үҙ көсөнә инеүе күҙаллана. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: Башҡортостанда һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән, инвалид һәм күп балалы аҙ килемле ғаиләләрҙәге балаларҙың мәктәптә бушлай туҡланырға хоҡуғы бар ине. Был категорияларға ҡарағандар республикала яҡынса 85 мең бала иҫәпләнә.

✓ **2024 йылға тиклем Башҡортостанға класс етәкселәренә айлыҡ түләүҙәр өсөн 6,9 миллиард һум бүленә.** Ошо туралағы бойоroҡҡа хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Өҫтәмә финанслау үҙенең тибы буйынса дөйөм белем биреү булмаған мәғариф ойошмаларының, мәҫәлән, колледждар йәки юғары уҡыу йорттары составына ингән мәктәптәрҙең класс етәкселәренә түләү өсөн тәғәйенләнә. 2022 йылда федераль ҡаҙнала ябай мәктәптәрҙең класс етәкселәре өсөн 74,9 миллиард һум ҡаралған. Документҡа ярашлы, Башҡортостан йыл һайын ошо маҡсатҡа 2,3 миллиард һумдан ашыу аҡса алырға тейеш. Шулай итеп, 2022-2024 йылдарҙа республика мәктәптәренең класс етәкселәренә түләүҙәрҙең дөйөм күләме 6,9 миллиард һумдан ашыу була. 2020 йылда Президенттың ҡушыуы буйынса уҡытыусыларға класс етәкселеге өсөн өҫтәмә ярҙам тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне. Түләүҙең күләме - айына 5 мең һум. Шул уҡ ваҡытта уҡытыусыларҙың быға тиклем билдәләнгән өҫтәмәләре лә һаҡлана.

✓ **Башҡортостанда Рәсәй Федерацияһы Геройы Александр Доставалов исемендәге икенсе башҡорт мотоуксылар батальонына ирекмәндәр тупланып, 14 июлдә улар ҙы Шишмә районынан оҙаттылар.** Алдан хәбәр итеүебеҙсә, уны ойоштороу башланғысы менән ветеран десантсылар сығыш яһағайны. Шарттар буйынса, батальонға хәрби тәжрибәһе булған йәки хеҙмәт иткәндән һуң запасҡа сыҡҡан, хөкөмгә тарттырылмаған, һаулығы, физик әҙерлеге яҡшы, психологик яҡтан тотороҡло 50 йәшкәсә ир-егеттәр саҡырыла. Һайлап алынған хәрбиҙәр менән Рәсәйҙең Оборона министрлығы килешеү төҙөй. Ирекмәндәргә түләүҙәр һәм льготалар ҡаралған. Федераль түләүҙәрҙән тыш, республика уларға контрактҡа ҡул ҡуйғанда 200 000 һум һәм тәүләгенә 2000 һум түләй. 6 июлдә Рәсәй Геройы, легендар комдив Миңлеғәли Шайморатов исемендәге беренсе башҡорт батальонын оҙатыу тантанаһы үтте. Әле яугирҙар Ырымбур өлкәһендә, аҙаҡ махсус хәрби операция зонаһына юллана.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕЛОРУСТАР МЕНӘН...



**Башҡортостанда Минск автомобиль заводының йөк ташыу өсөн махсус техникаһын етештерә башлау планлаштырыла. Был хаҡта "Иннопром-2022" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһендә һөйләшеүҙәр булды.**

Цехтар республиканың сәнәғәт технопарктарының береһендә йәки өҫтөнлөклө зона биләмәһендә, мәҫәлән, Туймазының "Мастер" промтехнопаркында йәки "ПромҮҙәк" индустриаль паркында асыла. "Производствоны ике этапта ойоштороу күҙ уңында тотола. Беларусь партнерҙары йылына 1 меңгә тиклем йөк автомобиле етештергән берлектәге предприятие төҙөү мөмкинлеген ҡарарға әҙер", - тине Башҡортостандың иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов. Башҡортостандың сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев һүҙҙәренсә, яңы предприятие мөлкәткә һалым түләүҙән азат ителә, шулай уҡ килемгә һалымдың түбән ставкаһына, ҡуртым буйынса льготаларға иҫәп тота ала. "Шулай уҡ инвестор, Башҡортостан Республикаһы Башлығы бойороғона ярашлы, ер участкаһын сауҙалашыуһыҙ ҡуртымға биреү мөмкинлегенә эйә була", - тип билдәләне Александр Шельдяев.

# ҠУРТЫМҒА - АРЗАН ТОРЛАҠ



**Башҡортостан вице-премьеры Рөстәм Ишмөхәмәтов Рәсәйҙә арзан хаҡҡа ҡуртымға торлаҡ баҙарын үҫтереү тураһындағы федераль закон проектын хуплап сығыш яһаны. Дәүләт Думаһы ҡарауына был тәҡдим бер төркөм депутаттар тарафынан индерелгән, улар араһында Башҡортостан вәкиле Павел Качкаев та бар.**

Рөстәм Ишмөхәмәтов аңлатма биреүенсә, был закон проекты тарафынан "айырым категория граждандар түләп файҙаланһын өсөн ялланма йорт" тигән төшөнсә индерелә. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, ил субъекттарына төбәк мохтажлыҡ кисергән белгестәр категорияһы ҡуртымға алып файҙаланһын өсөн ташламалы шарттарҙа торлаҡ бүлеү ҡарала. Мәҫәлән, медиктарға, IT белгестәргә, уҡытыусыларға һәм башҡа һөнәр вәкилдәренә. "Закон проекты ҡуртымға торлаҡ өсөн йорттар төҙөлөшөнөң иҡтисади отошлоғона иғтибарҙы арттырыу һәм ошо эшкә эре девелоперҙарҙы йәлеп итеү маҡсатын ҡуя", - тип белдерҙе Башҡортостан вице-спикеры. Уның һүҙҙәренсә, закон проекты, асылда, революцияға тиклем Рәсәйҙә яҡшы үҫешкән килемле йорттар системаһын һәр яҡлап киңәйтеүгә йүнәлтелгән. "Сит илдәрҙә ул әле лә үҫеш алған. Мәҫәлән, АҠШ, Германия, Швейцарияла торлаҡ фондының 30-40 проценты яллама торлаҡҡа тура килә. Рәсәйҙә уның өлөшө 6 процентҡа ла барып етмәй. Күп кенә Рәсәй ғаиләләренә шәхси торлаҡты хатта ипотекаға һатып алыу ҙа мөмкин түгел. Һөҙөмтәлә беҙҙә был мәңге хәл итеп булмай торған мәсьәлә булып ҡала. Ҡуртымға торлаҡ яллау иһә беҙҙә әле күләгәлә ҡала килә. Һалымдар түләнмәй, шунлыҡтан торлаҡ яллаусы ла, уны ҡуртымға тапшырыусы ла хоҡуҡи хәүеф хәләндә йәшәй",- тине парламентарий. Был закон проектының Дәүләт Думаһына индерелеүенә өс ай ваҡыт үтһә лә, уны ҡарауға сығарыу буйынса бер ниндәй ҙә алға китеш юҡ. "Был ваҡыт эсендә беҙ Башҡортостанда әлеге проблеманы өйрәнеп, уны эшкәртергә һәм ҡуртымға арзан торлаҡ баҙарын үҫтереү буйынса үҙ законыбыҙҙы ҡабул итеп тә өлгөрҙөк. Дәрәс, Мәскәүҙә, Свердлов һәм Воронеж өлкәләрендә лә беҙҙекенә оҡшаш саралар күрелә, ләкин мәсьәләне комплекслы хәл итеү өсөн төбәктәргә вәкәләтлелек етмәй, был мәсьәлә федераль кимәлдә хәл ителергә тейеш һәм уны һуҙырға ярамай",- тип йомғаҡланы һүҙен депутат.

# УЙЫНҒА АЙЫҠ КИЛ!




**Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов көйәрмәндәрҙең спорт уйындары ваҡытында спиртлы эсемлектәр эсеүенә ҡаршы булыуын белдерҙе.**

"Быға ҡырҡа ҡаршымын. Шуның арҡаһында клубтарҙың спонсор, финанс ярҙамы алыуы буйынса ҡаршылыҡтарға осрауын да аңлап торабыҙ. Ләкин кешеләр уйындарға балалары менән бергә килә, мин тамашасыларҙың стадиондарҙа иҫерткес эсемлектәр ҡулланыуын теләмәҫ инем", - тине Руслан Хәбибов "Башинформ" хәбәрсеһенә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Дәүләт Думаһында стадиондарҙа һыра һатыу тураһындағы закон проектын яңынан ҡарарға теләйҙәр. ТАСС агентлығы менән әңгәмәлә Дәүләт Думаһының физик культура һәм спорт буйынса комитеты рәйесе Дмитрий Свищев ошо турала әйтте. "Ошо закон проекты буйынса эште яңынан башлайбыҙ. Тиҙҙән футбол буйынса Рәсәй премьер-лигаһы башлана, шуға күрә ошо йүнәлештәге эшкә кире ҡайтыу мөһим", - тине Свищев. 2005 йылдан Рәсәйҙә спорт объекттарында һыра һатыу тыйыла.

# СПОРТ ДЕРЖАВАҺЫ

**Республиканың РФ Спорт министрлығы менән килешеү төҙөгәндән һуң "Спорт державаһы форумы" автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошмаһының генераль директоры Алексей Степанов Башҡортостандың "Рәсәй - спорт державаһы" форумын уҙғарыу хоҡуғын алыу өсөн етди көрәшкә тотонғанын билдәләне.**

"Был киң күләм һәм профессиональ спортты үҫтереүгә, спорт объекттарын төҙөү һәм ҡулланыуға, яңы технологиялар һәм стартаптарға бәйле мәсьәләләр буйынса фекер алышыу майҙаны. Беҙ тупланған белемде һәм тәжрибәне тапшырырға тырышабыҙ. Төбәктәрҙең хуплауы һәм инициативаһы арҡаһында артабан да алға барасаҡбыҙ", - тине ул. Форум, ғәҙәттә, 5 меңдән ашыу ҡатнашыусыны, шул иҫәптән халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй спорт федерациялары һәм ойошмалары етәкселәрен, власть органдарын, Олимпия, паралимпия һәм сурдлимпия хәрәкәте вәкилдәрен, ғилми һәм бизнес даирәһенән берләштерә. "Башҡортостан үҙ компетенцияларын үҫтереү өсөн һәр саҡ алдына юғары амбициялы маҡсаттар ҡуя. 2019 йылда уҡ, республика Милли спорт премияһы сиктәрендә иң яҡшы спорт төбәге исеменә лайыҡ булғанда, беҙ был форумды Өфөлә үткәреү тураһында уйланғайныҡ. Уны тормошҡа ашырыу өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ", - тип билдәләне Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан мәктәптәрендә һәм балалар баҡсаларында балаларға биойод менән байытылған йогурт ашата башланылар. Был аҙыҡ республикабыҙҙың күпселек райондарында күҙәтелгән йодҡа ҡытлыҡты иҫкәртеү өсөн әҙерләнгән. Билдәләнеүенсә, биойод менән байытылған йогурт һатыуға ла сығарылған. Уны Башҡортостан район-ҡалаларындағы "Һөт кухняһы"ның 40 таратыу пунктында һатып алырға мөмкин. Үҙенсәлекле йогурт Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Октябрьскийҙа һәм Үрге Ҡыйғыла етештерелә.

✓Башҡортостандың Юстиция дәүләт комитеты рәйесе Владимир Спеле белдереүенсә, республикала газондарға һәм башҡа йәшелләндерелгән территорияларға машиналар ҡуйыу осраҡтары кәмеган. Быйыл яҙғыһын ведомствоға 4897 административ эш тапшырылһа, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 15 процентҡа кәмерәк. Ағымдағы миҙгелдә 3289 эш ҡаралған (былтыр - 4261). Водителдәргә һалынған штраф күләме лә 28,2 процентҡа әҙерәк булған. Ярамаған урында парковкалаҙыу осраҡтарының күп өлөшө Өфөгә (2223), Стәрлетамаҡ (436) һәм Салауатка (174) тура килә.

✓"Өфө" футбол клубы Сергей Томаров баш тренер вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнеүе тураһында иғлан итте. Ул Әшәлә команданы тәүге уҡыу-күнекмә сборына әҙерләй, тип хәбәр итә Өфө клубының ТГ-каналы. Сергей Томаров менән бергә тренерҙар штабына Николай Сафрониди, Артур Шәйбәков һәм ҡапҡасылар буйынса тренер Ринат Камалов инде.

✓Ағиҙел йылғаһы аша һалынған иҫке күпер арҡаһын һүтеп алғандан һуң уны металл һынығы итеп тапшырасаҡтар. Уның урынын тулыһынса әлекке ҡеһен ҡабатлаған яңы конструкция аласаҡ, хатта белгестәр унда тарихи әһәмиәткә эйә яҙыуҙарҙы ла ҡалдырасаҡ. Арка быйыл дүртенсе кварталда һүтелә башлаясаҡ.

✓Өфөнән аэропорт тарихында тәүге тура рейс Каспий диңгеҙе буйында урынлашҡан курорт ҡалаһына - Ҡаҙағстандың Аҡтау ҡалаһына юлланды. Билеттар һатылып бөткән, тип хәбәр иттеләр аэропорттың матбуғат хеҙмәтенән. Осош программаһын "Азимут" авиакомпанияһы башҡара. Өфөнән рейстар аҙнаһына бер тапҡыр, дүшәмбе көндәрендә башҡарыла. Билеттарҙы һәм турҙарҙы "ANEX Tour" туристик операторы һата.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨНӨҢ МАТУР ЙӨҘӨ

**Башҡортостандың баш ҡалаһы әүҙем үҫешә: заманса объекттар, торлаҡ кварталдар барлыҡҡа килә, яңы сауҙа нөктәләре асыла. Бындай үҙгәрештәр мегаполистың архитектура мөхитенә туранан-тура йогонто яһай. Бизнестағы дәғүәселек эшҡыуарҙарҙы фасадтарға һәм алтаҡталарға ҙур аҡса һалырға этәрә. Әммә ҡала урамдарында бик йыш уларҙың бер-береһе менән килешеп эшләмәүе күҙгә ташлана. Һөҙөмтәлә төрлө төҫтәге, сыбар фасадтар һәм башҡа айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Был мәсьәләне нисек хәл итеү һәм ҡаланың берҙәм йөҙөн булдырыу тураһында Ҡала дизайны үҙәге директоры Руслан АЛМАЕВ үҙенең фекерҙәре менән уртаҡлаша.**



**➔ Ни өсөн ҡаланың ҡайһы бер өлөштәре бигерәк күрмәлекһеҙ?**

- Һеҙ хаҡлы, бөгөн баш ҡалала фасадтарҙы һәм урамдарҙы биҙәү буйынса берҙәм ҡағиҙә юҡ. "Визуаль бысратыу" проблемаһы күптән килә. Бизнес-йәмғиәт вәкилдәре ҡала объекттарының эргә-тирәһен төҙөкләндереүгә һәр саҡ әҙер булмай, һәм ҡала төрлө реклама конструкциялары менән сыбарлана. Янып-һүнеп торған светодиод экрандар һәм йүгерек юлдар күҙҙәрҙе сағылдыра, йәйәүлеләргә унайһыҙлыҡ тыуҙыра. Башҡа эре ҡалаларҙағы кеүек үк, Өфөнөң төрлө-төрлө һәм гармонияһыҙ урамдары үҙәк районда ла, ситтәгеләрендә лә бар.

**➔ Быларҙың барыһын да нисек системаға һалырға?**

- Республиканың баш ҡалаһында фасадтарҙы һәм урамдарҙы биҙәү буйынса күрһәтмәләр документы булырға һәм ул эшҡыуарҙар бәхәсендә хәл иткес дәлил булып торорға тейеш. Документты эшләүҙең маҡсаты - архитектура һәм дизайн өлкәһе белгестәрен йәлеп итеп, сифатлы ҡала мөхитен планға ярашлы системалы формалаштырыу. Рәсәйҙең күп ҡалаларында бындай документ эшләнгән һәм ул дизайн-код тип атала. Ябайлаштырып әйткәндә, ул - алтаҡталарҙы, реклама конструкцияларын, киосктарҙы, урам мебелен, тәҙрәләрҙе, кондиционерҙарҙы нисек эшләү һәм урынлаштырыуға аңлатма биргән инструкция. Тораҡ пункттарҙың йөҙөнә йогонто яһаусыларҙың: эшҡыуарҙар, архитекторҙар, муниципалитеттар, төҙөүселәр өсөн дөйөм ҡағиҙәләр, күрһәтмәләр булдырып, уларҙың маҡсатты аңлауын еңеләштерергә кәрәк. Дизайн-код ҡала киңлегенең дөйөм картинаһын билдәләп, ҡала мөхитен үҙгәртергә ярҙам итә.

**➔ Ни өсөн был турала хәҙер генә һөйләй башланылар?**

- Һүҙ бер нисә йыл элек йөрөнө һәм был йүнәлештә билдәле аҙымдар яһалды. 2024 йылда буласаҡ юбилей өҫтәмә этәргес бирҙе.

**➔ Икенсе ҡаланың әҙер дизайн-кодын ҡулланырға буламы?**

- Һәр ҡаланың үҙенең дизайн-коды булыуы мотлаҡ. Ул уның берҙәйлеген, урындағы мәҙәни һәм этник үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алырға тейеш.

Өфө өсөн тәжрибәле дизайнерҙарҙы һәм архитекторҙарҙы йәлеп итергә генә түгел, ә бизнес-йәмғиәтте, эшҡыуарҙарҙы һәм граждандарҙың фекерен дә иҫәпкә алырға кәрәк. Дизайн-код индереү яраҡтан ҡалабыҙҙы яҡшыртырға ярҙам итәсәк. Профессиональ телдә әйткәндә, һөҙөмтәлә дизайн-код граждандарҙа зауыҡ һәм ҡала мөхитен баһалауҙың тоторокло критерийҙарын булдырасаҡ, ҡаланы капитализациялауҙы арттырасаҡ, йәштәрҙе ылыҡтырырға, баш ҡаланың туристик имиджын булдырырға ярҙам итәсәк.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## САЛАУАТЫБЫҘ ҺӘЙКӘЛЕН...



**Федераль әһәмиәттәге тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыһы булған Салауат Юлаевтың һәйкәлен реставрациялауға проект эшен үтәгән компания конкурсҡа йомғаҡ яһаны.**

Дәүләт һатып алыуҙары порталында баҫылған мәғлүмәттәрҙән билдәле булыуынса, унда Ҡаҙандан "ТСНРУ" фәнни-реставрациялау предприятиеһы еңгән. Контракттың башланғыс хаҡы 15 485 446,32 һум. Торгта еңеүсе 14 943 455,70 һумға эшләргә әҙер. Икенсе ҡатнашыусы 15 175 737,40 һум тәҡдим итте. Башҡарыусы объекттың тышҡы йөҙөн, шул иҫәптән парк һәм тәбиғи ландшафтты, һәйкәлден һәм ҡурғандың яҡтыртылыуын мөмкин тиклем һаҡларға, ҡурғанды төҙөкләндерергә, йәшелләндерергә һәм башҡа эштәрҙе үтәргә тейеш. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: 2019 йылда Башҡортостандың мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-етештереү үҙәге белгестәре һәйкәлде ҡараған ваҡытта бик күп кәмселек булыуын асыҡланы. Һөҙөмтәлә үҙәктә һәйкәлде реставрациялау буйынса күҙәтеү советы барлыҡҡа килде.

Монумент Көнсығыш Европала иң бейек атлы скульптура иҫәпләнә. Ул суйындан ҡойолған, өс терәү нөктәһе бар, уның бейеклеге 9,8 метр. Постамент менән 14 метр. Ауырлығы 40 тонна. 1974 йылдан һәйкәл дәүләт һаҡлауында.

**Роман ЯКИМЧУК.**

ҠЫҪҠАСА

## ТОТОЛҒАНДАР

**Өфөлә кеше урлау, талау, янау менән шөғөлләнгән енәйәтселәр төркөмөнөң ете ағзаһы тотолған.** Башҡортостан Прокуратураһы хәбәр итеүенсә, ике Өфө егете етәкселегендәге банда автомобиль ҡыуып китеү, граждандарҙың паспортын бирмәү, аҡса талау менән дә шөғөлләнгән. Улар 2020 йылдың сентябренән октябргә тиклем кешеләргә һөжүм иткән, уларҙы ебәрмәй машинала тотҡан, бер кем булмаған урындарға алып сығып, ҡорал менән янап, аҡса һәм башҡа мөлкәт талап иткән. Эҙ эҙлыҡтырыу өсөн улар зыян күреүселәрҙе наркотик таратыуҙарын таныуы тураһында видеоға төшөргән һәм полицияға биреү менән янағандар. Ҡурҡыштарынан граждандар, шулай уҡ балиғ булмаған йәштәге өс бала, бандиттарға аҡса, смартфон, банк карталарын, паспорт һәм автомобиль документтарын биргән. Урланған әйберҙәрҙең дөйөм суммаһы - 780 меңдән ашыу һум. Октябрҙә Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының ойошторолған енәйәткә ҡаршы көрәш буйынса бүлек хеҙмәткәрҙәре үткәргән оператив-тикшереү саралары барышында ике Өфө кешеһен урлаған ваҡытта енәйәт төркөмө эшмәкәрлеге туҡтатылды. Енәйәтселәр уларҙан 400 мең һум талап иткән. 20-нән 32 йәшкә тиклемге йәштәр ҡатнашҡан банда хөкөм алдына баҫасаҡ.

✓ **Һәр ҡайһыһының майҙаны 300 квадрат метр булған мәҙәни мираҫ объекттары: Өфөләге Боровской һәм Лопатина йорттарында йәшәүселәрҙе күсереү тулыһынса тамамланған.** Әлеге ваҡытта уларҙы тергеҙеү буйынса эскиз проекттарын эшләүсе подрядсылар һайлана. Контракттарҙың максималь күләме - 2,164 һәм 2,061 миллион һум. Аксаков урамындағы беренсе ҡаты кирбестән, икенсе ҡаты ағастан булған Лопатина йорто Судаковтар йортона терәлеп тора, уларҙы тергеҙеү Иҫке ҡаланың тарихи фрагментын һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк. Боровскойҙың ике ҡаты ла ағастан булған, тәҙрә йөҙлөктәре семәрләп эшләнгән йорто Ленин һәм Чернышевский урамдары киҫелешендә урынлашҡан. Уның артында алданған өлөшсөләр өсөн кирбес йорт төҙөлә. Йыл башынан мэрия Тихониндар, Бухартовскийҙар, Воскресенскийҙар, Душиндар йорттарын һаҡлау проекттарына заказ биргән.

✓ **Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте бойороғо менән 2023-2027 йылдарға юлдар төҙөү, реконструкциялау һәм ремонтлау буйынса 250-нән ашыу саранан торған исемлек раҫланды.** Ул федераль, төбәк, муниципаль-ара һәм урындағы трассаларға ҡағыла. Маҡсаты - 105 ҙур агломерацияла юлдарҙың 85 процентын, төбәктәрҙә иһә юлдарҙың 50 процентан ашыуын норматив хәлгә килтереү. Трассаларҙы киңәйтеү иҫәбенә уларҙың үткәреү һәләте арта, 46 ҙур ҡаланың урау юлы һалына, был инде урындағы халыҡҡа һәм водителдәргә унайлы шарттар тәьмин итергә тейеш. Автотрассаларҙы яңыртыу, киңәйтеү һәм төҙөү өсөн федераль бюджеттан 5 триллион һумдан ашыу аҡса бүленә. Исемлеккә индерелгән объекттар араһында - Башҡортостан юлдары һәм автотрасса участкалары. Атап әйткәндә, Дүртөйлә - Ачит трассаһы участкаһын, Кушнаренко һәм Бөрө районддарында Ағиҙел йылғаһы аша күпер менән Өфө - Бөрө - Яңауыл автомобиль юлын, Көнсығыш сығыу юлын төҙөү, Башҡортостан аша үткән федераль трассаларҙың бер нисә участкаһын реконструкциялау.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Көтөүсе муҡсаһы

❖ Бөйөр һәм бауыр ауырыуҙарын дауалау өсөн йәйгеһен йәш үләндән һутын һығып алып, 40 тамсыһына яртылаш һыу ҡойоп, көнөнә 3 тапҡыр эсәләр.

❖ Стресс кисергәндә үләндең яңы һығылған һутының 40-50 тамсыһына һыу өҫтәп, көнөнә 3 тапҡыр эсергә була.

### Боланут

❖ Ашҡаҙан йәки бөйән сей яраһы (язва) булғанда боланут (иван-чай) һауыҙырға ярҙам итергә мөмкин. 2 ҡалаҡ боланут япрағына 1,5 литр һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә, әммә ҡайнатмаҫҡа. Шунан 30-40 минут тынәтергә һәм һөҙөргә. Дауаны ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө эсергә.

### Торма

❖ Һимеҙлек менән яфаланғанда 10 килограмм торманы (редька огородная) йыуып, ҡабығын әрсемәйенсә боҙолған урындарын ғына ҡырҡып ташларға. Шунан ваҡлап турарға һәм һутын һығырға. Ашағандан һуң бер сәғәт үткәс, яртышар стакан көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

### Шалҡан

❖ Миокард инфаркты булғанда көнөнә 3-4 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө йәки яртыһынан шалҡан һутын эсергә. Шулай уҡ уны төрләндереп ашарға кәрәк. Шалҡан ауырыуҙан тиҙерәк төҙәлергә ярҙам итә.

❖ Грипп менән сирләгәндә лә шалҡан файҙалы. Уны ваҡ ҡырғыстан 2 ҡалаҡ итеп үткәреп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт тынәтергә һәм һөҙөргә. Ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан эсергә. Был тынәтмә ауырыуҙың хәлен яҡшырта, сирҙең ҡурылдай һәм үпкәгә күсеүенән һаҡлай.

### Кишер

❖ Бронхит йәки ларингит ауырыуҙарынан дауаланғанда 1 стакан яңы һығылған кишер һутына 2-3 балғалаҡ бал иҙеп, көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсеү файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Ағасты һырлағанда башҡорттарҙың биҙәүгәмәли сәнғәтендә киң таралған элементтар һәм мотивтар ҡулланылыуы күренә. Ҡыя шаҡмаҡтар, өсмөйөштәр, түңәрәктәр, мөһөр биҙәктәр теҙмәһе хатта боронғо сигелгән һәм ҡорама әйберҙәрҙә лә йыш осрай. Мәрйен һәм көмөш тәңкәләрҙән эшләнгән ауыр селтәрҙәрҙең баҙары төрлө төҫтәге мөйөштәр теҙмәһе менән биҙәлгән. Шулай уҡ байрам табындары тирәләй ултырыу өсөн тәғәйенләнгән ҡорама юрғандарҙа ла шундай биҙәктәр ҡулланылған. Бында һүҙ оҫталарҙың бер-береһенең иждадын күсереүе тураһында бармай, ә эш электән һаҡлау һәм таҙартыу көсө бар тип иҫәпләнгән сюжеттарҙы ҡулланыуҙа.

Көньяҡ Урал буйындағы тәпәндәрҙең эшләнеше ҡайһы берҙә икенсе төрлө: тырнаҡҡа оҡшаш уйымдар, оҙонса өсмөйөштәр, оҙонса соҡорҙар рәүешендәге уйымлы һырлау. Шуларҙан торған рәттәр ҡабарынҡы тәпәндең өҫкө өлөшөн биҙәй. Контурлы һыҙат һауыттың күтәренкерәк ауыҙы тирәләй урынлаша. Ейәнсура районының Ибрай ауылында 1958 йылда Рәсәй этнография музейы өсөн шундай бер аҙ күтәренке, тура итеп эшләнгән ауыҙлы тәпән өс ҡырлы ваҡ ҡына уйымдар теҙмәһе менән биҙәлгән. Ошондай уҡ биҙәктәр һауыттың өҫкө ағын һәм һеҙәк ҡапҡасының ҡырҙарын биҙәй. Бер аҙ аҫтараҡ уртаһында йоморо тишекле уйып яһалған һигеҙ тажлы сәскә биҙәктәр урынлашҡан; һауытта улар алтау, ә ҡапҡасында - дүртәү. Ҡапҡас уртаһында сығып торған күсәр ярҙамында түңәрәк билдәләнгән, уның эсенә бер бөртөк ҡабарынҡы биҙәк - дүрт тажлы сәскә эшләнгән. Һауыттың төбө лә ауыҙы кеүек асыҡ беленеп тора.



*Ҡымыҙ тәпәне һәм сылбырлы ижау. Ейәнсура районы, Ибрай ауылы. РЭМ фондынан*

Тәрәнәйтелгән контурлы һәм уйып һырлау бал өсөн бейек һәм тар һауыттар - батмандарҙы биҙәүҙә лә ҡулланылған. Улар соҡоп яһалған йүкә һауыттарҙы күпләп етештергән төбәктә - Ағиҙел арьяғындағы Урал һырттары теҙмәһе буйында һәм тауҙарҙа, шулай уҡ Йылайыр яҫылығында киң таралған. Бал батмандарын эшләү үҙәктәренең береһе Нөгөштән үрендә (атап әйткәндә, Ғәлиәкбәр ауылында), икенсеһе Ағиҙел йылғаһы бөгөлөндәге көньяҡ Бөрйән ауылдарында (Мәндәғол, Ғәҙелгәрәй, Кейекбай һ.б.) урынлашҡан. Ҡымыҙ тәпәндәренеке кеүек, батмандарҙың да ауыр һеҙәк ҡапҡасы булған. Уның эске яғында ситенән бер аҙ арауыҡ ҡалдырып эскә тыҡҡанда һауыттың ситтәренә тығыҙ тейеп торған үҙәк ҡуйылған. Һауыттың цилиндр кеүек формаһын ҡайыш тотҡа өсөн тишекле итеп эшләнгән ике күтәренке сығынты "боҙған". Һауыттың тышҡы яғына оҫта ҡайһы саҡта нурҙарға оҡшаш һыҙаттар эшләгән. Был Уралдағы тау-урман ауылдарындағы тәпән һәм биҙрәләргә хас биҙәү күренеше булған. Көньяҡта (атап әйткәндә, Ейәнсура районында) һауыттың тышҡы яғында вертикаль тура мөйөшлө сығынтылар ҡалдырғандар, һынынан уларҙы тишеп бау йәки ҡайыш кейҙереп тотҡа эшләгән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ

**Йәйҙең тәүге ял көндәрендә генә республика урмандарында 5 кеше аҙашҡан. Бәхеткә күрә, уларҙы иҫән-һау тапҡандар. Ләкин бындай осраҡтарҙың күңелһеҙ тамамланыуы ла йыш күренеш. Шуға күрә һәр кем аҙашҡан осраҡта нимә эшләргә кәрәклеген белергә тейеш. Үҙеңде нисек тоторға, урманға барғанда үҙең менән нимә алырға, эҙләргә сығыусылар тиҙерәк тапһын өсөн ниндәй ысулдар ҡулланырға һәм башҡа әһәмиәтле һәм кәрәкле мәғлүмәттәр тураһында Башҡортостан буйынса РФ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте етәксеһе, эске эштәр капитаны Алик Әнүәр улы ШӘРӘФЕТДИНОВ менән һөйләштек.**

# УРМАНДАРҒА КЕРҺӘҢ...

## аҙашма!



**➔ Алик Әнүәр улы, статистикаға ярашлы, урманда иң күбе кемдәр аҙаша? Һәм бындай осраҡта ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәрен нисек тота?**

- Урманда аҙашыусыларҙың күп өлөшөн пенсия йәшендәге ир-ат тәшкил итә. Улар үҙҙәренә шул тиклем ныҡ ышана, күрәһең, һәм күп осраҡта урманға әҙерлекһеҙ сыға, ғәҙәти ҡағиҙәләргә ҡул һелтәп ҡарай, телефондарын өйҙә ҡалдыра, алған хәлдә лә уның зарядкаһы тулы булыуын күҙ уңынан ысҡындыра. Шулай уҡ йәштәрен, сирҙәрен иҫәпкә алмайҙар һәм тейешле дарыуҙарын өйҙә оноталар.

Ғәҙәттә, кеше еләк-емеш, бәшмәк йыйырға үҙҙәре күптән белгән һәм йыл һайын барған урынға йөрөй. Ләкин унда яңы делянка барлыҡҡа килергә, газ торбаһы һалынырға, яҡтылыҡ бағаналары ултыртылырға, бесәнлек урындары йә уратып алынырға йәки, киреһенсә, ҡоймалар алып ташланырға мөмкин һәм башҡалар. Быларҙың барыһы ла кешене албырғата, ул үҙенең яҡшы белгән урындарын да танымайынса, таныш ерҙәрен эҙләй барып, аҙашып та ҡуйырға мөмкин.

Бындай хәлгә осрағанда ир-егеттәр үҙҙәрен ышаныслыраҡ тота. Күпселек осраҡта улар бер таптҡыр булған урынды яҡшы хәтерендә ҡалдыра, шулай уҡ үткән юлын да онотмай. Географик мәғлүмәтте иҫтәрендә һәйбәт тота, картаны тиҙ һәм дөрөҫ аңлай. Шуға күрә уларҙың урмандан үҙҙәре, ярҙам килгәненен көтмәйенсә, сығыу ихтималлығы ҙур. Әлбиттә, был осраҡтар һаулыҡтары ныҡ булған ир-егеттәргә ҡағыла. Шулай уҡ көслө зат, ғәҙәттә, азимуттар һәм йүнәлештәр буйынса юлды эҙләй, ниндәйҙер аныҡ ҡына ориентирҙы иҫәпкә алмай.

Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың тик яҡынса 10 проценты ғына урын-ерҙе яҡшы тәсмөрләй, картаны дөрөҫ уҡый, ә ҡалғандар өсөн былар ауыр бирелә. Шуға күрә әлеге күпселеккә ингән ҡатын-ҡыҙҙар урманға үҙҙәре генә бик һирәк сыға. Ғәҙәттә, улар бер нисә кеше йыйылып баралар.

Әгәр ҙә аҙаша ҡалһа, ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, ниндәйҙер ориентир буйлап урмандан сығырға тырыша. Мәҫәлән, машиналар тауышы, эттәр өрөүе һәм башҡалар. Күпселек осраҡта улар үҙҙәре килгән яҡтан, ә ир-егеттәр урманға ингән урындарынан тиҫтәләгән саҡрым алыҫлыҡта барып сыға.

**➔ Урманға ниндәй әҙерлек менән сығырға һуң, сөнки күпселек кеше барам да әйләнәм, тип юлланa бит?**

- Ысынлап та, бер кем дә "урманда аҙашып ҡуйырмын", тип уйлап, ныҡлы әҙерлек менән сыҡмай. Ләкин тормошта төрлө хәлдәр була һәм урманды биш бармағы кеүек белгәндәр ҙә аҙашырға мөмкин.

**Шуға күрә урманға барғанда үҙең менән мотлаҡ бысаҡ, шырпы йәки тоҡандырғыс (зажигалка), компас, тағы ла тамаҡ ялғарлыҡ ашамлыҡ, фонарь һәм сағыу стикерҙар алырға кәрәк. Шулай уҡ кәрәҙле телефондың зарядкаһы тулы булырға тейеш һәм урманда оҙаҡ һөйләшеп йәки ҡолаҡсын аша музыка тыңлап йөрөргә ярамай, сөнки, беренсенән, тирә-яҡҡа иғтибарҙы кәметә һәм кеше ҡайҙа барғанына иғтибар итмәй.**

Икенсенән, әлеге лә баяғы телефондың зарядкаһын һаҡлау мөһим.

Яндырғысты ҡыҙыл, һары, күк һымаҡ сағыу төҫләрҙән һайлау яҡшы, сөнки уларҙы үлән араһына төшөрөп ебәргән осраҡта табыуы еңел буласаҡ. Шулай уҡ яндырғыстарҙы бер нисәне алыу һәм салбар, куртка кеҫәләренә, рюкзакка айырып һалып алыу урынлы.

Аҙашҡан кеше яҡтыртыуҙы сағылдырыусы жилет кейгән саҡта ҡотҡарыусыларға эште бермә-бер еңеләйтә. Ғөмүмән, урманға бер сәғәткә юлланғанда ла, походҡа сыҡҡанда ла сағыу кейенергә кәрәк. Ә күптәр яратып кейгән камуфляж костюмдарҙы урманға кейеп барыуҙан бөтөнләй баш тартыу мөһим, сөнки ул тәбиғәт төҫтәре менән ҡушылып, кешене күҙгә артыҡ бәрелмәслек итә.

Тағы ла 240 литрлыҡ сүп-сар тоғо алыу ҙа ҡамасауламаç. Ул күп урынды алмай, еңел, ә тәғәйенләнеше киң - һыу төшмәһен өсөн ҡыуыш өҫтөнә һалырға, еүешләнмәç өсөн аҫҡа түшәргә, ямғыр яуғанда кейеп алырға мөмкин.

Иң мөһиме, урманға юлланғанда өйҙәгеләргә йәки күрше-тирәгә ҡайһы яҡҡа һәм күпме ваҡытҡа китеүегеҙ тураһында хәбәр итеү. Әйтелгән ваҡытҡа ҡайтмаһағыҙ йәки артыҡ оҙаҡлаһағыҙ, улар ҡотҡарыусыларҙы саҡырасаҡ. Аҙашҡан саҡта иң мөһиме ваҡыт, кешене ни тиклем иртәрәк эҙләй башлайҙар, шул тиклем ҡотҡарыуға ышаныс күберәк буласаҡ.

**➔ Аҙашҡан осраҡта нимә эшләргә кәрәк?**

- Аҙашыуҙы аңлаған та туктарға кәрәк. Ҡайҙа булыуҙы аңламау, паника, тегеләй-былай йүгереү, урмандан сығырға тырышыу хәлде тик ҡатмарлаштыра ғына. Артабан уяу булырға һәм тауыштарҙы тыңларға кәрәк. Ҡотҡарыусылар сирена ҡуйырға мөмкин, автомобиль йәки поезд тауышын, эттәр өргәнен йәки бысҡы тауышы ишетергә мөмкин. Поезд тауышы 10, автомобиль йөрөгәне, эт өрөүе һәм атыу тауышы - 3, кешеләр һөйләшкәне 1 саҡрымға тиклем ишетелә. Тауышты яҡшылап тыңларға кәрәк, сөнки урманда уның нәҡ ҡайһы яҡтан килеүен бутарға мөмкин. Шулай уҡ төнөн тауыш ишетелгән яҡҡа барырға кәңәш ителмәй, сөнки күрмәйенсә, соҡорға төшөп китергә һәм башҡа күңелһеҙ хәлдәргә тарырға мөмкин.

Туктаған урынды, төнгөлөккә ҡалырға тура килгәндә, күп итеп ҡоро ағас менән тәьмин итеү мөһим. Ағас бер ҡасан да артыҡ булмай. Усаҡ оҙаҡ янһын өсөн түмәрҙәр ҡулланырға була, сөнки бәләкәй ботаҡ һәм ағастар тиҙ янып бөтәсәк. Миҫал өсөн, беләк йыуанлыҡ ағас 15-20 минут яна, ә ҙур диаметрлы түмәр төнө буйы янырға мөмкин, нәҡ шундайҙы эҙләргә кәрәк тә инде. Аҙашҡанда кеше стресс хәлендә була, шуға күрә ҡаты йоҡламай, был уның өсөн ыңғай момент, сөнки уянған һайын утын өҫтәп торасаҡ.

Әйткәндәй, органик быяла (плексиглас) киҫәге ниндәй температурала ла, еүеш булғанда ла яҡшы яна. Уның менән еүеш утындарҙы ла яндырып ебәрергә мөмкин.

**➔ Урманға киткән кеше тәғәйен ваҡытында ҡайтмаһа, телефоны яуап бирмәһә, уның яҡындарына нимә эшләргә?**

- Тиҙ арала был хаҡта полицияға хәбәр итергә йәки 112 һандары буйынса шылтыратырға кәрәк. Шулай уҡ "Лиза Алерт"тың ҡыҙыу телефонына шылтыратып, кәрәкле мәғлүмәттәрҙе әйтеү ҙә мөһим. Ғариза яҙғанда шәхесте раҫлаусы документ булырға тейеш. Шулай уҡ юғалыусының документтарын да күрһәтеү ҡамасауламаç. Уны эҙләргә сығыусыларҙа мотлаҡ уның фотоһүрәте булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер ҡағиҙә лә, кәңәш тә буш урында уйлап сығарылмаған - уларҙың һәр береһе тормоштан алынған. Бөгөнгө әңгәмә барышында әйтелгәндәр ҙә ваҡытында кемдеңдер ғүмерен һаҡлап ҡалырға булышлыҡ иткән. Шуға күрә гәзит уҡыусыларыбыҙ был ҡағиҙәләрҙе ҡолағына элер, тип ышанабыҙ. Шулай ҙа, ҡотҡарыусылар әйтеүенсә, "иң яҡшы эҙләү - ул бөтөнләй булмаған эҙләү" тигәндәренә ҡушылып, һәр кемде лә бындай бәлә урап үтһен, тиgән теләктә ҡалабыҙ.**

**Гөлназ МАНАПОВА әңгәмәләште.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН



*"Һәр бер халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш".*
*Ризаитдин Фәхретдинов, күренекле башҡорт гуманист-ғалимы, XIX - XX быуат башындағы йәмәғәт эшмәкәре.*

**Тарих фәндәре докторы, академик Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов Башҡортостан тарихы буйынса иң арҙаҡлы белгестәрҙең береһе ине. Ул ғилми эшмәкәрлеген йәш сағынан уҡ археология менән бәйләй. Археология - тарих фәненең арҡа һөйәгелер, сөнки башҡа бер сығанаҡтар булмаған хәлдә тап ер ҡуйынынан ҡаҙып алынған боронғо ҡомарткылар археологҡа тарих төпкөлөндә йәшәгән ҡәүемдәр тураһында үтә ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирә ала.**
**"Өфө-II" археология ҡаласығы Нияз ағай Мәжитовтың иң асыл асыштарының береһе булды. Тарихсы-ғалим халҡыбыҙға бай ғилми мираҫ ҡалдырҙы. Ҡыҙы Әлфиә Солтанова менән авторҙашлыкта яҙылып, 1994 йылда нәшер ителгән "История Башкортостана с древнейших времен до XVI века" тигән китапта Тарихи Башҡортостан хаҡындағы ғилми мәғлүмәттәр системалаштырып бирелгән. Уның "Башҡортостан тарихы. Боронғо осор. Урта быуаттар", тип аталған икенсе баҫмаһы 2010 йылда шулай уҡ рус телендә донъя күрҙе. Нияз ағай халҡыбыҙ өсөн бик тә ҡиммәтле булған ошо баҫманы башҡорт телендә лә нәшер итергә теләк белдереп, бән фәҡирегеҙгә уны башҡортсаға тәржемә итеү хаҡында тәҡдим яһағайны. Мәрхүм ғалимыбыҙҙың теләгенә ярашлы, милләттәштәребеҙ иғтибарына ошо китаптың гәзит вариантын тәҡдим итәбеҙ.**

### Авторҙарҙан

Үҙ тарихын халыҡ тыуҙыра, ә уны айырым шәхестәр яҙа. Кемдең дә булһа ошо һүҙҙәрҙең хаҡлығын инҡар итергә баҙнат ҡылыуы икеле. Оппоненттары тарафынан теге йәки был тарихи ваҡиғаларға субъектив ҡарашта булыуҙа ғәйепләнмәгән тарихсы юҡтыр. Бигерәк тә тарихи үҫеш барышына ҡарата барлыҡҡа килгән ҡараш һәм төшөнсәләр ҡыйралған хәҙерге заманда тарих белгестәренә айырыуса ауырға тура килә. Бында уларға хис-кисерештәрҙе аҡлар өсөн генә килтерелгән факттар ҡулланылған гәзит "һуғыштары"на ҡушылып китеү, урам-майҙандарҙа барған "митинг" демократияһы стихияһына бирелеп китеү хәүефе янай.

Тарихсының объективлығы, беҙҙеңсә, синыфтар, партиялар, милләттәр, дини ағымдар идеяларына тоғро булыуҙа түгел, ә факттар, документтар һәм сығанаҡтарҙың йөкмәткеһе һәм рухына бирелгәнлектә.

Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим ителгән китап авторҙары тулыһынса ошо принциптарҙан тайпылмаҫ, тип әйтеү биғүк дөрөҫ тә булмаҫ ине. Беҙҙең алда ауыр мәсьәлә тора ине. Башҡорттар, Рәсәйҙең бәғзе бер халыҡтары кеүек үк, ватан әҙәбиәтендә дөйөмләштерелгән тарихи тикшеренеүҙәрҙән мәхрүм ҡалды. Унан башҡа, Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттар тарихы систематик рәүештә тик һуңғы 60 - 70 йылда ғына өйрәнелә башланы, унда әлегә тиҙәл итеп асып булмаған "аҡ таптар" һәм бәхәсле моменттар ҙа күп әле.

Беҙ уҡыусыларыбыҙҙы, улар тарихсылар фекерҙәре мозаикаһын үҙҙәре анлай һәм киләсәктәге тикшеренеүҙәр йүнәлешен күҙаллай алһын өсөн, төбәктең иң боронғо замандарҙағы төп тарихи маяҡтары менән генә түгел, уны өйрәнеүҙең торошо менән дә таныштырырға тырыштыҡ. Шулай итеп, беҙ, бер-беренен алмаштыра барып, бик боронғо осорҙарҙан XVI быуатҡа тиклем, Көньяҡ Уралда кеше йәшәгән бөтә осорҙар хаҡында ... хаҡында тулайым мәғлүмәт булдырырға ынтылдыҡ. Һуңғы 2 - 2,5 мең йылдарҙағы ҡәүемдәр тарихын бәйән иткәндә, беҙҙең инаныуыбыҙса, хәҙерге башҡорт халҡының алыҫ һәм яҡындағы ата-бабалары булған боронғо һәм урта быуаттар ҡәбиләләре иғтибарыбыҙ үҙәгендә булды. Үҙебеҙ ҙә көтмәгән бер халәттә, башҡорт халҡының формалашыуы оҙайлы ваҡыттар дауамында барып, VI - X быуаттарҙың һәм уға тиклемге йөҙәр йыллыҡтарҙың ошо процестың айырып алғыһыҙ өлөшө булыуы хаҡындағы һығымтаға килдек. Дөйөм алғанда, ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшә алыуыбыҙға уҡыусыларыбыҙ баһа бирә алыр, тибеҙ.

Ошо китап Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттар тарихын өйрәнеүгә арналған. Уҡыусыбыҙҙың иғтибарын китаптың исеме менән бәйле булған бер мөһим хәлгә йүнәлтергә теләр инек.

Ғилми әҙәбиәттә, шулай уҡ бик күптәребеҙҙең аңында ла Башҡортостан хәҙерге Башҡортостан Республикаһы территорияһы, тип күҙаллана. Башҡортостан тарихсыларына ошо төшөнсәгә етди төҙәтмә индереү фарыҙ.

Башҡорттар тураһында тәүге ышаныслы яҙма мәғлүмәттәр барлыҡҡа килгән осорҙан (IX-XII бб.) Башҡортостандың Рәсәй дәүләте составына ҡушылғанына тиклем (XVI быуат урталарында) улар үтә дәү территорияның - хәҙерге Һамар һәм Һарытау өлкәләренең көнсығыш сиктәренән (Волга йылғаһының һул ярынан, тип уҡырға була) Иртышҡа тиклемге киңлек йүнәлешендә һәм Урта Уралдан (Пермь, Свердлов өлкәләренең көньяғы) Төньяҡ Ҡаҙағстан далаларына ҡәҙәрге ерҙәрҙең төп халҡы, тип иҫәпләнә. Урта быуаттар башҡорттарының варисҭары хәҙерге көндәрҙә лә ошо ерҙәрҙең төп халҡы статусына эйә. Китаптың йөкмәткеһен асыу барышында беҙ уҡыусыға күрһәтелгән сиктәрҙең ысынбарлыҡҡа тура килеүен тарихи документтар менән раҫларбыҙ. Был - башҡорт халҡының формалашыу һәм үҫеш территорияһы, тарихи ватаны һәм, Башҡортостан Республикаһынан айырмалы рәүештә, беҙ уны Тарихи (Оло) Башҡортостан, тип атарға тәҡдим итәбеҙ. Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттарҙағы тарихын беҙ ошо мәғәнәлә бәйән итәбеҙ.

Ошо ғилми баҫма 1994 йылда нәшер ителгән шул уҡ исемдәге китап нигеҙендә әҙерләнде, әммә унан байтаҡ ҡына мөһим моменттары менән айырылып тора. Яңы сығанаҡтарҙан алынған материалдар тәьсирендә беҙгә төбәктең бронза һәм иртә тимер быуаттарҙағы ҡәбиләләре тарихына арналған бүлектәрен яңыртырға тура килде. Әммә был Башҡортостандың урта быуаттар эпохаһына ҡараған тарихына күберәк ҡағылды. Хәҙерге Өфө үҙәгендәге Өфө-II ҡаласығы тирәһендә ҙур ҡала булыуы хаҡындағы асыш урта быуаттар осорондағы Көньяҡ Урал халҡының иҡтимағи-иҡтисади һәм мәҙәни-сәйәси тарихының характеры хаҡындағы белемдәребеҙгә принципиаль яңылыҡ индерҙе. Йыйылған материалдар был ҡаланың IV-V быуаттар сигендә барлыҡҡа килеп, XV - XVI быуат башына тиклем бер өҙләкһеҙ йәшәүен, XIV - XVI быуаттар донъяһының тарихи-географик әҙәбиәтендә бер нисә тапҡыр иҫкә алынған Башҡорт ҡалаһына ышаныслы тап килеүен күрһәтә. Ошо яңы факттар йоғонтоһонда бында Өфө ҡалаһының урта быуаттар осорондағы тарихы тураһында айырым бүлек урын алды, һәм был башҡорт халҡының IX - XVI быуат башындағы этномәҙәни һәм сәйәси тарихы этаптарын киңәйтеберәк (тулыраҡ) сағылдырыу мөмкинлеген бирҙе.

Уҡыусы, моғайын, китаптың ҡушымтаһындағы башҡорт шәжәрәләре тексттарынан, ҡәбер таштарынан һәм башҡа баҫма әҙәбиәттән йыйнап алынған башҡорт хандары һәм бейҙәре исемлегенә иғтибар итер. Ошо арҙаҡлы башҡорт юлбашсыларының эшмәкәрлеге, уртаса алғанда, IX быуаттан алып XVI быуат урталарына тиклемге осорға ҡарай. Ошо исемлекте әҙерләүгә башҡорттарҙың XVI быуатҡа тиклем ырыу-ҡәбилә ҡоролошо стадияһында йәшәүе һәм үҙҙәренең дәүләтселек ойошмаларын булдырыу кимәленә етмәүе хаҡында әҙәбиәттә киң таралыу тапҡан кәмһетеүле ҡараштар этәргес булды. Бүлек тексттарында һәм ҡушымтала килтерелгән исемдәр үҙҙәре хаҡында үҙҙәре һөйләй. Был башҡорт халҡының XVI быуат уртаһына тиклемге хакимлыҡ итеүсе элитаһына ингән шәхестәрҙең исемдәрен системалаштырыуҙың тәүге тәжрибәһе, һәм был киләсәктә башҡорт тарихсылары тикшеренеүҙәрендә үҙ дауамын табыр, тип ышанғы килә.

Ошо китаптың төп һығымталары Башҡортостандың Рәсәй дәүләте составына ҡушылыуының 450 йыллыҡ юбилейы хөрмәтенә әҙерләнгән һәм 2007 йылда нәшер ителгән "Башҡортостан" тарихи-мәҙәни энциклопедик атласында ла ҡыҫҡаса һәм популяр рәүештә сағылыш тапты.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

Шул уҡ көндә Т.Т. Кусимовтың 58-се полкы Мена ҡалаһына яҡынлаша. Ҡаланы һәм станцияны немецтарҙың пехота батальоны һаҡлаған була. Таһир Кусимов атлылары кисекмәҫтән атакаға ташлана. Дошман ҡаушап ҡала. Полк батареяһы дошмандың пулемет расчеттарын ҡырып һала. Ә гв. лейтенанты Ғәбдрәүф Дәүләтовтың пулемет взводы ҡаршы сыҡҡан дошман һалдаттары өҫтөнә ҡурғаш ямғырын яуҙыра. Шул саҡта станцияға немец бронепоезы яҡынлашып килеүе беленә. Шартлатыусы-саперҙар, гв. өлкән сержанты А. Ф. Никифоров һәм рядовой Т. С. Петряев, дошман утына ҡарамайынса, бар яҡтан да асыҡ тимер юлы полотноһын шартлатып өлгөрә. Мена ҡалаһында 150 немец һалдаты һәм офицеры әсиргә алына, төрлө хәрби йөк тейәлгән дошман эшелоны ҡулға төшөрөлә.

19 сентябрҙә иртә менән дивизияның 60-сы гв. кавполкының өлкән сержант С.В. Подлузский взводы дошман обозына юлығып, уның һаҡсыларын юҡ итә, йөктәре менән 50 арбаны ҡулға төшөрә, ылаусыларын әсиргә ала. Шул уҡ көндә был полк эскадрондары район үҙәге булған Березнаға, ә Т.Кусимовтың 58-се полкы Гусавка ауылына яҡынлаша. Березна ҡасабаһы Мена, Седнев һәм Черниговҡа илтеүсе юлдар сатында урынлашҡан була - ул дошмандың Черниговтағы төркөмөнөң флангыһын ҡаплап тора. Немец һалдаттары колоннаһы, оборона тотоу ниәте менән, ауыл ситенә сыға башлай. 60-сы полктың 2-се эскадроны командиры Мулки Байрамов эскадрон ҡарамағына бирелгән артбатареяға ут асыу позицияһын алырға, яугирҙарға атакаға әҙерләнергә бойора. Дошман колоннаһы яҡынлашыуы менән, батарея көслө ут аса, төрлө яҡҡа һибелгән немец һалдаттарына флангылардағы пулемет тачанкаларынан да пулялар яуҙырыла. Эскадрон атакаға ташлана, немецтар тиҙерәк ҡасып ҡотолоу яғын ҡарай.

60-сы гв. кавполкы командирының политбүлек буйынса урынбаҫары, гв. майоры Ш.Н. Закиров 1-се эскадрон атлылары менән алышҡа инә, шәхси өлгөһө менән яугирҙарҙы дәртләндерә. 45 миллиметрлы орудие командиры, гв. өлкән сержанты В.М. Вишневецкий, мәргән атып, дошмандың 6 автомашинаһын, ике орудие таҡҡан тягачын емертә. Березна ауылын азат иткәндә 400-ҙән ашыу немец һалдаты һәм офицеры әсир ителә, боеприпастар һәм аҙыҡ-түлек келәттәре, 2 орудие, 4 миномет трофейға алына.

Беҙҙең 16-сы дивизия штабы һәм ике резерв эскадроны, яралылар дошмандан азат ителгән Березна ауылында урынлаша. Немец командованиеһы, Березнаға дивизияның төп көстәре ингән икән тип, 19 сентябрҙә көн буйына ошо ауылды бомбаға тота. Дивизияның зенит расчеттары бында килеп етмәгән була, шуға күрә 25 - 30 дошман самолеты бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡҡа осрамай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ошо көндә дивизияның 100-ҙән ашыу һалдаты, 5 штаб офицеры һәләк була, 200 ат, бомбалар аҫтында ҡалып, юҡ ителә. Дивизияның медицина хеҙмәте подполковнигы А.А. Сарыгин, тиҙ арала яраланған яугирҙарға тәүге ярҙам күрһәтеп, уларҙы подвалдарға, башҡа хәүефһеҙерәк урындарға урынлаштырыуҙы ойоштора.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Кеше ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, эшен яратырға тейеш. Хатта урам һепереүсе булһа ла, кеше үҙ эшен яратып эшләргә, ынтылырға, үҙ эшендә профессиональ кимәлгә күтәрелергә тейеш.***

# ТЫУҒАН ЯҠТЫҢ

**Ниндәй ҙә булһа берәй анкета тултырғанда "образование" графаһына "высшее", тип яҙған ваҡытта, ҡыҫҡа ғына мәлгә булһа ла үҙең өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уяна. Шулай булмай һуң, ғүмереңдең дәртле, мөхәббәтле йәш сағының биш йыл ваҡыты, альмаматерың урынлашҡан ҡаланың тулы хоҡуҡлы, теркәлгән граждане булып йәшәгән саҡтар иҫкә төшөп өлгөрә шул мәлдә. Был ғынамы ни, йөҙәрләгән зачеттар, имтихандар биреү, рефераттар, курс эштәре, диплом яҙыу, йә дәүләт имтихандары биреү ҙә хәтерҙә телеп үтә. Курсташтарыңдың, төркөмдәштәреңдең һәм, әлбиттә, уҡытыусыларыңдың таныш йөҙҙәре күҙ алдына килә. Сибай институтының вазифалы шәхестәре - иҡтисад фәндәре докторы, иҡтисад факультеты деканы Әҙеһәм Әгзәм улы БАРЛЫБАЕВ һәм биология фәндәре докторы, тәбиғи-математика факультеты деканы Илгиз Вәрис улы ҺӨЙӨНДӨКОВ менән һөйләшкән ваҡытта ана шул илаһи мәл тәмен тағы бер тапҡыр татығандай булдым.**

**Таныш булмаған кеше менән осрашҡанда иң тәүҙә уның сығышы ҡыҙыҡһындыра, ҡайҙа тыуып үҫкәне, ниндәй һөнәр эйәһе булыуы ла ҡыҙыҡ. Үҙегеҙҙең тормош юлығыҙ тураһында ҡыҫҡаса ғына һөйләп үтһәгеҙ ине?**

**Әҙеһәм Әгзәм улы:** Мин Баймаҡ районы Йомаш ауылында тыуғанмын. Урта мәктәпте бөтөрөп, бер йыл колхозда эшләгәс, 1976 йылда Башҡорт дәүләт университетының география факультетына уҡырға индем. Ул осорҙа бөтә юғары уҡыу йорттарында политэкономия фән буларак уҡытыла торғайны. Уҡытыусылар етешмәгәнлектән, Мәғариф министрлығының махсус йүнәлтмәһе буйынса Ростов дәүләт университетына уҡырға ебәрҙеләр. Политэкономияны һайлауымдың сәбәбе бар: ағайым - Хәлил Әүбәкир улы Барлыбаевтың Мәскәүҙә Ломоносов университетын тамамлап, аспирантураны бөтөп, Өфөгә ҡайтҡан ваҡыты ине. Уның менән дә кәңәшләштем: иҡтисадсы булыу тормошта ышаныслы йәшәү өсөн кинерәк мөмкинлектәр биреүен аңланым. Биш йыл Ростовта уҡығандан һуң йүнәлтмә буйынса Өфө авиация институтына уҡытырға ҡайттым. Декан: "Ниңә өйләнмәнең, исмаһам, ике иҡтисадсы булыр ине",- ти, сөнки бында ике уҡытыусы кәрәк икән. Өс йыл эшләнем. Өфөлә йәшәү шарттары ул ваҡытта ауыр ине. Минән һуң уҡып ҡайтҡан иптәшем Стәрлетамаҡ педагогия институтына эшкә төшкәйне, ул бында йәшәү шарттары һәйбәтерәк, бер нисә йылда фатир алып була, тип ҡыҙыҡһындырҙы. Бәкһаң, ул унда һөйләшеп тә бөткән, эшкә саҡырып, хат килде.

Ул мәлдә ғаиләле инем, балабыҙ бар. Өр-яңы ятаҡтан матур ғына бүлмә бирҙеләр. Йәштәргә күп кәрәкме ни, күтәрелеп күсеп тә килдек. Стәрлетамаҡ институтында ун йыл эшләнем, фән кандидатлығына диссертация яҡлап, доцент вазифаһына эйә булдым, белгес буларак формалаштым. Институттың профком рәйесе итеп һайланылар. Башкөллө эшкә сумып, иркенләп эшләп йөрөгәндә, Сибайҙа институт асыла, иҡтисад факультеты була, тигән хәбәрҙәр ишетелә башланы, саҡырыуҙар булды. Күптән инде үҙебеҙҙең тыуған яҡта иҡтисад факультеты асыу хыялым бар ине. Көтәм дә көтәм, шунан 1993 йылда Сибайҙа юриспруденция буйынса факультет асыу тураһында Хөкүмәттең ҡарары сыҡты. Башҡорт дәүләт педагогия институтының филиалы асылып, киңәйеп бара, әлегә иҡтисад йүнәлеше юҡ ине. Хоҡуҡ йүнәлеше асылғас, бер йылдан һуң Башҡортостанда менеджмент һәм идара итеү буйынса тәүге факультет асылды. Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында өс йүнәлеш булдырылды: хоҡуҡ, бухгалтер иҫәбе һәм анализ, менеджмент һәм идара итеү. Башҡорт дәүләт университеты ректоры Рәғиб Насретдин улы Ғимаевтан Сибайҙа иҡтисад буйынса кадрҙар кәрәкме-юҡмы икәнен белешеп шылтыраттым. "Алабыҙ-алабыҙ, - тип, ҡыуанып китте ул, - Сибай яғына ҡайтһағыҙ, институттың директоры Ирек Сабир улы Сабировты күреп һөйләшегеҙ". Был ваҡытта ҡатыным Мәскәүҙә аспирантурала уҡый ине (Беҙ Ростов университетында таныштыҡ, ул ике курсҡа түбән уҡыны). Бер юлы иҡтисад фәне буйынса ике белгес булыуы бик отошло булғандыр, күрәһең. Отпуск ваҡытында ауылға ҡайтҡанда, Сибайға килеп, Ирек Сабир улын күрҙем. Ул мине юл кейемендә килеш Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовҡа таныштырырға алып барҙы. Шулай итеп, сентябрҙә Сибайға күсеп килдек. 1994 йылдан бирле, Аллаһы Тәғәлә мөмкинлектәрен биреп торғас, айырым факультет төҙөү маҡсатын тормошҡа ашыра башланым. Фән докторына диссертацияны бында эшләгәндә яҡланым. Ике улыбыҙ ҙа иҡтисад фәне кандидаттары: өлкәне - Башҡорт дәүләт университеты доцент, бәләкәйе - финанс академияһының филиалында эшләй. Ике улыбыҙҙан икешәр ейән - ҡыҙҙарҙан беҙҙә килендәр генә.

**Илгиз Вәрис улы:** 1976 йылда Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылында тыуғанмын. Күбәләк ырыуы вәкилемен. Ғаиләлә биш бала үҫтек: дүрт малай һәм бер ҡыҙ, малайҙарҙан мин иң өлкәне. Урта мәктәпте 1993 йылда ауылда тамамланым. Беҙ ауылыбыҙҙа асылған урта мәктәптең икенсе сығарылышы (ете ҡыҙ һәм ете малай), беҙгә тиклем һигеҙ йыллыҡ мәктәп ине. Сағыштырып ҡарайым да, ул ваҡытта белем биреү бик төплө булған икән, тигән фекергә киләм. Юғары белем алыу буй етмәҫлек хыял тойолғас, бөтә фәндәрҙән дә тырыштым, сөнки һуңғы мәлгә тиклем ҡайҙа уҡырға барырымды белмәнем. Уҡыуҙы гел "биш"кә бөттөм. Математик, математик бул, ти, филолог артабан тел буйынса уҡыуымды теләй, биолог биологияға өгөтләй. Төрлөсә уйланым, Өфөгә лә барып килдем. Бер мәл Сибай институтынан уҡырға саҡырып килделәр. Тағы уйланам, Сибайҙа минең туғандар күп, сөнки әсәйем ошо яҡтан, уҡыу йорто ла сағыштырмаса алыҫ түгел. Ни булһа ла булыр, тип, йыйынып сығып киттек. Класташтарымдың икеһе документтарын физкультура бүлегенә тапшырҙы, мин биология-физкультура һәм биология-география буйынса бирҙем. Уҡырға инеү өсөн дүртәр имтихан тапшырырға кәрәк. Тырышлығым бушҡа булманы, конкурс ҙур булһа ла (бер урынға ете-һигеҙ кеше), балдар һаны буйынса икеһендә лә үттем. Абитуриенттар күп, бюджет урындары аҙ. Сәфәрғәли Искәндәр улы Йәнтүрин: "Илгиз, һайла, кемдеңдер урынын тотоп тораһың", - ти. "Икеһендә лә бер юлы уҡып булмаймы?" тип ныҡышам. Булмай, ти. Биология-география специальноҫын һайланым.

Биологияны һайлауымдың тағы бер сәбәбе бар: атайым агроном булды, бәләкәй саҡтан уның эшен күреп-белеп үҫтем, агрономия буйынса китаптарын уҡый торғайным, емеш ағастарына прививкалар эшләй, йәшелсә үҫтерә белә инем, сөнки ауыл кешеһе тәбиғәткә яҡын бит. Уҡыуҙы Ҡыҙыл дипломға тамамлап, Сибайҙың йәш натуралистар станцияһына эшкә урынлаштым. Башта уҡ Сәфәрғәли Искәндәр улы лаборант итеп институтҡа саҡырғайны, юҡ, уҡып арыным, хәҙер эшләйем, тинем. 1998 йылда өсөнсө курста ғына уҡып йөрөгән Йылайыр ҡыҙына өйләндем. Ауылға ла ҡайтҡы килә, әммә ҡатыным уҡып бөтмәйенсә, Сибайҙы ташлап булмай, шулай ҡалырға тура килде. Бер-ике ай эшләгәйнем, институтҡа тағы эшкә саҡырҙылар һәм ноябрь айында институтҡа күсеп килгәндән алып егерме өс йыл ошонда эшләйем. Ғаиләбеҙҙә дүрт малай ҙа бер ҡыҙ. Өлкән улыбыҙ Сибай институтын программист һөнәре буйынса тамамланы, икенсеһе - ун берҙе бөттө, өсөнсөбөҙ - туғыҙҙы, ҡыҙыбыҙ Алтынай бишенсе класты бөттө, ун бер айлыҡ Даутыбыҙ әсәһе менән өйҙә.

**Әҙеһәм Әгзәм улы:** Иҫләйһегеҙҙер, туҡһанынсы йылдар аҙағында Сибай институтына фән өлкәһен күтәреү өсөн Өфөнән күп уҡытыусылар килде. Шул осорҙа биология фәндәре докторы, профессор Фәнғәт Хамат улы Хәзиев: "Биология фәне үҙәге хәҙер Сибайға күсте", - тине хатта. Биология буйынса республикала ете-һигеҙ кеше диссертация яҡлаһа, уның күбеһе Сибай институты уҡыусылары ине. Шулай булды бер ваҡыт.

**Илгиз Вәрис улы:** Мин институтта лаборант булып эш башланым. 1999 йылда биология фәндәре докторы Майя Мөнир ҡыҙы Ишморатова тема биреп, фән юлында эш башларға тәҡдим итте. Тәү тапҡыр студенттар менән Ирәмәлгә ялан миҙгеленә (полевой сезон) барҙыҡ. 2002 йылда Ҡыҙыл китапҡа ингән орхидеяларҙың биологияһын өйрәнеү буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын яҡланым. Был бик ҡыҙыҡ тема, орхидеяларҙы бер күргән кеше уларҙы онота алмай, ғашиҡ була һәм мөхәббәте һүрелмәй. Әле яңы ғына студенттарыбыҙ менән Ирәмәлдәге орхидеяларҙы күреп ҡыуанып, илһамланып ҡайттыҡ. Иң йәш фән кандидаттарының береһе инем - егерме алты ғына йәш ине ул ваҡытта. Ваҡыт үтә бара, орхидеяларҙы артабан өйрәнеп, материалдар туплап, 2014 йылда докторлыҡ диссертацияһын яҡланым һәм 36 йәштә фән доктары булдым. 2011 йылдан алып факультет деканы вазифаһын башҡарам.



***Демография хәле насарайып киткәс, ауыл мәктәптәрендә сығарылыш класс уҡыусылары һаны кәмене, балалар булмау сәбәпле, мәктәптәр ябылды. Ошондай шарттарҙа, әлбиттә, институтты һаҡлап ҡалғы килә. Берҙәм дәүләт имтихандары индереү ҙә ҙур хата булды, сығарылыш класс уҡыусылары документтарын үҙәктәге ҙур вуздарға тапшыра башланы. Етмәһә, уҡытыусыларҙың эш һөҙөмтәһен дә уҡыусыларының престижлы уҡыу йорттарына инеүенә ҡарап баһалай башланылар. Балалары Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, йә Екатеринбургта уҡый икән, уҡытыусы шәп, яҡында, Сибайҙа уҡый икән, хөрт булып сыға.***

**Һеҙ ғалим ғына түгел, етәкселәр ҙә. Ошо ике дәрәжә, ике вазифаны нисек яраштырып йөрөйһөгеҙ?**

**Әҙеһәм Әгзәм улы:** Әлбиттә, административ эш ғилми эшкә ҡамасаулай. Тынғыһыҙ эш. Бөтә студенттар өсөн дә яуаплы булырға, уларҙың проблемаларын хәл итергә кәрәк. Ваҡытты, көстө күп ала, фәнгә ваҡыт тарая, ләкин кемдер был эште лә башҡарырға тейеш. Шуңһыҙ, факультетты ҡулда тотоп үҫтермәнән, артабан Сибай институтында фән үҫешенең киләсәге лә икеле. Йәштәрҙе үҫтереү буйынса декан булғас, кемдәрҙең киләсәктә ниндәй ғалим булырлыҡ перспективаһы бар икәнен күреп беләһең. Әлеге ваҡытта факультетта эшләгән уҡытыусыларҙың күпселеге үҙемдең уҡытҡан студенттарым, миндә кандидатлыҡ, докторлыҡ яҡланылар, шулар менән һөйләшеп эшкә алырға кәрәк. Үҙ эшенә ынтылышлы ...

Был ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо уята, күп кешеләргә ундай бәхет эләкмәй. Факультетты юҡтан бар итеү, фәнни мәктәп булдырыу, миненсә, ҙур ҡаҙаныш. Ике уҡыусымдың береһе фән буйынса, икенсеһе уҡытыу буйынса директор урынбаҫарҙары икән, был емешле эш һөҙөмтәһе.

**Илгиз Вәрис улы:** Ысынлап та, декан эше энергияны, ваҡытты күп ала, студенттар менән дә, уҡытыусылар менән дә эшләргә кәрәк. Коллектив декан итеп таный икән, булдырабыҙ икән, эшләйбеҙ. Тәртип һәйбәт булғас, бында һәр кем үҙ вазифаһы өсөн яуап бирә, шуға артыҡ ауырлығын тоймайым.

**Һуңғы осорҙа ниңәләр эшсе һөнәрҙәрен беренсе урынға ҡуя башланылар. Йәнәһе, экскаваторҙа эшләһәң, аҡсаны күрәп алаҫаҡһың. Минең бер танышым заводта К-700 тракторында эшләй. Юғары белемле йәш мастер, "Эй, һин", тип кенә өндәшә, тип асыулана. Йәнәһе, юғары белеме булғас, үҙен өҫтөн ҡуя. Юғары белем өҫтөнлөкмө, әллә…**

**Әҙеһәм Әгзәм улы:** Ынтылыштан тора бөтән нәмә. Бына минең К-700 тракто-

✓ ***Студенттарыбыҙ, башҡа юғары уҡыу йорттарына ҡарағанда, конкурстарҙа, конференцияларҙа ҡатнашып, төрлө яҡҡа күберәк йөрөйҙәр, уларҙың тормошо ҡайнап тора, ә ҙур вуздарҙа улай һәр студентҡа иғтибар еткереп булмай.***

рында эшләгән бер класташымды өрмәгән ергә ултыртмайҙар, хатта күрше райондарҙан килеп, ҙур тракторҙы ремонтлауға алып ҡайталар, сөнки был һөнәр кешеләре хәҙер бик һирәк. Ул миңә: "Кеше менән эшләүе ҡыйын бит ул, профессор булһаң да, һиңә анауындай ҙур урында эшләүе ауырҙыр инде", - ти. "Һәр кем үҙ йүнәлешендә, мәҫәлән, бына һин К-700 буйынса профессор, мин үҙ йүнәлешемдә профессормын", тим. Кеше юғары белем аламы-алмаймы, үҙ йүнәлешендәге ынтылышы менән, һөнәренә тоғро ҡалып, үҙен-үҙе үҫтерә икән, минең өсөн ул да профессор. Ундай кешеләрҙе табыу ҡыйын бөгөнгө көндә. Юғары белем алыуға ынтылыуға килгәндә, был проблема бер күтәрелеп китә, бер төшөп китә. Мәҫәлән, беҙ мәктәпте бөткән ваҡытта шундай традиция булды: бөтөн класс менән ауылда ҡалабыҙ. Ауылда ҡалыу ул осорҙа ҙур мәртәбә һаналды. Әлбиттә, институтта уҡығандар булды, ләкин улар һирәк ине, юғары белемлеләргә һирәк кешегә ҡараған кеүек ҡаранылар. 90-сы йылдарҙа вуздарға ынтылыу күбәйеп китте. Мәҫәлән, беҙҙең факультетта өс йүнәлеш буйынса өс төркөм булды, өсөһөнә лә ҙур конкурс аша үткәреп ала инек, уҡыу йылы алдынан ажиотаж башлана торғайны. Аптырағас, түләүле

файҙаһын аңлаған ата-әсәләр балаларын беҙгә ышанып тапшыра, беҙ шул ышанысты аҡлар өсөн бөтә көсөбөҙҙө һалабыҙ, һәйбәт белгестәр әҙерләп сығарырға тырышабыҙ, ҙур юғары уҡыу йорттарының бындай мөмкинлектәре юҡ. Быны аңлаған ата-әсәләргә рәхмәт, был беҙҙең көслө, башҡаларҙан ныҡ айырып торған ыңғай яғыбыҙ. Ҙур вузға ингән студенттың мөмкинлектәре киңерәк, тип әйтеп булмай, хәҙер бит цифрлаштырыу дәүере, берәй төпкөл ауылда йәшәп тә, цивилизацияның бөтөн яңылыҡтарын белергә мөмкин.

Тағы бер үҙенсәлекле яғыбыҙ бар: студенттарыбыҙ, башҡа юғары уҡыу йорттарына ҡарағанда, конкурстарҙа, конференцияларҙа ҡатнашып, төрлө яҡҡа күберәк йөрөйҙәр, уларҙың тормошо ҡайнап тора, ә ҙур вуздарҙа улай һәр студентҡа иғтибар еткереп булмай. Беҙ иһә, студенттарыбыҙ аҙыраҡ булғас, уларҙы тартабыҙ, этәбеҙ, ҡайһы берҙәре уҡыу осоронда төрлө сараларҙа ҡатнашып, институт иҫәбенә Рәсәйҙе урап сығалар.

**Илгиз Вәрис улы:** Бер яҡтан, ысынлап та бөтәһенең юғары белем алыуы дөрөҫ тә түгелдер, шул уҡ ваҡытта бөтәһе лә урта белемле булыу ҙа дөрөҫлөккә тап килмәй. Хәҙерге заманды мәғлүмәт быуаты, белемлеләр заманы, тибеҙ. Юғары

логиялары буйынса йыл да бюджет урындары бар, уны бөткәндәр ҙә һәйбәт эшкә урынлашалар. Институт күбеһенсә уҡытыусылар әҙерләй, сөнки биология, химия, математика, физика уҡытыусыларына ҡытлыҡ. Беҙҙә генә түгел, бөтөн Рәсәй кимәлендә лә етешмәй улар, ауылдарға кәрәк, ти инек, хәҙер уҡытыусылар ҡалаларҙа ла етешмәй башланы. Әгәр ҙә былай барһа, балаларыбыҙҙы уҡытыусылар булмаясаҡ. Сәбәптәре төрлө, әлбиттә: бер яҡтан, Берҙәм дәүләт имтихандары индерелеү абитуриенттар һанын кәметте, сөнки күп уҡыусылар БДИ-нан ҡурҡып, туғыҙынсы кластан һуң мәктәптән китә, хатта ҙур мәктәптәр унынсы кластарын саҡ тултыралар. Әле беҙҙә уҡыусы контингентының яртыһынан күбеһен колледждан һуң килгәндәр тәшкил итә.

**Ярай, юғары белем алдылар, ти. Артабан эш бармы дипломлы белгестәргә?**

**Әҙһәм Әгзәм улы:** Белгестәр күп өлкәлә етешмәй. Заманында, эш юҡ, тип, иҡтисадсылар, хоҡуҡ белгестәре әҙерләүгә бюджет урындарын бөтөргәндәр. Нисек эш булмаһын, улар бит үҙҙәре эш урындары булдырыусылар! Улар үҙҙәренә генә түгел, бер нисә кешегә эш урыны булдыралар. Мәҫәлән, Сибайҙа-

дарҙа иһә бигерәк етешмәй. Беҙ ҙур эш башҡарабыҙ, кадрҙар менән тәьмин итәбеҙ, Көньяҡ Урал өсөн күп белгестәр әҙерләнек, шуныһы хәл насар булыр ине, сөнки ҙур ҡалаларҙа уҡып бөткәндәр тыуған яҡтарына кире ҡайтмай. Әгәр хөкүмәт, ошо мәсьәлә өсөн яуап биргән етәкселәр киләсәк тураһында уйлана икән, беҙҙең һымаҡ юғары уҡыу йорттарына бюджет урындары бирергә тейештәр, шуныһы беҙҙең райондарҙа, ҡалаларҙа тиҙҙән белгестәр булмаясаҡ. Әлегә мөрәжәғәттәребеҙҙе ишетмәйҙәр, сөнки беҙ федераль кимәлдәге юғары уҡыу йорто, ә был кимәлдә ишетелеүе ауыр. Иҡтисадсыларҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәйбеҙ, ти торғайнылар, былтырҙан башлап улар етешмәй. Иҡтисадсылар, хөкүмәт органдары эшләмәһә, кем идара итәсәк? Урындарҙа ойоштороусылар булмаһа, хоҡуҡ органдарының эше бармаһа, дәүләттең киләсәге нисек була?

**Илгиз Вәрис улы:** Рособрнадзор йыл да юғары уҡыу йортон тамамлаусыларҙың эшкә урынлашыуы буйынса мониторинг үткәрә. Әгәр ҙә был күрһәткес һикһән проценттан түбән булһа, йәғни йөҙ студенттың етмеш туғыҙы эшкә урынлашһа, вуздың эше һөҙөмтәле түгел тип һанала. Беҙ был күрһәткесте ыңғай үтәп киләбеҙ. Ышанмаһығыҙ, аҙна һайын тиерлек ҡайһы бер мәктәп ди-

# ТУҒАН ИНСТИТУТЫ

уҡыу төркөмдәре асырға тигән яңы закон сыҡты. Түләүлене асҡайныҡ, һәр йүнәлештән тағы өсәр төркөм йыя башланыҡ, юғары белем алырға теләүселәр бик күп ине, институт гөрләп торҙо.

Әлбиттә, бюджетта уҡығандар менән түләп уҡығандарҙың араһында белем кимәленең айырмаһы булды: шулай булған һәм буласаҡ. Әммә белемгә ынтылғандарға бик һәйбәт мөмкинлек бар ине: конкурстан үтмәй, түләүлегә инеп, яҡшы уҡыһаң, бюджетҡа күсеп була торғайны. Күп һәләтле студенттар ошо мөмкинлекте файҙаланды. Институт тарихында шундай матур ваҡыт булды. Һуңынан демография хәле насарайып киткәс, ауыл мәктәптәрендә сығарылыш класс уҡыусылары һаны кәмене, балалар булмау сәбәпле, мәктәптәр ябылды. Ошондай шарттарҙа, әлбиттә, институтты һаҡлап ҡалғы килә. Берҙәм дәүләт имтихандары индереү ҙә ҙур хата булды, сығарылыш класс уҡыусылары документтарын үҙәктәге ҙур вуздарға тапшыра башланы. Етмәһә, уҡытыусыларҙың эш һөҙөмтәһен дә уҡыусыларының престижлы уҡыу йорттарына инеүенә ҡарап баһалай башланылар. Балалары Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, йә Екатеринбургта уҡый икән, уҡытыусы шәп, яҡында, Сибайҙа уҡый икән, хөрт булып сыға. Институтыбыҙҙа был насар йоғонто яһаны, хатта үҙебеҙҙең Сибай мәктәптәре, күрше район мәктәптәре Сибай институтына инеүҙе вузға инеүгә тиң түгел һымаҡ күрә башланылар, һөҙөмтәлә абитуриенттар һаны ҡырҡа кәмене.

Беҙҙең факультетта, мәҫәлән, түләүле урындар ғына ҡалды, килгән абитуриенттарҙың белем кимәле күпкә төштө, ләкин беҙгә уҡырға ингәндәр өсөн, башҡа вуздарға ҡарағанда, өҫтөнлөгөбөҙ бар: һәр студент күҙ уңында, уҡытыусыларыбыҙ улар менән үҙ балаһылай күреп шөғөлләнә. Шул арҡала белгестәр әҙерләүҙә кәрәкле кимәлдә тотабыҙ. Сағыштырмаса кимәлебеҙ насар түгел, бәлки, һәйбәттәрәктер ҙә әле, сөнки беҙ ҙур бер ғаилә һымаҡбыҙ. Һәр факультетты күршеләш айырым бер ғаилә тип ҡабул итергә була. Ошондай мөхиттең

белемдең файҙаһы нимәлә? Әлеге лә баяғы тракторист, сварщиктар айына илле мең эшләһә, юғары квалификациялы программистар айына яртышар миллион эшләй ала. Әлбиттә, кеше ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, эшен яратырға тейеш. Хатта урам һепереүсе булһа ла, кеше үҙ эшен яратып эшләргә, ынтылырға, үҙ эшендә профессиональ кимәлгә күтәрелергә тейеш. Әлбиттә, эш хаҡын да инҡар итеп булмай, сөнки кеше уҡымай ҙа аҡса эшләй алам, тип уйларға тейеш түгел, ҡайҙа эшләһә лә, ул бит үҙ һаулығы менән түләй, был яҡты ла онотторға ярамай.

Юғары белемгә килгәндә, эш булмаҫ, тип ҡурҡырға ярамай. Бы-



***Эш булмаҫ, тип ҡурҡырға ярамай. Бына, мәҫәлән, биологтар кәрәкмәй, тиҙәр. Юҡ, киреһенсә, экологик проблемалар, иҡтисади көрсөктәр ваҡытында биологтар бик кәрәк. Әле күп нәмәләр өйрәнелмәгән, үҫемлектәр төрҙәрҙәренә инвентаризация бөтмәгән, яңы төрҙәр асыла, ә белгестәр етешмәй. Һанай китһәң, тәбиғәт ресурстарын файҙаланыу өсөн үҫемлектәр буйынса юғары белемле флористар етешмәй, зоологтар кәрәк. Ваҡытында халыҡтың һорауы буйынса география, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу специальностәрен асҡайныҡ, әле лә был йүнәлештәр буйынса бюджет урындары бар, уҡып бөткәндәр һәйбәт урындарҙа эшләй.***

на, мәҫәлән, биологтар кәрәкмәй, тиҙәр. Юҡ, киреһенсә, экологик проблемалар, иҡтисади көрсөктәр ваҡытында биологтар бик кәрәк. Әле күп нәмәләр өйрәнелмәгән, үҫемлектәр төрҙәрҙәренә инвентаризация бөтмәгән, яңы төрҙәр асыла, ә белгестәр етешмәй. Һанай китһәң, тәбиғәт ресурстарын файҙаланыу өсөн үҫемлектәр буйынса юғары белемле флористар етешмәй, зоологтар кәрәк. Ваҡытында халыҡтың һорауы буйынса география, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу специальностәрен асҡайныҡ, әле лә был йүнәлештәр буйынса бюджет урындары бар, уҡып бөткәндәр һәйбәт урындарҙа эшләй. Гәмәли математика һәм мәғлүмәт техно-

ғы хоҡуҡ буйынса юридик консультациялар, адвокат контораларын ойоштороусылар беҙҙә уҡып сыҡҡан белгестәр, әле лә беҙҙә уҡып бөткәндәрҙе һорап киләләр. Полицияла ғына шулайҙыр, тип уйлай торғайныҡ, сөнки хоҡуҡ белгестәре улар өсөн беренсе сиратта кәрәк, хәҙер приставтар килә башланы, судта ла, прокуратурала ла - бөтәһендә лә белгестәр етешмәй. Сәбәбе ябай ғына: был өлкәләге белгестәрҙең эшләү дәүере бик ҡыҫҡа ғына, егерме биш йыл эшләйҙәр ҙә, отставкаға китәләр. Фәнни тел менән әйткәндә, ротация тип атала - алмашыныу бик тиҙ бара. Шуға күрә бер беҙҙә генә түгел, ҙур ҡалаларҙа ла шул уҡ хәл, төпкөл ҡалаларҙа, район-

ректорҙары, телефон номерымды ҡайҙандыр табып, йә информатика белгесе, йә программист, йә башҡа төрлө һөнәр уҡытыусыһы һорайҙар, физкультуранан, химиянан уҡытыусы эҙләйҙәр. Ҡытлыҡ көслө, шулай булғас, төпкөл ҡалаларҙағы вуздарҙы хөкүмәт киңәйтергә тейеш. Әммә декан булараҡ, шуны ла беләм: бюджет урындарын күбәйткәндә икенсе проблема киләсәк, егерме-егерме биш урын бирелһә, төркөмдәрҙе тултырыу ҡыйынлыраҡ буласаҡ, сөнки Берҙәм дәүләт имтихандары буйынса балдары күберәк булғандар Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан ҡалаларын һайлай башлай. Беҙҙең яҡтан киткәндәр кире ҡайтмайҙар, эш урындарына килмәйҙәр. Бында нимә эшләргә була? Патриотизм тойғоһо тәрбиәләргә кәрәк. Кадрҙарҙы әҙерләү беҙҙә лә яҡшы, хатта үҙенсәлекле өҫтөнлөктәребеҙ ҙә бар. Мәҫәлән, сифат яғынан. Әҙһәм Әгзәм улы тыйнаҡлыҡ күрһәтеп, өндәшмәне, ә бит уларҙың ирекле эшҡыуарлыҡ буйынса студенттары ике тапҡыр Рәсәй кимәлендә еңеп, халыҡ-ара кимәлгә сыҡтылар. Беҙҙең факультетты алғанда ла, һикһәндән ашыу фән кандидатыбыҙ бар, уларҙың фәнни өлкәлә, лабораторияларҙа эшләй алыуҙары бик юғары күрһәткес.

**Һеҙҙе тыңлайым да, уңыштар ҙа етерлек, әммә проблемалар ҙа аҙ түгел, бәлки, Болонья системаһынан сығыу ыңғай үҙгәрештәр килтерер?**

**Әҙһәм Әгзәм улы:** Беҙҙең илдә берәй сит илдең моделен үҙебеҙгә күсерһәләр, уның насар яҡтарын алалар ҙа, яҡшы яҡтарын торғоҙоп ҡалдыралар. Мәҫәлән, Болонья системаһын алайыҡ. Ундай системаларҙы ниндәйҙер ерлектә файҙа алыу өсөн махсус уйлап сығаралар, ҡай саҡ улар тарихи юҫыҡта ла килеп сыға. Һәр система иң тәүҙә үҙ даирәһен киңәйтә, шунан ситтәрҙе баҫып ала башлай. Беҙ, мәҫәлән, шул әҙер системаға ҡойроҡ булып ҡушылып, төп ваҡиғаларҙың ситендә ҡалабыҙ һәм башлағандарҙың арттарынан эйәрә алмайбыҙ.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ ***Америка балаларының белем кимәле түбән икәнен белә инек бит. Наҙандар ти торғайныҡ уларҙы, хәҙер үҙебеҙҙекеләр наҙан тиерлек, Америка белем биреү системаһының иң насар яғын үҙебеҙгә күсерҙек.***



# ТЫУҒАН ЯҠТЫҢ ТУҒАН ИНСТИТУТЫ

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Иҡтисад буйынса шулай килеп сыҡты, көнбайыш системаһына ҡушымта булып ҡыҫылдыҡ та, алға китә алмайбыҙ. Сәйәсәт яғынан да, белем биреү системаһында ла шул уҡ хәл. Ә бит беҙҙең бөйөк белем биреү системаһы бар ине. Ниңә беҙ уны үҙәк итеп, башҡаларҙы үҙебеҙгә тартманыҡ. Философик яҡтан дөйөмләштереп ҡарағанда, был ҙур хата булды. Хәҙер кире ҡайтыуы ҡыйын, сөнки ваҡытты, белгестәрҙе юғалттыҡ. Йәштәр тиҙерәкте, ялтырауыҡты ярата, төптән уйлау юҡ. Белем системаһы хәҙер ялтырауыҡҡа ҡоролған: балдар, рейтинг, фәнни публикация һ.б. Көнбайыш системаһында яҙған мәҡәләләреңде күреңһә, билдәлеһең, бушҡыуыҡ лайктар өсөн тырышабыҙ.

Үҙ системабыҙҙы үҙәк итеп алып, башҡаларҙы шуға ҡушып ҡына күтәрелә алабыҙ, сөнки Болонья системаһы ҙур хата булды һәм белем системабыҙҙы артҡа ташланы. Әле ҡапыл ғына беҙ унан баш тарта ла алмайбыҙ, сөнки беҙҙең әллә күпме бакалаврҙарыбыҙ юғары белемһеҙ тороп ҡалған һанала. Ул беҙгә бер ниндәй ҙә файҙа бирмәне, ҡыуанышып, сит илдәрҙең вуздарына инәйек, тип уйлауыбыҙ буш булып сыҡты, ундай мөмкинлектәр бирмәнеләр, беҙгә мөнәсәбәт икенсе төрлө булды. Бер ваҡыт бер-ике партия студенттарыбыҙҙы сит ил вуздарына конкурс буйынса ебәрҙеләр. Беҙҙең институттан да бер нисә кеше әлэкте, уларҙы магистратураға алдылар. Айһылыу Йәнтуринабыҙ ситтә уҡып бөтөп, хәҙер ООН системаһында эшләй. Англия, Германия уҡыу йорттарына ингәндәр булды, улар шунда тороп ҡалып, шунда эшләйҙәр. Беҙҙең өсөн кәрәк инеме был ынтылыш? Яҡшы белемле кешеләребеҙҙе үҙҙәренең системаһына һурыу ғына булды - бөтөн нәмә шуға ҡоролған: тәбиғи байлыҡтарҙы, кеше капиталын, финансты һурыу. Был системанан кисектергеһеҙ баш тартырға кәрәк. Беҙ үҙебеҙ үҙәккә әйләнергә тейешбеҙ, әммә һурыу өсөн түгел, һәр яҡ өсөн дә файҙалы система булырға тейеш. Үҫешеп килгән илдәр өсөн беҙҙең система көнбайыштыҡына ҡарағанда өҫтөнөрәк, гуманистик принциптарға ҡоролған теләктәшлек системаһы булһын. Бер йүнәлештә генә быны атҡарып булмай, бөтөн системаны үҙгәртергә кәрәк.

**Илгиз Вәрис улы:** Болонья системаһы мәғариф, фән өлкәһенә ҙур һәжүм булды. Мин шәхсән үҙем баштан ҡаршы инем. Элек сығарылыш курс студенттарыбыҙ йыл да фән өлкәһендә ғилми эштәрен яҡлайҙар ине. Бакалавриат, магистратура системаһы ингәс (беҙҙә магистратура юҡ, закон буйынса филиалдарҙа булмай), был эш туҡтаны. Студенттарыбыҙ бакалавриатты уҡып бөтәләр ҙә, шуның менән бөттө, тимәк, дүрт йыл уҡып, тулы юғары белемгә эйә түгел булып сығалар. Ә бит ана шул бишенсе курста улар белгес булып формалаша, нәҡ шул бер йыл етмәй беҙгә, студенттарыбыҙ үҫешеп етмәйҙәр, сөнки дүрт йыл әҙерәк. Улар беҙҙә уҡыйҙар ҙа, магистратура булмағас, юғалалар. Инә алғандары ҙур ҡалаларҙағы магистратураға инә, ҡалғандары эшкә төшә, белемдең күсәгилешлеге бөттө. Фән өлкәһендә лә, диссертация яҡлауҙарҙа ла шул уҡ хәл. Әле беҙҙең быуын уҡытыусылары иң йәш уҡытыусылар һанала, ҡырҡтан йәшерәк уҡытыусылар юҡ. Ни өсөн? Магистратура юҡ! Ун бер йыл көрәшәбеҙ магистратураны лицензиялау өсөн, йөк һаман урынында.

**Әҙеһәм Әгзәм улы:** Магистратура булмағас, бакалавр кимәлендә фән менән шөғөлләнергә ярамай, фән белгесе булмағас, институтта уҡыта алмай, аспирантураға инә алмай - был беҙҙең һымаҡ вуздарҙың бәкәләнә һуға. Заманында иң йәш кадрҙар беҙҙә ине, хәҙер кадрҙар өлкәнәйә бара, йәштәрҙе әҙерләй алмайбыҙ, магистратураға ебәрәбеҙ, әйләнеп ҡайтмайҙар. Был көсөргәнешле хәлдең тамырҙары тәрән: Берҙәм дәүләт имтихандары ана шул бөтөн системаның бер элементы ғына. Система үҙгәргәс, уның элементтары ла үҙгәрә. Төптән уйлағанда, беҙ педагогиканың иң төп бер принцибынан баш тарттыҡ, икенсе принципҡа күстек. Принцип үҙгәргәс, система үҙгәрҙе.

Ул принцип нимәнән ғибәрәт? Совет уҡытыу системаһының төп принцибы - кешене фекерләргә, уйларға өйрәтеү. Әйе, яңы дәүләт стандарттары балаға азатлыҡ биргән кеүек, әммә совет балаһының азатлығы күберәк ине, быны мәктәп йылдарынан иҫләйем. Мәҫәлән, мин матур итеп, тәфсирләп инша яҙа белмәйем, сөнки телем бай түгел, филолог була алмаҫ инем. Башҡорт теленән уҡытҡан Роза апай патриотик темаға инша яҙыр өсөн төрлө матур темалар бирә. Матур һүҙҙәр менән үҙемдең тыуған яғымды һүрәтләй белмәйем, әммә факттарға таяна беләм. Мәҫәлән, беҙҙең Йылайыр совхозы Әрмәнстанға ҡарағанда шунса күберәк иген бирә, тип яҙам, тағы икенсе факттар өҫтәйем. Апай тәрбиәүи яҡтан көслө уҡытыусы булған. Ул: "Әҙеһәмгә иншаһы өсөн "дүрт", дөрөҫ килтерелгән факттары өсөн "биш", - ти. Дүрт тә бар, биш тә бар, насар түгел дә! Беҙҙе шулай итеп үҫтерә белделәр. Тәрбиә шулай яйлап күңелгә һалына бара. Роза апай ғына түгел, башҡа уҡытыусылар ҙа, ярай, һин был яҡтан булдыра алмаһаң да, быны был яғың шәп, тип үҫтерәләр ине. Ғалим булып китеүем, бәлки, шуға ла бәйле булғандыр.

Фекер үҫтереү, уны әйтә белеү бик көслө ҡорал бит ул. Хәҙер төп принцип ниндәй? Һин хәтерләргә тейешһең! Бөтөн нәмәне хәтерләп бөтөп булмай! БДИ шуға ҡоролған, фекерләү ҡеүәһе унда кәрәкмәй. Аҙаҡтан, әйҙә, әҙәбиәтте, тарихты индерәйек, ти башланылар. Ни өсөн? Балалар тарих менән әҙәбиәтте белмәнә, белем биреү системаһы үҙенең функцияһын үтәп бөтмәй, фекерләү кимәлен үҫтермәһәк, балаларҙың белеме түбәнәйә икән.

Донъя бит әҙер нәмәләрҙән генә тормай, ул бөгөн былай, иртәгә икенсе яҡҡа үҙгәрергә мөмкин. Ни эшләп үҙгәрә? Ҡалай үҙгәрергә мөмкин? Ҡалай булһа, файҙалыраҡ, кәрәгерәк? Фекерләй алмаһаҡ, тормошто нисек итеп үҫтерә алабыҙ һуң? Ярай, бөтөн нәмәне иҫләйбеҙ, ти, ә ул бит иртәгә үҙгәрәсәк, йә юҡҡа сығасаҡ. Кәрәк инеме шундай системаға күсеү? Америка балаларының белем кимәле түбән икәнен белә инек бит. Наҙандар ти торғайныҡ уларҙы, хәҙер үҙебеҙҙекеләр наҙан тиерлек, Америка белем биреү системаһының иң насар яғын үҙебеҙгә күсерҙек. Уйымса, быны төптән үҙгәртергә кәрәк. Бөтөн нәмә БДИ-ға ҡоролғандан бирле белем биреү системаһының эше формаль күрһәткестәр буйынса баһалана башланы - бюрократҡа, административ хеҙмәткәргә былай баһалау еңелерәктер ҙә, бәлки. Уҡыусыларҙы ғына түгел, уҡытыусыларҙы ла БДИ буйынса баһалай башланылар. Артабан былай дауам итә алмай, мониторингтарҙа БДИ-ның уртаса балы беренсе урында булырға тейеш түгел, системаны тамырынан үҙгәртергә кәрәк.

**Илгиз Вәрис улы:** Мин Берҙәм дәүләт имтиханына әләкмәнем. Башта әйткәнемсә, ҡайҙа уҡырға барырымды белмәгәс, бөтә предметтарҙан да тырышып уҡыным. Шулай һәйбәт булғандыр, тим, совет белем биреү системаһы кешене төрлө яҡтан үҫтерергә, белемле итергә ҡоролған булған. БДИ буйынса имтихан бирмәгән предметтар кәрәкмәгән һымаҡ булып сыға. Әлбиттә, Берҙәм дәүләт имтихандарын күп әрләргә була, әммә ыңғай яҡтарын да әйтер инем. Мәҫәлән, элек Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларына уҡырға инеү буй етмәҫлек хыял булған. Хәҙер ауыл мәктәбендә уҡып та, яҡшы уҡыйһың икән, документтарҙы биш төрлө юғары уҡыу йорттарына тапшырырға була. Тик, минең уйлауымса, дәүләт имтихандары һайланма булырға тейеш. Кем теләй, бирһен, теләмәһә, ихтыярына ҡуйырға кәрәк. Юғары уҡыу йорттарына ла, автономия биреп, үҙаллы имтихан алырға рөхсәт бирһәләр, һәйбәт булыр ине. Мәғариф системаһында иң ҙур бәлә нимәнән килә? Беребеҙ ҙә өндәшмәйбеҙ. Ниңә? Реформалар барғанда йәмәғәтселекте, мәғариф өлкәһе белгестәрен йыйып, уртаҡ фекер алышыу юҡ, бәрәү ҙә һорап тормай, уҡытыусыларҙы кәрәкмәгән эшкә сумдыралар, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡағыҙҙар, программалар яҙыуға дусар итәләр.

> ***Үҙ системабыҙҙы үҙәк итеп алып, башҡаларҙы шуға ҡушып ҡына күтәрелә алабыҙ, сөнки Болонья системаһы ҙур хата булды һәм белем системабыҙҙы артҡа ташланы. Әле ҡапыл ғына беҙ унан баш тарта ла алмайбыҙ, сөнки беҙҙең әллә күпме бакалаврҙарыбыҙ юғары белемһеҙ тороп ҡалған һанала. Ул беҙгә бер ниндәй ҙә файҙа бирмәне, ҡыуанышып, сит илдәрҙең вуздарына инәйек, тип уйлауыбыҙ буш булып сыҡты, ундай мөмкинлектәр бирмәнеләр, беҙгә мөнәсәбәт икенсе төрлө булды. Бер ваҡыт бер-ике партия студенттарыбыҙҙы сит ил вуздарына конкурс буйынса ебәрҙеләр. Беҙҙең институттан да бер нисә кеше әлэкте, уларҙы магистратураға алдылар.***

▸ **Юғары уҡыу йорттарының ҡабул итеү комиссиялары өсөн көсөргәнешле ваҡыт етте. Абитуриенттарҙы, буласаҡ студенттарығыҙҙы Сибай институтына нисек саҡырыр инегеҙ?**

**Әҙеһәм Әгзәм улы:** Хәҙерге ваҡытта балаларҙы уҡырға саҡырыу бик ҡыйын. Әлбиттә, осрашып торабыҙ, мәктәптәргә барабыҙ. Төп бәлә: хәҙерге балалар ата-әсәләренә үҙ шарттарын ҡуя. Юҡ, Сибайҙа уҡымайым, әллә кем Ҡазанға бара, мин дә шунда барам, мине лә ебәрегеҙ, ти ул. Ата-әсәһе, мөмкинлеге бармы-юҡмы, һуңғы нәмәһен һатып, аҡсаһын балаһына биреп, юлға оҙата. Ә бит ситтә, йыраҡта шарттар ауыр, үҙенде-үҙең ашатмаһаң, стипендияға ғына йәшәп булмай. Шунан ҡайһы бере уҡып бөтә алмай, йә уҡып бөтөп тә, үҙ һөнәре буйынса эшләмәй.

Ялтырауыҡлы исемле яңы һөнәрҙәр менән дә ымһындыралар. Балалар бит тормошто аңлап бөтә алмай, күп нәмәне белмәй. Ата-әсәләр балаларының һүҙенән сыға алмай, башҡаларҙан хур булмаһын, тиҙәр. Ситтән күсереп, беҙҙә уҡып бөткән осраҡтар була. Беҙ бит балаларыбыҙҙы ата-әсәһе, туғандары аша яҡшы беләбеҙ. Үҙ-ара абсолют яуаплылыҡ тойғоһо бар беҙҙә. Ситкә барғандарға ундай яуаплылыҡ юҡ. Әйтәйек, минең класташым, йә башҡа танышым үҙенең ейәнен алып килә икән, мин уның өсөн яуаплылыҡ алам. Беҙҙәге ошо ғаилә прицибына тартым мөхит файҙаһын ата-әсәләр иң тәүҙә аңларға тейеш, сөнки балалар аңлай һалып бармай. Мәҫәлән, юриспруденцияла бюджетҡа инеү ауыр, улар күберәк түләүлегә инә. Хаҡы ҡыйбат - йәҙә ун мең. Беҙ уйланыҡ та, положение төҙөнөк: әгәр ҙә бала һәйбәт уҡыһа, сессияларын өсһөҙ бирһә, йәмәғәт эштәрендә актив ҡатнашһа, фән менән шөғөлләнһә, волонтер булһа, һәр эше өсөн балдар йыя һәм шул рәүешле уҡыу хаҡын илле процентҡа тиклем төшөрә ала. Башҡа уҡыу йорттарында бындай мөмкинлек юҡ. Белем бирәбеҙ, тәрбиәләйбеҙ, бындай мөмкинлектән һис тә баш тартырға ярамай.

**Илгиз Вәрис улы:** Әҙерлек һәйбәт беҙҙә. Мәҫәлән, республикалағы өс ҡурсаулыҡта ла беҙҙең институтты бөткәндәр эшләй. Район мәктәптәрендә барһаң, беҙҙең кадрҙар эшләй, бер ҙә Өфө, Ҡаҙан, Мәскәү уҡыу йорттарын тамамлағандар түгел. Бөтәбеҙ ҙә үҙебеҙҙең яҡтың тормошон ташлап, йылы урын эҙләп китәбеҙ икән, бында кем ҡаласаҡ һуң? Кем беҙҙең балаларҙы уҡытасаҡ? Шуға патриотик тойғоно ла иҫәптән сығармаҫ кәрәк. Был беҙҙең ерҙәр, уны беҙ үҫтеререгә тейешбеҙ. Рәсәй төбәктәре менән көслө, уларҙы беҙ күтәрмәһәк, кем күтәрер?

**Әҙеһәм Әгзәм улы:** Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тиҙәр. Бер урын да буш булмай, әгәр ҙә беҙҙең йәштәр тыуған ерен ташлап, ситкә китә икән, был ер буш ятмаясаҡ, кемдәрҙер, икенселәр киләсәк. Әгәр кеше үҙенең бөгөнгө көнөн генә уйлап, миңә генә һәйбәт булһын, тип, балыҡ тәрәнде, кеше һәйбәт ерҙе эҙләй, принцибы менән йәшәһә, тыуған яғына хыянат итәсәк. Тыуған яҡта ҡалайым, тыуған яҡты үҫтерәйем принцибы алға сығырға тейеш. Быны беҙ, күп кенә уҡытыусылар, тыуған яҡҡа ҡайтып, уның киләсәге өсөн йәшәйбеҙ, үҙебеҙҙең ерҙә үҙебеҙҙең кадрҙарҙы үҫтереү менән мәшғүлбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Билләһи, тәжрибәле декандарҙың төплө фекерҙәрен тыңлап, нәҡ Сибай институтында юғары белем алғым килеп китте. Анкетаның "образование" графаһында "высшее" тип яҙып, ғорурлыҡ тойғоһо кисерер өсөн генә түгел, тыуған яҡтың туғаны, илһөйәре булыр өсөн дә!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**




* * *

Айгөл - көслө спортсменка. Район ярыштарында ла ҡатнашып, призлы урындар алғаны булды. Баскетбол уйнаған саҡта ул һәр саҡ Камила булған командаға ҡаршы уйнай. Камилаға һөжүм итеүҙән айырым бер кинәнес ала торғайны шикелле. Был юлы ла ҡыҙ Айгөлдөң үҙенә мыҫҡыллы йылмайып торғанын күрҙе. Бына ул әхирәттәренә табан бороолдо һәм, бөтәһе лә ишетһен өсөн, ҡысҡырып әйтте: "Беҙ иркә-наҙлыларға ысын спорттың нимә икәнен күрһәтергә тейешбеҙ! Беҙҙең ҡулда улар үрле-ҡырлы һикерәсәктәр! Еңеү беҙҙеке!.. Дуҫ малайҙары алдында ултырып иларлыҡ булһын. Шунан инде беҙгә ҡаршы сығыу түгел, танауҙарын да күрһәтмәҫтәр бүтәнсә..." Эргәһендәгеләр уны ҡеүәтләп, ҡысҡырып көлдө. Маҡсатына ирешә Айгөл. Камиланың сикәләре гөлтләп ҡабынды. Ниңә, ни өсөн уны шул дәрәжәлә ҡуралмаҫҡа була? Өсөнсө йыл сабырлыҡты һынай. Түҙемлектең дә сиге була ла баһа!

- Еңһәк тә, еңелһәк тә, һөҙөмтәһе бер генә - беҙҙе яраталар. Шуға дуҫлыҡ һорап инәлеп хат ебәргәнебеҙ юҡ. Мохтаж түгелбеҙ, һин уйыңда ғына еңәһең, ә мин тормошта. Мә, үҙеңә булһын! - Шулай тине лә тупты ҡаты итеп Айгөлгә бәрҙе. Айгөл туптан бигерәк көтөлмәгән яуаптан йығылып китте шикелле. Ул бит Камиланан бер ҡасан да бындай һүҙ ишетермен, тип уйламағайны. Тегенең өнһөҙ генә икенсе яҡҡа боролоуына, ситкә китеүенә өйрәнеп бөткәйне. Сәмле спортсменканың ҡаушауы, юғалыуы етә ҡалды. Был уйын һөҙөмтәһендә лә сағылды. Камила иһә беренсе тапҡыр үҙен еңеүсе итеп тойҙо. Эстән ниндәйҙер ҡәнәғәтлек кисерҙе. Тимәк, ваҡытында һөжүм итә белергә кәрәк. Ул бынан ары үҙен яҡлаясаҡ.

Был хәл Ғәзинурға ла барып ишетелде. Тик, ни өсөндөр, Айгөлдөң үҙенә хат яҙыуын төп сәбәп тип аңланы. Аҡланырға теләгәндәй һүҙ башланы: "Хан заманында булған нәмә бит. Ул саҡта әле һеҙ Юлбирҙегә күсеп килмәгәйнегеҙ..." Камила егетте тыңлап бөтмәне: "Кәрәкмәй. Мин Айгөлгә мөхәббәтте һорап алып булмағанын ғына әйттем. Хәҙер ул быны аңлай". Ваҡиға шуның менән тамамланды.

Спортҡа килгәндә, Камила баскетболда шаҡтай ғына һәйбәт уйнай ине. Ләкин спорттың бөтә төрө буйынса ла ҡыҙҙар араһында Айгөлгә еткәне булманы. Ярыштарҙа йыш ҡатнашыу арҡаһында дәрестәрҙе ҡалдырырға тура килде. Ләкин был хәл өлгәштә бер нисек тә сағылманы. Уның тырыш, шулай уҡ үҙенә ҡарата талапсан булыуын танымау мөмкин түгел. Район мәктәптәре араһында ниндәй генә ярыштар үткәрелмәне ул йылдарҙа. Юлбирҙе ауылына ла килеп төшә торғайны ҡунаҡтар. Шундай осрашыуҙарҙың береһе ҡыҙыҡ ҡына булып иҫтә тороп ҡалған.

Камила үҙенең яратҡан шишмәһенә китте. Яҡынлаша биргәс, аптырап китте, был тирәлә күрмәгән-белмәгән ят бала-саға зыҡ ҡуба. 5-се йәки 6-сы синыфты-ҡыларҙыр.

- Һеҙ кемдәр? Бында нимә эшләп йөрөйһөгөҙ?

- Ниңә, ярамаймы ни? - тине бер малай алғараҡ сығып.

- Ярамай шул. Инде һеҙ генә етмәгәйнегеҙ шишмә бысратырға... Аҙашып килеп сыҡтығыҙмы әллә?

- Апай, беҙ бит бында ярышҡа килгәнбеҙ, төшкөләктә ашаныҡ та, әҙерәк йөрөп киләйек, тигәйнек. Бына әрләндек тә... Юлбирҙеләр һә тигәнсе асыуланып бара. Киттек, малайҙар, - тине баяғы һары сәслеһе.

Уҫалыраҡ ҡыланғаны өсөн үкенә биребераҡ ҡуйҙы Камила, йәһәтләп һүҙҙе икенсегә борорға тырышты.

- Үҙең нимәлә ҡатнашаһың, ҡустым?

- Йүгерәм!

Камила йылмаймай булдыра алманы.

- Бигерәк бәләкәс күренәһең бит, йүгереүсегә оҡшамағанһың!..

- Исхаҡтың аяҡтары йүгергәндә оҙоная. Иртәгә үҙегеҙ күрерһегеҙ, апай! - тине икенсеһе көр тауыш менән.

- Киттек, тим, бит! - Исхаҡ тигәндәре ситкә атланы. Үҙе шикләнгән һымаҡ шишмә "хужабикә"һенә ҡарап-ҡарап алды. Камила малайҙарҙы ҡарашы менән оҙатып ҡалды. Үҙен эстән әрләп ҡуйҙы. Ҡатыраҡ бәрелде бәләкәс ҡунаҡтарға. Улай уҡ ярамаҫ ине...

Иртәгәһен оҙон буйлы малайҙар араһында баҫҡан Исхаҡты шундуҡ таныны. Бына стартҡа торҙолар... Аһ, ысынлап та бик йылғыр малай булып сыҡты ла баһа! Аяҡтарына күҙ ҙә эйәрмәй. Беренсе булып килде. Афарин! Синыфташтары менән баҫып торған Камила түҙмәне.

- Минең танышым. Әйҙә, барып ҡотлайыҡ балаҡайҙы, исмаһам, күңеле булыр!

Бына Ғәзинур йүгерек малайҙың ҡулын ҡыҫты.

- Уңыш үҙеңдең ҡулыңда! Үҙеңә ышан. Бына шулай бер ҡасан да бирешмә, ҡустым!

- Мин бирешмәйәсәкмен, - тине малай үтә лә етди ҡарап, шунан Камилаға төбәлде. - Апай, һеҙ беҙгә ҡасан ҡунаҡҡа килерһегеҙ икән? Беҙҙә лә матур ерҙәр бар! Шишмәләр күп!

- Ҡасан да булһа, килермен.

Китә биргәс, Ғәзинур ғәжәпләнә биребераҡ һораны.

- Ә нишләп шишмәләр?

Камила күҙ ҡарыйы менән ҡарап алды.

- Быныһы инде сер. Һин уны бер ҡасан да белмәйәсәкһең.

- Аңламайым. Кем ул, туғаныңмы?

- Эйе.

Шулай тиеүе булды, арттан ҡунаҡ малай ҡыуып етте.

- Апай, һин директор ҡыҙымы?

- Һис бер нәмә лә аңламайым, - тип ҡабатланы Ғәзинур.

- Апай, һин ерҙе яратаһың, тәбиғәтте, ибет!

- Мин спортсмен малайҙарҙы ла яратам. Ҡасан да булһа күрешербеҙ. Хуш бул, энекәш!

Ошоға оҡшаш ҡыҙыҡ ҡына осрашыуҙар булып ҡуя торғайны. Улар мәктәп йылдарының яҡты хәтирәһе булып иҫтә тороп ҡалған...

* * *

Һуңғы ҡыңғырау мәле лә яҡынлашты. Ул йылдарҙа ауылды йәштәр менән нығытыу тураһында һүҙ шәбәйгәйне. Өҫтән төшөрөлгән сәйәси кампания инде. "Бөтә синыф менән-ауылға!" - был саҡырыу һәр гәзит битендә урын алды. Мәктәп стендында ла ҙур яҙыу эленеп торҙо.

"Бөтә синыф менән..." Ихлас күңелле Ғәзинур был һүҙҙәрҙе байраҡ итеп күтәрҙе.

- Юғары уҡыу йортон тамамлағас, ауылға ҡайтабыҙ. Беҙ уны алдынғы хужалыҡҡа әйләндерәсәкбеҙ!

Камила үҙенең Өфөлә йәшәйәсәгенә шикләнмәй ине. Әсәһенең баш ҡала тураһында йыш һөйләүе шундайыраҡ уйҙарға этәргәндер, бәлки. Шуға ла Ғәзинур әйткәнгә ҡаршы килде.

- Күңел ҡайҙа тарта, кеше шунда булырға тейеш.

- Үҙеңде һынамай, эшләп ҡарамай тороп, быны белеп булмай. Кешене тыуған ер һәр саҡ үҙенә тарта. Намыҫың алдында һүҙ бирергә кәрәк, шул ғына.

Камила ышанмаған һымаҡ булғас, өҫтәне:

- Ҡайһы берәүҙәргә үҙ һүҙҙәренә тоғролоҡ етмәй. Беҙ ошо ерҙе күтәрәсәкбеҙ! Һин һәм мин.

Дәртләнеп, үҙенә ышанып һөйләгән Ғәзинурға нисек шикләнеп ҡарарға була, ти? Ул, ысынлап та, бер эштән дә ҡурҡмай. Бына ошондай намыҫлы, сая егеттең фәҡәт уны яратыуы ниндәй ғорурлыҡ! Ысынын ғына әйткәндә, киләсәктә кем булырын, маҡсатын асыҡ белгән кеше менән бер ҡайҙа ла уға ауыр булмаясаҡ.

Ғәзинур синыфташтары алдында ла бик тулҡынландырғыс телмәр тотто. Уға сығыш яһарға ҡушылған да булғандыр, кем белә инде хәҙер... Ғәзинурҙың был хаҡта әйткәне булманы, һүҙҙәре ысын йөрәктән сыҡһа ла ғәжәпләнергә түгел...

- Беҙ "Бөтә синыф менән - ауылға!" тигән инициативаны бер тауыштан яҡлайбыҙ. Ҡайһы берҙәребеҙ юғары уҡыу йортона инер, төрлө ҡалаларға юлланыр, ләкин барыбыҙ ҙа ауылға ҡайтасаҡбыҙ. Уны иң алдынғы хужалыҡҡа әйләндереү - мөҡәддәс бурысыбыҙ. Бында ҡалыусылар, һеҙҙең иңгә ауыр йөк һалына. Ауылда хеҙмәт еңел түгел, шулай ҙа һынатмаҫһығыҙ. Ышанығыҙ, беҙ ҙә кәрәкле белгестәр булып, тыуған яҡҡа ҡайтасаҡбыҙ! Иш янына ҡуш булырбыҙ...

Ғәзинурҙың бүтәндәрҙе әүрәтә белеү һәләте бар ине шул. Инициативаға ҡаршы сығыусы булманы. Хатта кемдер: "Буласаҡ колхоз рәйесен биш йыл көтәһе бар икән. Оҙағыраҡ булып китә бит", - тигәс, дәррәү көлөштөләр. Ул саҡта синыфташтарының һәр береһе үҙен бик кәрәкле кеше тип уйланы, һәр береһе үҙен яуаплы эш көткәненә шикләнмәне. Йәшлек матурлығы, тәүәккәллеге шулай булалыр. Бер үк ваҡытта - уның бер ҡатлылығы, хыялыйлығы ла...

Шул саҡта уҡ әле Камила менән Ғәзинур юғары уҡыу йортон тамамламаҫ борон уҡ өйләнешер тип уйлағандар булды, сөнки бүтәндәрҙең яҙмышы әле бигүк билдәле түгел, был икәүҙеке - асыҡ. Хәйер, уларҙың дуҫлығы тураһында ата-әсәһе лә оҙаҡ ваҡыт белмәне. Ишеткәс, бик ғәжәп иттеләр (Камила ул саҡта университетта уҡый ине), атаәсәһе өсөн көтөлмәгән хәл булды. Әсәһе был дуҫлыҡҡа башта уҡ ҡаршы торҙо, ни өсөндөр ул ҡыҙын синыфташына кейәүгә биргеһе килмәне. Хәйер, былары һуңынан. Ә уға тиклем - уҡыуға инеүҙәр, сессиялар, бер курстан икенсеһенә күсеү... Синыфташтары йыл һайын туй көтә. Ә егет менән ҡыҙ был хаҡта уйлап та ҡараманы. Иң башта - юғары уҡыу йортон тамамлау. Камиланың география факультетына уҡырға инеүенә лә Ғәзинур йоғонто һаны. "Беҙ ергә, тәбиғәткә яҡын булырға тейешбеҙ". Егет үҙе ауыл хужалығы институтының агрономия факультетын һайланы. Йәштәр өсөн киләсәк ауыл тормошо менән бәйле булып күрәләнде.

Ә уға тиклем... Уға тиклем синыфташтары менән ҡырға сыҡтылар. Йырлап-бейеп, усаҡ янында таңға тиклем ултырҙылар. Хушлашыр мәл яҡынлашты... Урабыраҡ, Упҡынгүл яғынан ҡайтырға булдылар. Үҙенә яҡын килгән һәр затты йоторға әҙер күлдең уртаһында ап-аҡ томбойоҡтар үҫә. Камила уларға ҡарап һоҡланып торҙо. "Мин Дюймовочка булһам, шуларҙың өҫтөндә баҫып торор инем..." Әйтеп бөтөүе булды, Илфат күлгә төштө лә китте. "Батаһың бит!" "Ҡайһы берәүҙәргә хыялды ысынбарлыҡтан айырып өсөн батып алыу ҙа файҙалы, - тине тыныс тауыш менән Ғәзинур. - Ҡурҡма, ҡотҡарырбыҙ". Илфат шып йөҙә икән. Оҙаҡламай бер ҡосаҡ томбойоҡ менән килеп сыҡты. Бысранған, хәле бөткән, ә күҙҙәрендә әйтеп бөтөргөһөҙ ҡәнәғәтлек: "Бөгөн һин уларҙың уртаһында, Камила!" Камила ҡояштай балҡыны: "Рәхмәт! Рәхмәт! Тик шуны иҫеңдән берүк сығарма, ғүмер ҡиммәтерәк". "Батһам ни, минең өсөн илар кеше юҡ, - Илфат тағы ла йылмайҙы. - Был томбойоҡтар батырмаҫын белә инем. Һин үҙең дә томбойоҡ шикелле һең". Камила ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. "Сәскәләрҙең яртыһын үҙеңә кире бүләк итәйемме?" "Уларҙы үҙең теләгән кешегә генә бүләк итә алаһың", - шулай тине лә Илфат ситкә атланы. Камила уның артынан ҡарап тора бирҙе лә, Ғәзинурға табан бороолдо: "Беҙгә күл инәһе бүләк ебәргән!" "Уны күл инәһенә ҡалдыр. Кәрәк икән, мин һиңә икенселәрен алып сығам". Камила ҡапыл тотлоҡто: "Беләм..." "Камила, мин беренсе булып төшөргә өлгөрмәнем..." Ҡыҙ ҡулындағы сәскәләрен әйләндерҙе-болғаны: "Күл инәһе сәскәләрен күлгә ҡалдырам. Уларҙы миңә бер кем дә сығарып бирмәне. Уны мин берәүҙән дә һорамаҡыным". Ғәзинур ҡыҙҙың ҡулынан тотоп алды: "Юҡ! Мине... Мине ғәфү ит". Камила йылмайҙы ла сәскәләрҙе күлгә ырғытты. "Әйҙә, синыфташтарҙан ҡалмайыҡ! Хәҙер күҙҙән юғалалар бит", "Һин Дюймовочка булмайһыңмы ни?" "Мин - көйөнтә аҫҡан Зөһрә ҡыҙ. Хәтерләйһеңме шишмә башын?" "Тағы ла биш йылдан шул шишмә башына бөтөнләйгә әйләнеп ҡайтасаҡбыҙ, Камила!"

- Беҙҙә кемдәр иң беренсе булып ғаилә ҡорор икән? - тип һораны бер мәл Илфат. Үҙе өҫтәне. - Беренселәр билдәле. Ә бына аҙаҡҡылары кем булыр?

Илфат Ҡаҙанда уҡып йөрөһә лә һәр байрам һайын тиерлек Өфөгә килә лә етә. Ҡайҙан аҡса еткергәндер... Ғәзинур менән ныҡ дуҫ инеләр шул. Килгән һайын Камиланы күрмәй китмәй. Ҡаҙанға күп мәртәбәләр саҡырҙы. Хатта уҡығандан саҡтары ла булды. Юҡ, Камилаға синыфташы уҡыған ҡалаға бер тапҡыр ҙа барырға тура килмәне. Күрәһең, әллә ни теләге лә булмағандыр...

(Дауамы. Башы 27-се һанда).

✓ *Мөгөҙлө үгеҙҙең баш һөйәген тәбиғәт беҙгә үҙе бүләк итте: яҙғы ташҡын йыуып төшөргән йылға ярынан был ғәжәп табышты Ҡыйғы районы Сирбай ауылынан үҫмерҙәр Илдан менән Фидан Хизбуллиндар табып алған.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАҠСАТЛЫ КЕШЕ...

## сәләмәт була

■ Статистика буйынса, үҫешкән илдәрҙә ғүмер оҙайлығы арта. New Scientist ошо темаға үткәрелгән тағы бер тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһен баҫтырып сығарған: сентябрҙән алып ноябргә тиклем тыуған балалар үҙҙәренең тиҫтерҙәренә ҡарағанда тағы ла оҙағыраҡ йәшәйәсәк. Чикаго университеты ғалимдары Наталья һәм Леонид Гавриловтар 1980 һәм 1995 йылдар арауығында тыуған 1500 кеше тураһында мәғлүмәттәр йыйған. Ғалимдар нәҫел, ауырыуҙар, тирә-яҡ мөхит, туғандарының ғүмер оҙайлығы, социаль-иҡтисади хәл факторҙарын иҫәпкә алғандан һуң, көҙөн тыуғандар тиҫтерҙәренә һәм туғандарына ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй, тигән һығымтаға килгән. Был феноменды аңлатып, ғалимдар был айырмалыҡтарҙың миҙгел инфекциялары менән бәйле булыу ихтималлығы тураһында белдергән. Билдәле булыуынса, "йәйге" инфекциялар яңы тыуған баланың һаулығына ярайһы уҡ зыян килтерә, бының эҙемтәһе артабан да үҙен белдереп торасаҡ. Шулай уҡ бында ҡыш, яҙ һәм йәй тыуған сабыйҙарҙың әсәләренең миҙгелгә ярашлы витамин дефициты һәм гормон кимәле үҙгәреп тороуы ла "гәйепле" булыуы бар.

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк була. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

■ Кливленд клиникаһы (АҠШ) тикшеренеүселәре кеше организмында артерияларҙа төйөрсәләр барлыҡҡа килеү менән көрәшеүсе һәм атеросклероздың үҫешен туҡтатыусы молекулаларҙы асыҡлаған. Атеросклероз липид әйләнеше боҙолоуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, был сир ваҡытында артерияларҙың эске стеналарына холестерин төйөрсәләре ултыра. Был йөрәк, мейе һәм башҡа ағзаларҙың ҡан тамырҙары сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай, инфаркт һәм инсульт та ошо сәбәпле барлыҡҡа килә. Америка ғалимдары кеше организмында липид әйләнешен яйға һалыусы Akt3 тип йөрөтөлгән молекулаларҙы асыҡлай һәм был асыш һөҙөмтәһендә атеросклерозды иҫкәртеүсе яңы препараттар уйлап табыласаҡ.

■ Мәскәүҙең мәктәп уҡыусылары туҡланыуы буйынса йәмәғәт советы ата-әсәләргә балаларына роллы һәм суши ашатыуҙан тыйылырға кәңәш итә. Был турала ойошманың рәйестәше Валентина Иванова белдергән. Уның фекеренсә, был ризыҡтарҙы 21 йәштән һуң ғына ашай башларға ярай. Япон кухняһы өсөн сеймал сит илдән килтерелә һәм был уның сифатында сағыла, һөҙөмтәлә, ағыуланыу осраҡтары йыш була. Бөтөн Рәсәй ғилми-тикшеренеү институты директоры Владимир Харитонов үҙ сиратында Рәсәй мәктәптәрендә белем алыусыларҙы бушлай йәки ҙур булмаған хаҡҡа һөт менән тәьмин итеү кәрәклеген белдергән. Яҡынса 40 илдә, шул иҫәптән, Таиланд һәм Чилиҙа балаларға мәктәптә бушлай бер стакан һөт бирәләр. Уның фекеренсә, һөт аҙыҡтарына ҡытлыҡ кисермәүсе Рәсәй уҡыусыларҙы был файҙалы ризыҡ менән тәьмин итергә бурыслы.

XXI БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# ШҮЛГӘНТАШТА ТАҒЫ БЕР МӨҒЖИЗӘ -

## күрергә һәм аптырарға ашыҡ!

(Башы 1-се биттә).

### Ҡая сәнғәте күсермәһе



"Шүлгәнташ" мәмерйәһе үҙебеҙҙең илдә генә түгел, ә тотош Көнбайыш Европалағы палеолитик сәнғәттең берҙән-бер боронғо галереяһы. Элек мәмерйәгә теләгән бер кеше инә алды, ләкин был ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мәҙәни мираҫ объекттары исемлегенә тәҡдим ителгән ошо тәбиғәт ҡомартҡыһының микроклиматына бик ныҡ зыян килтерә ине. Хәҙер мәмерйә ғалимдарҙың махсус тикшеренеү урыны булып тора, ә уның аныҡ күсермәләре алынған шедеврҙары менән музей комплексында танышырға була. Мәмерйәнең диуарына боронғо һүрәттәр төшөрөлгән төпкө залдары туристар өсөн 2018 йылда уҡ ябылғайны. Ошо һүрәттәрҙең репродукциялары йыйынтығы музейҙың төп экспонатын тәшкил итә лә инде. Махсус заказ буйынса уны француз ғалимдары Монтиньяктағы Arc&Os ательеһында эшләне. "Һис һүҙһеҙ, мәмерйәләге боронғо һүрәттәрҙең теүәл күсермәһе - музейҙың төп һәм иң ҡыҙыҡлы экспонаттары. Уны француз рәссамдары башҡарҙы. Дөрөҫөн әйткәндә, "Шүлгәнташ" музейы асылғанға тиклем туристарға ошо боронғо сәнғәт өлгөләрен 1961 йылдан алып ҡарай алыу мөмкинлеге юҡ ине. Хәҙер уны һәр кем тамаша ҡыла ала", - тип һөйләне музейҙың директор урынбаҫары Николай Григорьев.

Факсимиле өсөн боронғо рәссамдарҙың иң сағыу һүрәттәре коллекцияһы һайлап алынған. Мәҫәлән, экспозицияла төп урынды Хаос залынан "Аттар һәм тамғалар" панноһының, Һүрәттәр залынан "Көнсығыш" һәм "Көнбайыш панно"һының теүәл күсермәләре төп урынды биләп тора. Һүрәттәр экспозиция яҫылығына беркетеп кенә ҡуйылмаған, ә үҙенсәлекле һүрәт рәүешендә яңыса асылға. Экспозиция өҫтөндә көс түккән ижади төркөм "Көнсығыш панно"ны хәрәкәтләнеүсе видеоэкранға әүерелдергән. 3D-mapping ысулы ҡулланып, ысынбарлыҡтағы буяуҙарҙың тотош бер донъяһы тыуҙырылған. Климат алмашыныуын, тәбиғәт менән кеше йоғонтоһон кисергән һәм ваҡыт үтеү менән тоноҡланған боронғо һүрәттәргә күҙ алдында төҫ кереп, улар ҡасандыр төшөргән осорҙағыса ҡабул ителә башлай. Ләкин факсимиле - ул иң беренсе сиратта ни бары һүрәт кенә. Тәүҙә контраст көсәйтелә һәм бер-бер артлы бөтөн һүрәттәр ҙә яҡтыртыла. Диуар яҫылығы айырым күрһәтелә, унан - таштың үҙенең күләгәһе төшөрөлә, шунлыҡтан боронғо рәссамдың таш полотноһы күләмле булып күренә башлай. Экспозицияны тыуҙырыусылар виртуаль ысынбарлыҡҡа усаҡ яҡтыһы менән күләгә лә өҫтәгән. Факел уты яҡтыһында сағылыусы һөңгө тотҡан боронғо кешенең тамашасы алдынан үтеп китеүе лә кешене хисләндермәйенсә ҡалмай. "Көнбайыш панноһы" ла ошондай уҡ ут яҡтыһы менән яҡтыртылған. "РФ макеты" йәмғиәтенең баш архитекторы Таһир Фәхрисламов әйтеүенсә, яҡтыртыу оҫталығын береү музейҙы эшләүселәр өсөн ҡатмарлы һәм ижади бурыстарҙың береһе була. "Яҡтылыҡты береү мәсьәләһе менән оҙаҡ эшләргә, күп тапҡырҙар ҡайта-ҡайта яңынан башларға тура килде. Иң мөһиме - сама белергә, көндөҙгө кеүек яҡтылыҡ биреүҙән һаҡ булырға кәрәк ине. Ярым ҡараңғылыҡ һәм күләгә күләмлелек тойғоһо тыуҙыра һәм үҙендә мәмерйә эсендә йөрөгәндәй хис итәһең. Ә яҡтылыҡ көслө булһа, яһалмалыҡ һиҙелә, серлелек юғала. "Ҡая сәнғәте" залындағы иң сағыу урын - дөйә менән "Ат һәм тамғалар" панноһы асыҡ һүрәттәре менән айырылып тора. Бында төп мәсьәлә - шулай уҡ яҡтылыҡ биреү ине. Был экспозиция ҡунаҡтарҙы залға ингән ерҙә ҡаршы ала һәм һоҡланғыс күренеш тыуҙыра.

- Археологияға бағышланған экспозиция бүлегендә беҙ Тамғалар залы участкаһын бик ентекле итеп төҙөнөк, унда 1980 йылдарҙа Вячеслав Щелинский етәкселегендәге Ленинград археологтары ҡаҙыныу эштәре алып барҙы, - тип һөйләй Николай Григорьев. - Был эштә беҙгә Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Палеосәнғәт үҙәге хеҙмәткәрҙәре бик ҙур ярҙам күрһәтте. Улар беҙгә шул йылдарҙағы махсус һыҙмалар һәм фотографияларҙы бирҙе. Ҡаҙылма янында яңы үҫеш баҫҡысына бағышланыусы йола башҡарыусы боронғо кешеләр манекендарының диорамаһы урын алған. Манекендарҙың кейемдәре иләнмәгән сей тиренән төньяҡ боландары тарамышы менән тегелгән һәм карлик ҡайын йә тал тәтәнендә ыҫланған. Бындай кейемдәрҙе Ямал-ненец автономлы округында йәшәүсе Нелля Мотышева теккән...

> ***Данир ӘХМӘҘИЕВ, Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры:*** *"Шүлгәнташ" музейын төҙөү Рәсәй өсөн уникаль тәжрибә булды. Сөнки быға оҡшаш музейҙар Көнбайыш Европала ғына бар. Әммә улар барыһы ла фәҡәт бер объектҡа, йәғни бер мәмерйәгә бағышланған. Беҙҙең музейҙың үҙенсәлеге - уның киң яҡлы булыуында. Ижади команда Ерҙә тормоштоң ҡасан яралыуынан алып, Шүлгәнташта сәнғәт әҫәрҙәрен ҡалдырған рәссамдарҙың Уралға ҡайҙан килеүенә хәтле төрлө һорауҙарға яуап бирергә тырышты. Башҡортостанды бөтә донъяға танытҡан Шүлгәнташ рәссамдары кем булған? Уларҙың сәнғәте беҙгә нимә тураһында һөйләй? Экспозицияла сәнғәт бишеге - мәмерйә һәм ундағы һүрәттәр, палеолит дәүеренә тиклем кешелек тарихы һәм йәшәйеше, шулай уҡ мәҙәни ҡомартҡыбыҙҙы өйрәнеүселәр тураһында тулы мәғлүмәт алырға мөмкин".*

### Хайуандарҙың баш һөйәге һәм башҡа һөйәктәре

Экспозицияла шулай уҡ боҙлоҡ осорондағы ҡаҙылма хайуандар: носорог, мамонт, бизондарҙың баш һәм башҡа һөйәктәре бар, тигәйнек инде. Уларҙың йәше - 10 мең йыл. Был экспонаттарҙы хатта тотоп ҡарарға ла мөмкин. Киләсәктә был хайуандарҙың тулы һөлдәһе йыйылып, түшәмгә элеп ҡуйыласаҡ. "Мөгөҙлө үгеҙҙең баш һөйәген тәбиғәт беҙгә үҙе бүләк итте: яҙғы ташҡын йыуып төшөргән йылға ярынан был ғәжәп табышты Ҡыйғы районы Сирбай ауылынан ағалы-ҡустылы үҫмерҙәр Илдан менән Фидан Хизбуллиндар табып алған. Ул хаҡта беҙгә дуҫыбыҙ Рафиҡ Хафизов хәбәр итте. Уның саҡырыуы буйынса беҙ артефакттарҙы ҡарарға барҙыҡ", - ти Данир Ғәйнуллин. Уның билдәләүенсә, табылған баш һөйәге палеолит осорона ҡарай.

Тағы бер тәүтормош үгеҙе - мөгөҙлө турҙың баш һөйәген музейға Ейәнсурала тыуып үҫкән Өфө эшҡыуары Фаил Усманов бүләк итә. "Йылғала бындай табыштар күп булыуы ихтимал, сөнки йыл һайын һыу яткыльгы рельефын үҙгәртеп тора һәм күмелеп ятҡан һөйәктәрҙе ярға сығарып ташлай. Әлеге мөгөҙлө баш һөйәге яҡшы һаҡланған. Уны табып алғас та артабан яр-

✓ *"Шүлгәнташ" мәмерйәһенең микромөхитендә тиҫтәләрсә мең йылдар буйына уның үҙенә генә хас микроклиматы һаҡлана, һәм ул ситтән килеп инеүсе бактерияларға бик һиҙгер.*





сыҡланып ыуалмаһын өсөн һыуҙа иҙелгән ПВА елеме менән ҡапланыҡ", - тип һөйләй Фаил Усманов. Тарихҡа тиклемге был экспонаттың оҙонлоғо метр ярым тәшкил итә. Тур, йәки европа ҡырағай үгеҙе мундаһы 170-180 сантиметрғаса еткән ҡеүәтле хайуан. Ҙурлығы яғынан ул зубрға тиңләшә. Өлкән үгеҙҙәрҙең ауырлығы 700-800 килограмм самаһы тартҡан. Борон замандарҙа улар бөтөн Европа биләмәләрендә, Төньяҡ Америкала, Төньяҡ Африкала, Кесе Азияла осраған. Уның тышҡы күренеше һөлдәләр нигеҙендә генә түгел, беҙгә тиклем килеп еткән һүрәттәр, мәмерйә диуарында һынландырылған фигуралар ярҙамында төҙөлгән.

Музейҙа мәмерйәне өйрәнеү тарихына ла ҙур урын бүленгән. Уның диуарҙарындағы боронғо һүрәттәрҙе тәүләп асыусы Александр Рюминдың биографияһы һәм тормошонан ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирелгән. Бында уның фәнни эшмәкәрлеге, сәйәхәттәре, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында күрһәткән батырлыҡтары хаҡында һөйләнә. Музейға килеүселәр Александр Рюминдың мәмерйәләге эше хаҡында әңгәмәһен тыңлай ала. Музейҙа БДУ-ның карст-спелеология экспедицияһы 60-сы йылдар башында башҡарған эштәре хаҡында һирәк кадрҙар күрһәтелә, видеотаҫмалар оҙаҡ ваҡыттар спелеолог Юрий Соколовтың шәхси архивында һаҡланған.

## Музей макеты

Бында мәмерйә һүрәттәренең төп нөсхәһе залына инеүҙең сикләнеү сәбәптәре уйын рәүешендә аңлатыла. Музейҙың экспозиция залының аулаҡ бер мөйөшөндә бәләкәй генә кешеләр - вандалдар менән һәпрәләр урын алған. Мәмерйә макеты - уларҙың өйө. Мәмерйәнең арҡыры киҫелеше 1960 йылда уҡ әле А.В. Рюминдың схемалы һүрәте нигеҙендә эшләнгән. Был тыңлауһыҙ бәләкәй кешеләр менән идара итеп, музейға килеүсе бәләкәй балалар мәмерйәнең микроклиматын һаҡларға ярҙам итә ала. Өфө дизайнеры Тимур Сабитов етәкселегендәге ижади коллектив был уйындар мәмерйәнең микроклиматына ғына түгел, бынан 16-20 мең йыллап элек эшләп ҡалдырылған боронғо һүрәттәр сифатына ла тәьҫир итеүен күрһәтә. "Был уйын ни өсөн мәмерйә эсендә һаҡ булырға, унда аҙыҡ-түлек йәки башҡа әйберҙәр ҡалдырмаҫҡа кәрәклеген иҫкәртә. Беҙ был уйында мәмерйәгә вандалдар индереп, уларҙың тәбиғи ҡомартҡы диуарҙарында автографтарын һәм граффити ҡалдырыуҙарының нисек итеп боронғо сәнғәт өлгөләрен зарарлауы, юҡҡа сығарыуы ихтималлығын да күрһәтәбеҙ. Ә һәпрәне индерһәң, мәмерйәлә бысраҡ һәм зарарлы бактериялар тороп ҡалыуы, артабан үрсеп китеүе бар. Ә бит "Шүлгәнташ" мәмерйәһенең микромөхитендә тиҫтәләрсә мең йылдар буйына уның үҙенә генә хас микроклиматы һаҡлана, һәм ул ситтән килеп инеүсе бактерияларға бик һиҙгер. Башҡортостанда, үкенескә, бындай күңелһеҙ "тәжрибә" билдәле инде: матур һәм байтаҡ араға һуҙылған мәмерйәләренең береһе туристарҙың туҡтауһыҙ ағымынан һуң бактериялар һәм үңәҙ (күгәреү, бәшмәкләү) ҡотороп үрсей башлаған. Мәмерйәнең ябыҡ система икәнлеген, унда килеп эләккән ят микроорганизмдар һәм бысраҡтың мәмерйәне эстән ашай башлаясағын һәм ундағы һүрәттәргә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтерәсәген онtorорға ярамай",- тип һөйләй Тимур Сабитов.

*__Эудаль ГИЙАМЕТ, ҡаяға һәм стенаға төшөрөлгән һынлы сәнғәт эксперты һәм реставраторы:__*
*Шүлгәнташ Альтамира, Ласко, Фон-де-Гомм, Эль-Кастильо, Шове һәм Руффиньяк менән бергә донъяның иң әһәмиәтле мәмерйәләре исемлегенә инә. Быны ҡаяға төшөрөлгән һынлы сәнғәт белгестәренең бөтә донъя берләшмәһе лә таный. Шул уҡ ваҡытта Шүлгәнташ мәмерйәһе - берҙән-бер һәм ҡабатланмаҫ ҡомартҡы, сөнки башҡа ошондай объекттарҙан дүрт мең саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Шулай уҡ ул нәк ошонда дөйә-бактриан һүрәтенең һаҡланыуы менән дә ифрат үҙенсәлекле. Палеолит сәнғәтендә улар башҡа бер ерҙә лә юҡ.*

## "Урал батыр" эпосы буйынса фильм

Әлбиттә, экспозицияла башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"ға ҙур иғтибар бирелгән. "Муха" студияһы мультипликаторҙары эпостың ҡыҫҡаса йөкмәткеһен асып биреүсе сағыу анимацион фильм төшөргән. Музейҙың иң күренеп торған урынындағы ҙур дисплейҙа ошо фильм бара. Музейҙың был өлөшөнә инеү бушлай. Маҡсат - музейға килеүсе мөмкин тиклем күберәк кешене эпос сюжеты менән ҡыҙыҡһындырыу һәм шулай итеп уларҙы киләсәктә был фольклор гәүһәре менән танышыуға этәреү.

## Эпостың ҡомартҡы баҫмаһы

"Шүлгәнташ" музей комплексына бик һирәк осрай торған экспонат - "Батырҙар тураһында эпос" китабы бүләк ителде. Был ошо китап авторы, фольклорсы Мөхәмәтша Буранғолов репрессияға эләккәс, тиражы 1940 йылдарҙа тулыһынса юҡ ителгән "Батырҙар тураһында эпос"тың баҫмаһы. Ул ваҡыттарҙа тәүләп баҫылған китаптың ниндәйҙер мөғжизә менән тик бер нисә генә данаһы һаҡланып ҡалған. Әле музейға килеп эләккән экспонат корректура өсөн баҫылған була һәм мөхәррир ҡулында тороп ҡала. Төп тиражы юҡ ителгәндән һуң мөхәррирләү өсөн баҫылған материал ҡаты тышлыҡ менән көпләнә. "Был бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә китап. Радищевтың "Сәйәхәте" һымаҡ, донъяла бер нисә генә дана ҡалды ул. Шуларҙың береһе һинеке буласаҡ. Яҡшы һаҡла уны", - тигән яҙыу ҡалдыра баҫманың тәүге хужаһы, яҙыусы Ғәйнан Әмири уны үҙенең дуҫы һәм хеҙмәттәше Йыһат Солтановҡа бүләк итеп.

Экспозицияның иң аҙағында теләге бар һәр кем музейҙа булып китеүе хаҡында фекерен яҙып ҡалдыра ала һәм ул шунда уҡ фекерҙәр һәм тәҡдимдәрҙең электрон китабына эләгә. Унда билдәле тикшеренеүселәрҙең фекерҙәре байтаҡ тупланып өлгөргән. Бына шуларҙың береһе. "Шүлгәнташ" музей комплексының экспозицияһы заманса ысулдар ҡулланып башҡарылһа ла, ул күп мең йыллыҡтар тарихы хаҡында һөйләй. Һәм бында һеҙ бөтөн булған һиҙеү-тойоу ағзаларын ғына түгел, әгәр лабораторияға индерә ҡалһалар, еҫ һиҙеү һәләтен дә "эшкә ҡуша" алаһығыҙ. Бында традициялар һәм суперзаман технологиялары уңышлы берләштерелгән. 26-17 мең йыллыҡтар элекке - "Шүлгәнташ" мәмерйәһендә һүрәттәр барлыҡҡа килгән осорҙағы - ваҡиғалар менән танышыу иҫ киткес тәьҫораттар ҡалдыра. Бында кешенең глобаль донъяла ниндәй өлөштө тәшкил итеүен һәм беҙгә тиклем нимәләр булыуын аңларға ярҙам итеү маҡсатында бөтәһен дә эшләгәндәр", - ти "Царское село" музей-ҡурсаулығының баш архитекторы, Рәсәй ИКОМОС Милли комитеты Советы ағзаһы Мария Рядова.

"Шүлгәнташ" музей комплексы әле эшләй генә башланы. Уның күргәҙмә материалдары даими үҫә һәм тулылана барасаҡ. Фонд эшмәкәрлеге яйға һалынасаҡ. Мәҫәлән, бөгөн археология табыштарының витриналарҙа ятҡан күсермәләрен ваҡыты менән төп нөсхәләр алыштырасаҡ.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**
**Айгөл ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Үҙ-үҙеңде ғәйепләмә

Ғәйеп тойғоһо ла ауырыу сәбәбе булыуы ихтимал. Бынан тыш, стрестар, күңел төшөү, ҡурҡыу һәм яңғыҙлыҡ та ауырыу сәбәптәре булып тора. Эйе, һеҙ үҙ-үҙегеҙгә ауырыу саҡыраһығыҙ, ләкин аң көсөн белмәү арҡаһында ҡорбан булыуығыҙ өсөн үҙегеҙҙе ғәйепле тойорға тейеш түгелһегеҙ.

Ауырыу сәбәбе йәки һауығыуға кәртә булыусы башҡа тороштар ҙа бар: күңел төшөнкөлөгө, түбән үҙбаһа, хис-тойғоларҙы йүгәнләп тотоу. Теләһә ниндәй тормош проблемаһы йәшәү ихтыярын һындырырға мөмкин. Ундай проблемаларҙың күбеһе һеҙҙең үҙгәрештәргә әҙер булыуығыҙға бәйле түгел. Мәҫәлән: тәбиғәт бәлә-ҡазалары һәм бәхетһеҙлек осраҡтары; айырым территорияларға хас көслө хөрәфәт һәм расизм; сәйәси тотороҡһоҙлоҡ, революциялар һәм баш күтәреүҙәр.

Махсус рәүештә иҡтисади түбән тәгәрәүҙәр, инфляция, эпидемиялар һәм пандемиялар тураһында иҫкә алмайым. Хатта бындай катаклизмдарҙан һуң да кемдер тере ҡала - тап шул "кемдер" һеҙ булыуығыҙ ихтимал.

Бында һуңғы һүҙҙе аң торошо әйтә. Ул белем йәки интеллект коэффициентына бәйле түгел. Барыһы ла, беренсенән, ынтылыштан, өмөттән һәм ышаныстан, икенсенән, үҙең менән намыҫлы эшләүҙән: көсөргәнештән арыныуҙан һәм ыңғай визуалләштереүҙән тора.

Һеҙҙең уйҙарығыҙ теләһә ниндәй урындағы, милли һәм донъяуи проблеманы хәл итеүгә үҙ өлөшөн индерә ала, әммә уны бер үҙе генә хәл итә алмай. Был турала шуға иҫкә алабыҙ: бындай өлөштө донъяуи, гармония һәм барлыҡ халыҡтарҙың именлеге хаҡына индерергә кәрәк. Беҙ нимә бирәбеҙ, шуны алабыҙ. Был юлдар аң ярҙамында үҙ тәненә һәм хатта ниндәй алыҫлыҡта булыуына ҡарамаҫтан, башҡа кешеләрҙең тәненә тәьҫир итеү һәләтенә бағышлана.

Әгәр ҡаҙаныштарығыҙҙан ҡәнәғәтлек алырға һаулығығыҙ һәм көсөгөҙ етмәһә, тормош проблемаларын хәл итеү ниндәй файҙа килтерер? Әммә һеҙ аң көсөн тәнегеҙҙәге һүлпән ағзаларға ебәреп, уларҙың энергияһын күтәрә, яраларҙы уңалта, насар ғәҙәттәрҙән арындыра, фигурағыҙҙы камиллаштыра, ауырыуҙарға ҡаршы тороуҙы күтәрә, һеҙҙе дауалаусы табипҡа ярҙам итә, ҡыҫҡаһы, организмығыҙҙы йәшәртә алаһығыҙ.

Беренсе аҙым ниндәй булыуы тураһында аңлағанһығыҙҙыр инде. Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ. Ә хәҙер артабан нимә эшләргә кәрәклеге хаҡында һөйләшәйек.

## Аң һәм тән бәйләнеше

Быға тиклем күҙәнәктәрҙең эшмәкәрлеген микроскоп аша күҙәткән һәм уларҙың уйҙағы бойороҡтарға яуап биргәнен күҙәткән Клив Бакстерҙың эше тураһында иҫкә төшөргәйнек. Тән күҙәнәктәре беҙҙең кәйефте белә. Уйҙар һәм хис-тойғолар күҙәнәктәр үҫкән, үлгән һәм тергеҙелгән климатты билдәләй. Ыңғай климат уларға һәм бөтөн тәнгә ныҡлы һаулыҡ килтерә, ә насары ауырыуҙарға, медиктар теле менән әйткәндә, эшкә һәләтһеҙлеккә килтерә.

16 йәшлек Шарлотта йөрәк өйәнәге үткәргән атаһы өсөн бик борсола. Һәр секунд ул телефон шылтырар ҙа, дауахананан насар хәбәр әйтерҙәр тип көтә. Бер нисә көн эсендә ул ике ҡолаҡҡа ла һаңғыраулана. Атаһы вафат була, ә Шарлотта был тетрәнеүҙән арынғандан һуң да һаңғырау булып ҡала. Бер нисә аҙнанан һуң әсәһе уны табипҡа алып бара. Гипноз трансына төшөп, Шарлотта табиптың: "Мине ишетәһеңме?" - тип һорағанын ишетә һәм: "Эйе", - тип яуап бирә. Табип уға һаңғыраулығының икенсе көнгә төш мәлендә үтәсәген әйтә. Икенсе көн тап табип әйткән ваҡытта Шарлотта алыҫ булмаған фабриканың гудогын ишетә.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**18 ИЮЛЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00 Профилактика на канале с 05:00 до 13:00.
14.00, 17.00, 20.00 Вести.
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Кто против? [12+]
17.30 "60 минут". [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 XXXI Международный фестиваль "Славянский базар в Витебске".
1.40, 2.30 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
3.20 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Новости недели (на рус.яз).
14.45 Специальный репортаж. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Историко-культурный музейный комплекс "Шульган-таш". [12+]
17.30 История одного села. [12+]
17.45 "Орнамент". [12+]
18.00 Пофутболим? [12+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Колесо времени. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Елкән". [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Тайм-аут. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Невеста с заправки". [12+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]
4.00 Кустәнәс. [12+]
4.30 История одного села. [12+]
4.45 Честно говоря. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**19 ИЮЛЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Торжественная церемония закрытия XXXI Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
1.10, 2.00 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
2.55 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Берегите женщину". [6+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Этно-краса". [6+]
15.30 "КультУра". [6+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Д/ф "Земную жизнь пройдя до половины". [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Нык бул. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "Это моя профессия". [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Наследники". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]
3.45 Х/ф "Наследники". [16+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**20 ИЮЛЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Д/ф "Иван Зубков. Спаситель Ленинграда". [12+]
0.55, 1.50 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
2.40 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "МузКәрәҙ". [0+]
15.30 "Сулпылар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 Тайм-аут. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Любовь с первого вздоха". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]
3.45 Автограф. [12+]
4.15 Башкорттар. [6+]
4.45 Әлләсе... [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**21 ИЮЛЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Д/ф "Черное и белое торпедовца Стрельцова". [12+]
0.55, 1.50 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
2.40 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Это моя профессия". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Ап-асык. [12+]
19.30 Д/ф "Между сценой и медициной". [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Башкорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Средний род. Единственное число". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]
3.45 История одного села. [12+]
4.00 "Бай". [12+]
4.30 Колесо времени. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**22 ИЮЛЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Х/ф "Стрельцов". [6+]
23.20 Х/ф "Стиляги". [16+]
1.55 Х/ф "Дама пик". [16+]
4.05 Д/ф "Черное и белое торпедовца Стрельцова". [12+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Үткән гүмер. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Автограф. [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
19.45 Специальный репортаж. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Йома". [0+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 БашГост. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Зайцев, жги! История шоумена". [16+]
1.15 Спектакль "Кадриль". [12+]
2.45 Х/ф "Средний род. Единственное число". [16+]
4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**23 ИЮЛЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Чужая жизнь". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Кровная месть". [12+]
0.50 Х/ф "Подмена". [12+]
4.00 Х/ф "Что скрывает любовь". [16+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Это моя профессия". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [6+]
11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]
11.30 Нык бул. [6+]
12.00 Кустәнәс. [12+]
12.30 Бәхетнамә. [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 Д/ф "Назер". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 "В кругу друзей". [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Х/ф "Горький мед". [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "Дарман". [6+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Горячие новости". [16+]
1.00 Новости недели (на баш. яз).
1.45 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!.." [12+]
3.30 Х/ф "Горячие новости". [16+]
5.45 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**24 ИЮЛЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.35, 2.35 Х/ф "Летом я предпочитаю свадьбу". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Чужая жизнь". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Х/ф "Некрасивая Любовь". [16+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 М/с "Нурбостан". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.00 "Дорога к храму". [0+]
15.30 Историческая среда. [12+]
16.00 Бенефис Рамизы Мухаметшиной. [12+]
18.15 "Вековая связь поколений". 100 лет профсоюзам Республики Башкортостан. [12+]
19.00 "Кош юлы. Балалар". [6+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Әлләсе... [12+]
21.00 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Х/ф "Государыня и разбойник". [16+]
0.45 Спектакль "Дачники". [12+]
2.45 Историческая среда. [12+]
3.15 Моя планета Башкортостан. [12+]
3.45 Х/ф "Государыня и разбойник". [16+]
5.15 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (19) дүшәмбе | 3:35 | 5:05 | 13:30 | 18:57 | 21:38 | 23:08 |
| 19 (20) шишәмбе | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 18:57 | 21:37 | 23:07 |
| 20 (21) шаршамбы | 3:38 | 5:08 | 13:30 | 18:56 | 21:35 | 23:05 |
| 21 (22) кесе йома | 3:39 | 5:09 | 13:30 | 18:55 | 21:34 | 23:04 |
| 22 (23) йома | 3:41 | 5:11 | 13:30 | 18:54 | 21:32 | 23:02 |
| 23 (24) шәмбе | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 18:54 | 21:31 | 23:01 |
| 24 (25) йәкшәмбе | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 18:53 | 21:29 | 22:59 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✔ *Әбүғәлисина петрушканы бик юғары баһалаған. Ул былай тип яҙа: "Ҡара ҡан тамырҙары тығылыуын бөтөрә, тирләтә, һыҙланыуҙарҙы баҫа, яңы барлыҡҡа килгән шештәрҙе бөтөрә, ашҡаҙан һәм эсәктәр эшмәкәрлеген тиҙләтә".*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МЕТАЛЛУРГ КӨНӨНӘ АРНАП




БАССР-ҙың атҡаҙанған металлургы

Социалистик Хеҙмәт Геройы

Хеҙмәт Даны орденының тулы кавалеры

Социалистик Хеҙмәт Геройы

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**27-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡудаш. Алабута. Батман. Ғафури. Инша. Ышыҡ. Әхирәт. Утыҙ. Барҡылдаҡ. Ағыу. Азат. Лама. Хөрмәт. Ваҡ. Нуҡта. Нәби. Негр. Евро. Рейн. Ағас.

**Вертикаль буйынса:** Игебаев. Бишбармаҡ. Арыҫлан. Алым. Әхтәри. Айыу. Уҙаман. Аниме. Уҡа. Вена. Ноҡот. Ҡыяр. Шытым. Оҫта. Ғибәҙәтхана. Айран. Утар. Инспектор.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# ПЕТРУШКА

**Петрушка составында аҡһым, углевод, калий, натрий, кальций, магний, фосфор, тимер, А провитамины, В, В2, РР, Е, С витаминдары, күгәреү һәм әсеү процестарын тоҡтарлаусы бик күп фитонцидтар бар. Уны дөрөҫ ҡулланғанда барлыҡ ағзаларҙы ла тиерлек дауаларға мөмкин.**

Петрушка Грециянан таралған. Боронғо гректар уны изге үҫемлек тип иҫәпләгән һәм ашамаған, венок өсөн ҡулланған һәм аллаларына ҡорбан килтергәндә, ҡунаҡтарға, һөйгәндәре менән айырылғанда бүләк иткәндәр. Хатта мәйеттәргә лә петрушка тажы үреп оҙатҡандар. Ҡайғы килеүен сағылдырып та шундай венок кейгәндәр.

Әбүғәлисина петрушканы бик юғары баһалаған. Ул былай тип яҙа: "Ҡара ҡан тамырҙары тығылыуын бөтөрә, тирләтә, һыҙланыуҙарҙы баҫа, яңы барлыҡҡа килгән шештәрҙе бөтөрә, күкрәк ҡыҫһа һәм тын алыуы ауырлашһа, йүтәлдән ярҙам итә, бауыр һәм талаҡ өсөн файҙалы, ашҡаҙан һәм эсәктәр эшмәкәрлеген тиҙләтә, таштарҙы иретеп сығара, әммә быума ауырыуы (эпилепсия) булғанда ҡулланырға ярамай. Петрушка бәүел ҡыуа һәм күремде килтерә, йөклөләр өсөн зарарлы. Петрушканың барлыҡ өлөштәре лә бәүел ҡыуығы һәм аналыҡты таҙарта. Үлемесле ағыуҙарҙан һөҙөмтәле".

**Простатит.** Үҫеп ултырған үләнен дә алырға мөмкин, әммә тамырын ҡулланыу һөҙөмтәлерәк. Уны яҡшылап йыуырға һәм ваҡлап турарға. 1 тулы ҡалаҡ әҙерләмәгә ярты стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға (яҡынса 10 сәғәткә). Иртәнсәк һөҙөргә. Ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Әгәр ҡыш дауаланһағыҙ, 4 балғалаҡ киптерелгән тамырына ярты стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста 8 сәғәттән оҙағыраҡ төнәтергә кәрәк. Шулай уҡ ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Күрем күп килһә, һыҙландырһа, үҙ ваҡытында килмәһә.** 4 балғалаҡ петрушка орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә, талғын ғына утта 15 минут тоторға. Һыуытып һөҙөргә. Ашаған арала көнөнә 5-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Перикардит (йөрәк көбө шешеүе).** Ике уртаса ҙурлыҡтағы петрушка тамырын ваҡларға һәм һауытҡа 1,5 литр һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып, талғын утта ҡайнатырға. Һыуы 0,5 литр ҡалғансы ҡайнарға тейеш. Шунан һөҙөргә, ике лимон һутын һәм 100 грамм бал ҡушып, яҡшылап болғатырға. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә. Һыуытҡыста һаҡларға.

**Эскелек.** 30 грамм петрушка орлоғо һәм 50 грамм ваҡланған яңы кәбеҫтә япрағын алып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Термоста 15 минут тоторға. Ашарҙан саҡ ҡына алда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә. Был рәүешле 2 аҙна дауаланырға. Спиртлы эсемлектәр ҡулланыуға теләкте баҫа, ваҡыты-ваҡыты менән ҡабаттан дауаланып торорға.

**Артрит.** 1 балғалаҡ киптерелгән петрушка үләне һәм тамыры ҡатышмаһына 2 стакан эҫе һыу ҡойорға. 9 сәғәт төнәтергә. 3 көн дауамында ашарҙан алда 2-3 ҡалаҡ эсергә. Быуындар һыҙлағанда ауыртыныуҙы баҫа һәм шешенеүҙе бөтөрә.

**Цистит.** 4 балғалаҡ петрушка орлоғон онтаҡҡа иҙергә, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм тағы 10-12 минут талғын утта ҡайнатырға. Һыуынғас һөҙөргә. Ашауға ҡарамайынса, көнөнә 4-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Балаларға төнәтмәне балғалаҡлап эсерәләр.

**Һимеҙлек.** Көн һайын 1-әр стакан яңы петрушка төнәтмәһен эсергә. Уны 1-2 балғалаҡ йәшел үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп әҙерләргә. Бер нисәгә бүлеп, көн дауамында эсергә лә ярай.

**Иҫкәрмә.** Петрушканы сикләүҙәрһеҙ ҡулланырға ярай, тип уйламағыҙ. Петрушка дауалары бөйәр паренхимаһын ҡуҙғыта, шуға уны нефрит булғанда ҡулланырға ярамай. Ул ауыры йыш төшкән ҡатын-ҡыҙҙарға ҡурҡыныс. Йөклө осорҙа петрушканы бөтөнләй ҡулланмаҫҡа, югиһә ул сабыйҙы ваҡытынан алда табыуға килтереүе ихтимал.

**Рим ӘХМӘДОВ китабынан.**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# СӘЛӘМӘТ ТУҠЛАНЫУ



**Социологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә Рәсәй Федерацияһы Роспотребнадзоры белгестәре, кешенең сәләмәт туҡланыу ғәҙәтен булдырыуҙа ғаилә һәм мөхит төп ролде уйнай, тигән һығымтаға килә.**

Асыҡланыуынса, сәләмәт тормош алып барыусыларҙың дуҫтарының һәм туғандарының 79 проценты зыянһыҙ аҙыҡ-түлек һайлай. Уларҙың даирәһендә үҙ туҡланыуына яуаплы ҡарағандар күберәк, шул уҡ ваҡытта сәләмәт тормошҡа иғтибар бирмәгәндәрҙең дуҫтары һәм туғандары араһында сәләмәт аҙыҡ-түлекте бик һирәктәр генә ҡуллана.

Сәләмәт туҡланыу принциптарына тоғро ике төркөм респонденттарҙың мөхитендә сәләмәт тормош алып барыусылар 90 процент булһа, сәләмәт тормош алып барырға ниәт итеүселәр 88 процент тәшкил итә. Яҡындарын сәләмәт туҡланыуға ылыҡтырыу өсөн рәсәйҙәр үҙҙәрен миҫал итеп килтерә: уларҙың дөйөм сәләмәтлеге яҡшыра (68 процент), иммунитеты нығына (61 процент), тән ауырлығы кәмей (47 процент), тире торошо (38 процент), йоҡоһо яҡшыра (33 процент), стресҡа бирешмәүсәнлек арта (25 процент).

# ҠЫҘЫЛ БОРОС



**Америка ғалимдары үткәргән тәжрибәләре нигеҙендә әсе боростоң йөрәк сирҙәренән һәм яман шештән үлем ихтималлығын кәметеүгә һәләтлеген асыҡлаған.**

Today News Ufa сығанағы хәбәр итеүенсә, был хеҙмәт авторҙары әсе ҡыҙыл борос составындағы алколоид - капсаицин тап ана шундай һөҙөмтә бирә, тип иҫәпләй. Бынан тыш, ошо матдә йыйырсыҡтарҙан һәм артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ла булышлыҡ итә икән. Кардиологтар һәм диетологтар бер тауыштан ошо тәмләткестең ҡан тамырҙары ҡыҫылыуын бөтөрөүен һәм уларҙы киңәйтеүен раҫлай. Ә шулай ҙа эксперттар кинәт кенә был ҡырҡыу тәмләткес диетаһына күсергә кәңәш итмәй, сөнки, әгәр организм бындай ризыҡҡа өйрәнмәгән булһа, ул ашҡаҙан һәм эсәк юлдарын яндырыуы ихтимал һәм уның бындай тәьҫире үҙе үк яман шеш барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе булыуы бар. Иң һәйбәте, ҡыҙыл боросто төрлө йәшелсәләргә ҡушып ҡулланыу.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ӨЛӘСӘЙ ӘКИӘТТӘРЕ ЛӘ...

## баланы үҙ асылына әйҙәй

**Башҡорт дәүләт университеты ғалимдары Рәсәй халыҡтарының милли мәҙәни мираҫы йылы сиктәрендә мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн тәғәйенләнгән үҙенсәлекле проектты тормошҡа ашырған. Улар "Өләсәйем әкиәттәре" тигән үҫтереүсе тематик күнекмәләрҙе төбәктең үҙенсәлегенә таянып, туған телдәрҙә эшләгән. Уны 2022 уҡыу йылы башында республиканың мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында ҡуллана башлаясаҡтар. Рәсәйҙең Туған телдәрҙе үҫтереү һәм һаҡлау фонды башланғысында проект туғыҙ телде үҙ эсенә алған, әлеге көндә рус һәм башҡорт телдәрендәгеһе донъя күргән. Был проект тураһында башҡортса альбомдың авторы, БДУ-ның башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә АБДУЛЛИНА менән әңгәмәләштек.**




**➔ Был эшкә нисек тотоноп киттегеҙ?**

- Был проектҡа беҙ, мин һәм фольклорсы, факультетыбыҙ уҡытыусыһы Олеся Әхмәтрәхимова, Мәскәү ғалимдары тәҡдиме буйынса ҡушылдыҡ һәм Рәсәй халыҡтарының 9 телендә нәшер ителәсәк дидактик альбомдарҙың башҡортсаһын эшләнек. "Өләсәйем әкиәттәре" һәр халыҡтың ауыҙ-тел ижадында уларҙы берләштергән төшөнсәләр, сифаттар, донъяға ҡараш булыуын сағылдырҙы. Беҙгә "үҙ-ара ярҙамлашыу", "дуҫлыҡ", "ышаныс", "хеҙмәт", "йорт", "ҡунаҡсыллыҡ", "аҡыл", "изгелек" тигән төшөнсәләргә тап килгән әкиәттәрҙе һайларға тәҡдим ителде. Күбеһенсә башҡорт халҡына хас булған милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырған халыҡ әкиәттәре һайлап алынды. Альбомдар бик сағыу итеп эшләнгән, унда буяу өсөн дә, логикаға ҡоролғаны ла, тәржемә талап иткән күнегеүҙәр ҙә бар. Сағыу һүрәттәр Мәскәү рәссамыныҡы, уға ижадында башҡорт йөҙҙәре сағылырға тейеш, тигән талапты үҙебеҙ ҡуйғайныҡ.

Был комплекслы дидактик материалды барлыҡ балалар баҡсаһында, башҡорт төркөмдәрендә һәм яңы ғына модаға инә башлаған полилингваль булғандарында ла ҡулланырға мөмкин. Ул 3 йәштән 7-гә тиклемге балалар өсөн тәғәйенләнгән, балалар үҙаллы ла, тәрбиәселәр йәки атай-әсәйҙәре менән дә эшләй ала. Рус телендә нәшер ителгәне "Бабушкины сказки" тип атала һәм урыҫ халыҡ әкиәттәренән тора, башҡортсаһын "Хәҙисә өләсәй әкиәттәре" тип исемләнек. Бында 16 әкиәт тупланыҡ, һәр береһе буйынса кәмендә 2 карточка төҙөлгән. Балаларға "Айыу менән бал ҡорттары", "Икмәк", "Хәйләкәр төлкө", "Дүрт һылыу", "Ҡуян менән һайыҫҡан", "Бабай менән айыу", "Нужа", "Шалҡан", "Йәнлектәр нисек ҡулға эйәләшкән?", "Кәзә менән һарыҡ", "Рәхмәтле ҡуян", "Етегән", "Алдар", "Асылыкүл", "Кесерткән ниңә уҫал?", "Алтын балта" тигән әкиәттәр менән танышырға тәҡдим итәбеҙ. Башҡортса альбомдың "Хәҙисә өләсәй әкиәттәре" тип аталыуы ла юҡҡа түгел: беҙ уны эшләгәндә фольклор белгестәренән тыш, халыҡ араһынан мәғлүмәт биреүсе кешеләрҙең яуаптарына ла мөрәжәғәт иттек һәм күп осраҡта Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Хәҙисә Ғәниеваның һөйләгәндәренә таяндыҡ. Шуға уның исемен ошолай мәңгеләштерергә булдыҡ.

Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен үҫтереү һәм һаҡлау фонды тигән яңыраҡ эшмәкәрлеген туҡтатҡан ойошманың проекты ине был, шуға данаһы сикләнгән булды, әммә республиканың һәр балалар баҡсаһына берәрҙән таратырға етер, тип уйлайбыҙ. Күберәк нәшер итеп сығарыу мөмкинлеген һорап, Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығына мөрәжәғәт иттек әлегә.

**➔ Бындай проекттарҙың әһәмиәте ниҙә?**

- Тәү сиратта баланың ике теллелеген үҫтереүгә йүнәлтелгән булыуында. Сөнки, ни тиһәң дә, бөгөн күп кенә балаларыбыҙ бер телдә саф ҡына һөйләшә алмай. Бынан тыш, төрлө мәҙәниәттәргә ҡарата ихтирам тойғоһо уятыу, тәрбиәүи йәһәттән дә мөһим был. Әлбиттә, баланың дөйөм үҫешенә ыңғай йоғонто яһаған эш төрҙәрен һайланыҡ. Ғөмүмән, проектҡа беҙ балаларыбыҙҙы милли ерлектә тәрбиәләүҙе һаҡлап ҡалыу маҡсатында ҡушылғайныҡ. Юғиһә, сит илдә сыҡҡан, Рәсәй прокатында күрһәтелгән киң билдәле йәнһүрәттәр миҫалында тәрбиәләнгән йәш быуын үҙҙәренең милли үҙенсәлеген юғалта барыуын күреп торабыҙ. Әлегә тиклем эшләнгән күп теллелеккә ҡоролған шундайыраҡ ҡулланмалар төрлө мәҙәниәттәр солғанышында йәшәгән балаларҙың башын әйләндерә. Мәҫәлән, ул Иван-дурак тураһында әкиәттәрҙе ҡарай ҙа, уның мейес башында ғына ятып, үҙенә кәрәккә өлгәшеүен күрә һәм күңелендә мин дә шулай барыһына ла еңел генә ирешһәм ине, "суртан әмере" менән ҡулға аҡса инһә, тормошом гел шулай көйлө генә барыр ине, тигән уй тыуырға мөмкин. Ә беҙҙең әкиәттәрҙә тик үҙ көсөң, аҡылың менән нимәгәлер өлгәшеп була, тигән идея һалынған. Шулай уҡ альбомға ингән әкиәттәрҙә башҡорттарға ғына хас кәсеп-шөғөлдәр, географик атамалар ҙа сағыла. Тағы ла заман башҡортона хас булырға тейеш, үҙебеҙ күрергә теләгән характер һыҙаттарын да бирергә тырыштыҡ. Беҙ көрәшеү өсөн түгел, ә тормошта үҙ урыныбыҙҙы табыр өсөн, бер-беребеҙгә ярҙамлышып һәм ышанып, дуҫлыҡта, тыныс хеҙмәттә, хәләл көс менән йорт төҙөп, ҡунаҡсыллыҡ күрһәтеп, аҡыл менән, изгелек ҡылып йәшәргә тейешбеҙ. Былар барыһы ла ошонда тупланған, ә батырлыҡ темаһынан махсус рәүештә ситкә киттек.

**➔ Юғары уҡыу йорттарының ҡабул итеү комиссиялары үҙ эшен башланы, һеҙҙең факультетта ниндәй яңылыҡтар бар?**

- Быйыл беҙ, ниһайәт, журналистиканың башҡорт бүлегенә студенттар ҡабул итәсәкбеҙ. Был күптән көтөлгән яңылыҡ, 15 бюджет урынының 8-е ошо бүлеккә тәғәйенләнде. Шулай уҡ бына хәҙер бишенсе йыл рәттән эске туризм өсөн белгестәр әҙерләйбеҙ, улар сит телдәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүсе экскурсовод-гидтар буласаҡ. Был студенттар Башҡортостандың дәүләт телдәрендә иркен аралашҡан, берәй көнсығыш телен белгән, илебеҙҙең төрлө туристик маршруттарын яҡшы өйрәнгән, музейҙарҙа тәжрибә туплаған белгестәр булып сыға. Тағы ла көнсығыш телдәрен тәрәнәйтеп өйрәнгән журналистарҙы уҡыта башлаясаҡбыҙ, был түләүле йүнәлеш буласаҡ. Уларға дипломдарына өҫтәп Европа ҡушымтаһын алыу мөмкинлеге бирелә. Әлбиттә, быға тиклем асылған уҡытыу йүнәлештәренә лә абитуриенттарҙы көтөп ҡалабыҙ.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОНЪЯ - ЙОҘАҠ,

## аҫҡысы - белем

Башың диуанаға ҡалһа, бағанаға сәләм бирерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һин ғәҙәттәрең менән йәшәйһең, дөрөҫөрәге, ғәҙәттәр һинең менән йәшәй. Ғәҙәттәрҙең үҙ энергияһы бар, шуға ла улар һәр саҡ дауамлы була. Әлбиттә, улар энергияны һинән ала, һин элек тә, хәҙер ҙә улар менән хеҙмәттәшлек итәһең. Тора-бара ғәҙәттәрең һинең хужаға, ә һин уларҙың хеҙмәтсеһенә, бары тик күләгәһенә әйләнәһең. Ғәҙәттәрең һиңә бойороҡ бирә, һин уларҙы һис һүҙһеҙ тормошҡа ашыраһың...**

**...Әхмәт исемле ишан сираттағы тапҡыр хаж сәфәренә йыйына башлаған. Уға башҡа дин әһелдәре лә ҡушылған. Был юлы ишан һәм уға эйәргән дин әһелдәре хаж сәфәрендә бер йыл булырға ниәтләй. Юлға сығыр алдынан ишанға был тирәлә даны таралған бур килә. "Мин бур һәм һинең эргәңдә булырға лайыҡлы түгел икәнемде беләм. Ләкин һин миңә өмөт бир һәм үҙең менән бергә хаж сәфәренә ал, зинһар..." ти. "Был минең өсөн бик ауыр ҡарар, - ти ишан. - Беҙ был юлы хаж сәфәрендә бер йыл булабыҙ, һин шул осорҙа түҙмәҫһең, тағы урлаша башларһың. Шуға ла был уйыңды башыңдан сығарып ташлау хәйерлерәк булыр..." Әммә бур ныҡышыуын белә: "Ошо бер йыл эсендә мин бер нәмә лә урламаясаҡмын, һүҙ бирәм..." Ишан ризалаша. Урынға барып, бер аҙна үткәс, ишан менән бергә килгән төркөм эсендә аңлашылмаған хәлдәр башлана. Хаж ҡылыусыларҙың сумаҙанынан берәм-берәм әйберҙәр юғала. Ләкин бер нисә көндән юғалған әйберҙе икенсе кешенең сумаҙанынан табалар. Ә ул кеше был әйберҙең үҙ сумаҙанына нисек килеп эләгеүе тураһында бер ни ҙә белмәй. Ишан был хәлдең кем тарафынан ойошторолоуын аңлай һәм бер төндө йоҡламайынса күҙәтергә була. Төн уртаһында улар йоҡлаған бүлмәгә баяғы бур килә һәм бер кешенең сумаҙанынан әйбер алып, уны икенсе кешенең сумаҙанына һала. Ишан: "Ни эшләйһең һин? Һин бит вәғәҙә бирҙең!" - тип ҡысҡырып ебәрә. "Мин үҙемдең вәғәҙәмде үтәйем дә инде, - ти бур. - Мин бер ни ҙә урламайым. Ләкин ғәҙәтемде ҡайҙа ҡуйайым? Төн уртаһында ниҙер урларға сыҡмаһам, йоҡлай алмайым. Миңә бер йыл буйы йоҡламаҫҡамы ни улай булғас? Һин бит изге йән. Һин мине лә йәлләргә тейешһең. Мин бер ни ҙә урламайым. Был әйберҙәр бер ҡайҙа ла юғалмай, улар бер сумаҙандан икенсеһенә генә күсә һәм һәр саҡ табыла. Хаж сәфәренән ҡайтҡас, миңә бит тағы ла ошо ғәҙәтемә буйһонорға тура киләсәк, шулай булғас, мин ул оҫталығымды онотторға тейеш түгелмен..."**

**Бына шулай, һәр кем үҙ ғәҙәттәренең ҡорбаны. Ғәҙәттәрең һәр ваҡыт һинең менән идара итә. Шунан инде һин тотҡон, ҡол тормошо менән йәшәйһең. Төрмә һинең ғәҙәттәреңдән, һин ҡылған ҡылыҡтарҙан хасил була..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
15 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 875

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.